**✓Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгәндәр 5 декабрҙән 15-нә тиклем был эште ташламалы хаҡтар менән атҡара ала. Шулай итеп, ВО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 445 һум 56 тингә, ВО673 (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) индекслыһына - 451 һум 56 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыл ветерандары 398 һум 62 тингә яҙыла алаһығыҙ. Мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмайыҡ!**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6 - 12 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№49 (623)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ауырлыҡтары барланды ла ул...**

тик улар ҡағыҙҙа ғына ҡалмаһын ине



5-6

**Ниндәй генә заманда ла...**



8-9 үҙгәрешһеҙ ҡалырға тейешле ғаилә ҡиммәттәре бар

**Булыр илдең ҡатын-ҡыҙҙары...**



10-11 бер-береһенә "Ағинәй" тип өндәшер

**Милли фильмдар менән...**

донъяны ла яуларға була



15-16

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Өйҙән "суп сығармаҫҡа", ғаиләһен һаҡларға тырышып, балалар хаҡына, тип, ҡатын-ҡыҙҙың байтағы һәр төрлө көс ҡулланыу, йәберләү-рәнйетеүҙәргә түҙеп йәшәй бирә. Бындай хәлдән сығыу юлдарын нимәлә күрәһегеҙ?

*Сәлиә МЫРҘАБАЕВА, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:* Был донъя кимәлендәге ғәйәт көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе. Айырыуса көнкүрештә ҡатын-ҡыҙға ҡарата көс ҡулланыуҙың төрлө алымдары киң таралған. Уның емергес эҙемтәләре айырым кешеләрҙең тормош сифатында ғына түгел, ә тотош йәмғиәт торошонда ла сағылыш таба. Донъя күләмендә 1 млн 800 мең ҡатын-ҡыҙ ғаиләлә йәберһетеүҙәргә дусар ителә. Былтыр ғына ла беҙҙең илдә, мәҫәлән, енәйәтсел йәбер-золомдан 9 меңдән ашыу ҡатын-ҡыҙҙың ғүмере өҙөлһә, 11 меңдән ашыуының сәләмәтлегенә зыян килтерелгән. Был хәлдән ҡотолоу юлын мин проблеманы закон нигеҙҙәренә көйләүҙә күрәм. Донъя тәжрибәһе көнкүреш золомона ҡаршы махсус закон нигеҙҙәрендә көрәш алып барыуҙың һөҙөмтәле булыуын раҫлай. Бөгөн бындай закондар 60 илдә ғәмәлгә ашырыла, уларҙы ҡулланыу ғаилә золомо осраҡтарын 40 процентҡа тиклем кәметеүгә килтергән.

Проблеманың киҫкенлеген иҫәпкә алып, Дәүләт Думаһының Сәләмәтлекте һаҡлау комитеты тарафынан Рәсәй хөкүмәтенә ғаиләлә һәм көнкүрештә көс ҡулланыу осраҡтарын иҫкәртеү буйынса федераль закон проектын әҙерләргә тәҡдим ителде. Бөгөнгө көнгә бындай проект әҙер, уның буйынса ошо мәсьәләгә мөнәсәбәте булған ведомстволар, юридик берләшмәләр, эксперттар һәм йәмәғәт ойошмаларында фекер алышыуҙар бара, проект шулай уҡ федераль башҡарма власть органдары менән килешеү процедураһы үтә. Әйтергә кәрәк, ғаиләлә көс ҡулланыуҙы иҫкәртеүҙең башҡа төрлө мөһим йүнәлештәре лә бар, әлбиттә. Йәмғиәтебеҙ бындай күренеш менән килешеп йәшәргә тейеш түгел. Был мәсьәләгә ҡарата күнегелгән менталитетты үҙгәртеү, йәмәғәтселек фекере тыуҙырыу аша, Кеше хоҡуҡтары буйынса уполномоченныйҙар институтының, йәмәғәт ойошмаларының, дини конфессияларҙың, киң мәғлүмәт сараларының дөйөм тырышлыҡтары менән генә бындай социаль проблеманы еңергә мөмкиндер, тип уйлайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### КЕМ АЛЫҠ!



Декабрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер шулай уҡ "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"; "История башкирского народа", Нияз Мәжитовтың "История Башкортостана", "Антология поэзии Башкортостана", Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", башҡортса "Дини календарь", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал.

### УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ТӨПЛӨ ФЕКЕРЛЕ, КИҢ МӘҒЛҮМӘТЛЕ

**Яратып уҡыған баҫмаларым "Башҡортостан" гәзите - олпат һәм рәсми, "Йәшлек" йәштәрсә сая булһа, "Киске Өфө" гәзите төплө фекерле, киң мәғлүмәтле булыуы менән иғтибарҙы, ихтирамды яулап алды.**



Үҙ еребеҙҙә үҙебеҙ хужа булырға тейешлекте төплө, ипле итеп аңлата белеүсе, халҡыбыҙҙа милли ғорурлыҡ, сәм, ғәм тойғоһон уятырға ынтылыусы, күңелдәргә афоризм кеүек уйылған тос фекерҙәре менән уйланырға мәжбүр итеүсе етди, абруйлы гәзит ул - "Киске Өфө".

Милли баҫмаларыбыҙ араһында иң йәштәренән булһа ла, гәзитебеҙҙе тәжрибәле, олпат, аҡты ҡаранан айыра белгән, ваҡлыҡтарҙан өҫтөн була алған, бар белемен уҡыусыһына тапшырырға ынтылған остаз менән сағыштырыр инем. Үҙ үҫеше менән генә сикләнеп ҡалмай ул, үҙенән дә мәғлүмәтлерәк, төплөрәк йәш быуынды тәрбиәләүгә хеҙмәт итә.

Иғтибарыбыҙҙы көндән-көн нығыраҡ йолоп ала барған интернет селтәрендә башҡортса форумдарҙағы бәхәсләшеүҙәрҙе күҙәтеп барырға күнеккәнмен. Уларҙың күпселеге менән танышып сыҡҡандан һуң, күңелдә бер генә фекер ҡала: "Булыр илдең балаһы бер-береһен "батыр" ти. Бөлөр илдең балаһы бер-береһен "бахыр" ти". "Киске Өфө" гәзите иһә бәҫле, арҙаҡлы шәхестәребеҙҙе генә түгел, тырыш, маҡсатлы йәштәребеҙҙе, киләсәккә ҙур пландар менән йәшәүсе мәктәп уҡыусыларын да киң йәмәғәтселеккә танытып, халҡыбыҙҙы ҙурлай икән, беҙ ҙә үҙ сиратыбыҙҙа яратҡан гәзитебеҙҙе "Булыр илдең балаһы" тип хаҡлы рәүештә баһалай алабыҙ.

**Гөлнур ҠАСҠЫНОВА,
БДУ-ның Бөрө филиалы доценты.**

✔ Йәштәргә шуны әйткем килә: нимә менән шөғөлләнһәгеҙ ҙә, ҡайһы юлды һайлаһағыҙ ҙа, һәр ваҡыт запас вариантығыҙ булһын. Бер төрлө килеп сыҡмаған осраҡта, икенсе төрлө эшләп ҡарарлыҡ булһын.



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ҮҘ ЮЛЫН...
## үҙе һайлаһын бала

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы:** Беҙ һуңғы ваҡытта "Еңел булмаған заман", "Ауыр осор" тип ҡабатларға әүәҫләнеп киттек. Мин үҙем был һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланыуға ҡырҡа ҡаршымын. Сөнки, ауыр заманда йәшәйбеҙ, тип һөйләп, йәштәрҙе өркөтәбеҙ. Улар: "Һеҙҙең заманда йәшәү күпкә яҡшы булған, рәхәт йәшәгәнһегеҙ, хәҙер килеп беҙгә ошо ауыр заманда аҡыл өйрәтеп ултыраһығыҙ", - тип әйтергә мөмкин. Һәр осорҙа ҡатмарлы, хәл иteләһе ауыр мәсьәләләр була, шунһыҙ йәмғиәт алға китмәй. Әммә тормоштағы бер хәл-ваҡиғаны ла ауырлыҡ тип ҡабул итергә ярамай, уны сираттағы һынау итеп ҡарарға кәрәк. Был һынауҙы нисек еңеп сығырға, ниндәй әмәл күрергә икән, тип уйлап, ҡатмарлы ситуацияларҙан сығыу юлдарын табып өйрәнергә кәрәк. Ауыр заман, тип, танауҙы төшөрөп, туҡтап ҡалырға тейеш түгелбеҙ. Һәр кеше алдына ҡуйылған бурысты үҙе үтергә, һынауҙарҙы үҙ аҡылы менән йырып сығырға тейеш. Ә тарихтан, ололарҙың һөйләгәненән бары тик фәһем генә алырға мөмкин.

Шуға күрә, мәктәптәге тарих дәрестәрен ата-бабаларыбыҙҙың һәр осорҙа милләтте, халыҡты, ерҙе, һыуҙы, телде, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы һаҡлап ҡалыр өсөн ниндәй ауырлыҡтар үтеүе, ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыу өсөн ниндәй юлдар табыуы, ниндәй еңеүҙәргә өлгәшеүе тураһында һабаҡ ала торған, фәһемле предмет итеп уҡытырға кәрәк. Үҫеп килгән быуын кем алдындалыр аҡланмай, кемгәлер һылтанмай, кемдәндер яҡлау эҙләмәй, һалынмай ғына үҙҙәренең эске энергияһын бер йөҙроҡҡа төйнәп, үҙ көстәре менән мәсьәләне хәл итергә өйрәнергә тейеш. Сөнки бер кеше икенсеһенә бер ваҡытта ла таяныс була алмай, уны етәкләп алып китеп йә артынан этеп ебәреп тә булмай. Кемгәлер аҡыл өйрәткәндә, кәңәш һорап килеүселәргә һәр ваҡыт бер-нисә юл күрһәтергә кәрәк. Ул үҙ көсөнә таянып, шарттарҙан сығып, артабан ҡайһы юлды һайлауын үҙе хәл итергә тейеш. Юғиһә, ул кеше анһатҡа һалышып, артабан был проблема тейешенсә хәл ителмәй ҡуя ҡалһа, кәңәш биреүсене ғәйепләп, үҙе артабан ни эшләргә белмәй юғалып ҡалырға мөмкин.

Йәштәргә шуны әйткем килә: нимә менән шөғөлләнһәгеҙ ҙә, ҡайһы юлды һайлаһағыҙ ҙа, һәр ваҡыт запас вариантығыҙ булһын. Бер төрлө килеп сыҡмаған осраҡта, икенсе төрлө эшләп ҡарарлыҡ булһын - арттағы күперҙәрҙе яндырмағыҙ. Ҡош балаларын осорған саҡта елгә ҡаршы осора, "Минең арттан киттек", тимәй. Шуның кеүек, ата-әсәләр ҙә балаларына улар теләгән юлды үҙҙәре һайларға мөмкинлек бирһен ине. Киләсәгебеҙ үҙаллы һәм төрлө хәлдәрҙә лә юғалып ҡалмаҫтай балалар ҡулында икәнен онотмайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Өйҙән "суп сығармаҫҡа", ғаиләһен һаҡларға тырышып, балалар хаҡына, тип, ҡатын-ҡыҙҙың байтағы һәр төрлө көс ҡулланыу, йәберләү-рәнйетеүҙәргә түҙеп йәшәй бирә. Бындай хәлдән сығыу юлдарын нимәлә күрәһегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Нурмөхәмәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесе, мөфтөй:*** Ғаиләләге ҡатын-ҡыҙ тураһында һөйләгәндә, беҙ иң тәүҙә әсә һәм ир ҡатынын күҙҙә тотабыҙ. Ҡөрьәндә улар хаҡында "Йәннәт - әсәләрҙең аяҡ аҫтында" тиелһә, ирҙәргә төбәп, улар - һеҙҙең яртығыҙ, тип әйтелә. Бөтөн тереклекте тыуҙырыусы ерҙе лә бит хатта ҡатын-ҡыҙға тиңләп, Ер-әсә тип әйтәбеҙ. Тимәк, уларҙа изгелекле, оло хөрмәткә лайыҡ йәндәрҙе күрәбеҙ. Ислам дине ҡатын-ҡыҙҙы теләһә ниндәй осраҡтарҙа ла йәберләүҙе, уларға ҡул күтәреүҙе хупламай, сөнки был изгелек, ғәҙеллек һәм мәрхәмәткә өндәүсе Ҡөрьәндең төп асылына ҡаршы килә. Улай ғына ла түгел, тыныс, татыу тормош булдырам, тип, ҡатын-ҡыҙҙы ҡыйырһытыуҙың һәм шул сәбәпле яңъял килтереп сығарыуҙың ҙур мәғәнәһеҙлек, аҡылһыҙлыҡ икәне сабыйға ла хатта аңлашылып торалыр. Ризаитдин яҙып ҡалдырған нәсихәттә лә бит, ҡатындың холҡон боҙоусы, ысын кешелектән сығарыусы - ирҙәрелер, тигән фекер әйтелә. "Иң тәүҙә үҙегеҙ яҡшы булһағыҙ, һуңынан ҡатындарығыҙға яҡшы тәрбиә бирегеҙ. Ирҙәр боҙоҡ булмаһа, ҡатындар яҡшы булыр," тигән һүҙҙәр менән бәхәсләшеп тороу ысын ирҙәрсә түгелдер. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис сәләм үҙенең хушлашыу хажында, ҡатын-ҡыҙ хаҡын үтәгеҙ, тип әйтеп ҡалдырған икән, ирегеткә был хаҡта уйланырға нигеҙ бар.

***Мәрйәм ТАҢҒАТАРОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Бөтә донъя ҡатын-ҡыҙҙары көс ҡулланыуға ҡаршы көрәш көнөн 1981 йылдан алып билдәләп килә. Рәсми статистика буйынса, үҙ ғүмерендә һәр өсөнсө ҡатын төрлө йәберһетеүҙәргә, енси яҡынлыҡҡа мәжбүр итеүҙәргә, көс ҡулланыуҙың башҡа рәүештәге осраҡтарына дусар булып йәшәй. Күршебеҙҙәге иҫерек ирҙең аҙна һайын тип әйтерлек яңъял ҡуптарыуын, ҡатынының сеңләп илауын да ишетәбеҙ, күҙ төбөнә "фонарь ултыртылған"дарҙы ла йыш күрәбеҙ. Көндәлек тормошта аҙым һайын осрай улар, тик беҙ, күршеләре, таныштары, хатта туғандары, ҡыҫҡаһы, йәмғәтселек бындай факттарға күнегелгән мөнәсәбәттә ҡала килә. Ә ни эшләргә һуң? Икенсе көн ҡараһаң, әлеге күршеләр һин дә мин күтәренешеп, баҙарҙан ҡайтып килә. Күҙе күктәр ҙә милицияға барып, туҡмалыу хаҡындағы ғаризаларын кире ала һәм йыртып ташлай, сөнки бының аҙағы тағы ла ҡурҡынысыраҡ икәнен аңлай улар: үҙ ирен күрәләтә судҡа биреп, ултыртып ҡуйырға теләйме ни ул?! Баш ауыртыуына сыҙамағас, травмпунктҡа барып, рентген үткәйне, ә улар тотҡан да полицияға хәбәр иткән - тәртибе шулай икән. Ярашып бөткәс, өйгә участковый килеп инә, унан тағы өйҙә дауыл ҡуба. Шул да булдымы тәртип? Ҡатындарҙың күбеһе яйға һалынған тормош ағышын "кирегә" бороуҙан, үҙгәрештәрҙән дә ҡурҡа. Балаларымды атайһыҙ үҫтермәйем, тип тә түҙеп йәшәгәндәр барлығын беләбеҙ, тик ни сара ҡылырға ғына белгән юҡ. Ғаиләлә, көнкүрештә көс ҡулланыу факттарына ҡаршы бөгөнгө "көрәш" сараһы ир менән ҡатын араһына әлегеләй кәртә ҡуйырлыҡ итеп түгел, киреһенсә, уларҙы килештереү, низағ-яңъялдарҙы тыныс юл менән хәл итеүгә ҡоролһон ине лә бит. Ә әлегә, теләйһеңме, юҡмы - "суд да дело"...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**5 декабрҙән 15-нә тиклем гәзит-журналдарға ташламалы хаҡтар менән яҙылыу иғлан ителде. ВО665 индекслы "Киске Өфө"гә - 445 һум 56 тингә, ВО673 (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) индекслыһына - 451 һум 56 тингә яҙылып була, ә Бөйөк Ватан һуғышы һәм тыл ветерандары өсөн ташламалы хаҡ 398 һум 62 тин тәшкил итә.**

**Ноябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙ:**

- Бөрйән районы Иҫке Монасип ауылынан Әхәт Буранов, Миәкә районы Боғҙан ауылынан Айһылыу Солтанова, - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре";**
- Баймаҡ районы Таулыҡай ауылынан Р. Ғүмәров, Ҡыйғы районы Ибрай ауылынан Х.Шиғапов, - **"История башкирского народа";**
- Өфө районы Жуково ауылынан Миңһылыу Абдуллина, Мәләүез районы Ҡотош ауылынан З. Вәхитова, Баймаҡ районы Билал ауылынан Рафиҡ Әбйәлилов, Үрге Иҙрис ауылынан Юлай Мостафин, Ғафури районы Ташбүкән ауылынан Рәшиҙә Таһирова, Учалы ҡалаһынан Р. Нуритдинов, Әбйәлил районы Таҡһыр ауылынан Рәйлә Өмөтҡужина, Хәйбулла районы Иҫәнгилде ауылынан Б. Ғәлина, Әбделнасир ауылынан Вәзимә Ҡашҡарова, Ишембай ҡалаһынан Рауза Ильясова, Әлшәй районы Раевка ауылынан Рәзинә Ишмөхәмәтова, Ҡармыш ауылынан Зәнгиҙә Сәлимова - **башҡортса "Дини календарь";**
- Бөрйән районы Мәндәғол ауылынан Гөлназ Вәхитова, Баймаҡ районы Билал ауылынан Гөлдәр Әлибаева, Әбйәлил районы Таҡһыр ауылынан Гәүһәр Искәнйәрова, Лениза Батыршина, Салауат ҡалаһынан Әлфинур Рәхмәтуллина, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Г. Айытҡолова, Көйөргәҙе районы Көйөргәҙе ауылынан Йәмил Сурин, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан И. Искәндәров - **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китабына лайыҡ булды.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Рәсәй Президенты Владимир Путин 4 декабрҙә Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышына йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһе менән сығыш яһаны. Был - дәүләт башлығының төп Рәсәй сәйәсәте ҡағиҙәләре буйынса позицияларҙы билдәләүсе базалы документы. Быйылғы Мөрәжәғәтнамә, Борис Ельциндың һәм Дмитрий Медведевтың мөрәжәғәттәрен дә иҫәпкә алғанда, ил тарихында 21-сеһе. Владимир Путин өсөн был Федераль Йыйылышҡа 11-се мөрәжәғәт. Рәсәй Президенты билдәләүенсә, Мөрәжәғәтнамә илебеҙ йәшәгән хәҙерге заманға ла, бөгөнгө шарттарға ла тап килә.

✔ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың Федераль Йыйылышҡа йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһен уҡып ишеттереү тантанаһында ҡатнашты. Ҙур Кремль һарайының Георгий залында уҙған тантанала Федерация Советы ағзалары, Дәүләт Думаһы депутаттары, Хөкүмәт ағзалары, Конституция һәм Юғары судтар етәкселәре, губернаторҙар корпусы, Федерация субъекттарының закондар сығарыу йыйылыштары рәйестәре, традицион конфессиялар башлыҡтары, йәмғәт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән төбәктәр Йәмәғәт палаталары башлыҡтары, эре киң мәғлүмәт саралары етәкселәре ҡатнашты.

✔ Дәүләт башлығының Мөрәжәғәтнамәһенә комментарий биреп, Рөстәм Хәмитов документта иң мөһиме - "ул иҡтисади үҫеш, иҡтисади база булдырыу менән бәйле мәсьәләләр, социаль бурыстар: мәғариф, һаулыҡ һаҡлауҙы хәл итеү менән бәйле мәсьәләләр", тине. "Мөрәжәғәтнамәлә мәктәптәр етмәү темаһы айырым билдәләнә. Республика өсөн дә ул көнүҙәк. Атап әйткәндә, Өфөлә, Стәрлетамаҡта, бер нисә ҡалала бөтөнләй мәктәптәр етмәй. Балалар икенсе сменала уҡый. Бынан тыш, эшҡыуарлыҡҡа административ баҫымдың көсһөҙләнеүе менән бәйле мәсьәләләрҙе билдәләр инем", - тине республика башлығы.

✔ Мөрәжәғәтнамәгә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев комментарий бирҙе. Уның билдәләүенсә, программа документында йәмғиәт тормошоноң бөтә өлкәләре ҡуҙғатыла, масштаблы маҡсаттар ҡуйыла һәм уларға ирешеү юлдары билдәләнә, ә Мөрәжәтнамәне аңлатып биреү Рәсәй Федерацияһының стратегик ҡыҙыҡһыныуҙарын иҫәпкә алыуға нигеҙләнә.

✓ *Америка йәмғәтселеге күптән инде был ғәйәт ҡеүәтле "һимертеү фабрикаһы" продукцияһынан бүгеп, уның менән судлашып-низағлашып бөттө, ә беҙ балаларыбыҙҙы шунда алып барып туйындырыуҙы бер мәртәбә күрәбеҙ...*

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ЗЫЯНЛЫ АҘЫҠТЫ...

## өйөндә әҙерлә, әйҙә!



**Америка менән Евросоюздың Рәсәйгә ҡаршы санкцияларына яуап итеп, беҙгә лә уларға ҡарата әллә ни әҙәп һаҡлап, киң күңеллелек күрһәтеү йә булмаһа, лояль мөнәсәбәттә ҡалыу кәрәкмәйҙер, тигән фекерҙәмен. Юғиһә беҙҙең ил иҡтисадын көрсөккә килтереп терәү, тубыҡландырыу өсөн улар ни генә ҡыланмай!**

Беҙҙең илгә яҡшы мөнәсәбәт һаҡлаусы ҙур булмаған дәүләттәрҙе төрлөсә ҡурҡытыу һәм янауҙар менән Рәсәйгә ҡаршы акцияға ҡушылырға мәжбүр итеү факттары, ғөмүмән, башҡа һыйырлыҡ түгел: ошо буламы уларса демократия һәм халыҡ-ара хоҡуҡ ғәҙеллеге? Был йәһәттән улар өлгөһөнә эйәрмәгән хәлдә лә, Америка һәм Көнбайыштың йәшәйешебеҙҙе баҫып алып барған ҡайһы бер тормош рәүеше "өлгөләренән" баш тартҡанда ла ярар ине, тимәксемен. Иң беренсе булып, ниңәләр, экрандарыбыҙҙы баҫып алған Америка фильмдары протест тойғоһо уята: ниңә әле йәштәребеҙ һуштары китеп шул көс ҡулланыу, атыш-киҫеш, үлтереш кеүек эсендә йәне, рухы булмаған картиналарға йәбешеп ята? Йыһан киңлектәрен айҡаусы фантастик фильмдарында ла бит улар үҙ монополияһын раҫларға, донъяға берҙән-бер хужа - агрессия, тип ышандырырға тырыша. Был фильмдарҙы ҡарап, һәр хәлдә, мин үҙем бер ниндәй эстетик зауыҡ, күңел аҙығы булырҙай изге идея ала алғаным юҡ. Биғәйбә, бәлки, аңламайымдыр...

Тағы бер йәнгә тейгәне шул: илебеҙ ҡалаларының "Макдоналдс" корпорацияһы ауына сырмалыуы. Америка йәмғәтселеге күптән инде был ғәйәт ҡеүәтле " һимертеү фабрикаһы" продукцияһынан бүгеп, уның менән судлашып-низағлашып бөттө, ә беҙ бер ни булмағандай балаларыбыҙҙы шунда алып барып туйындырыуҙы бер мәртәбә күрәбеҙ... Зыянлы ризыҡ ашарға теләк бик ҙур икән, уны аҙыраҡ зыян менән өйҙә лә әҙерләп булмаймы ни, әйтәйек, шул ҡәһәр һуҡҡыр гамбургерҙарын? Ал да инде икмәк телемдәре, салат япрағы, помидор киҫәге, котлет һал да - аша, әйҙә, өйөндә рәхәтләнеп ултырып! Үҙебеҙҙең Өфөлә генә лә әллә күпме "Макдоналдс" тирә-йүнен ҡат-ҡат ҡыҙҙырылған май смогы менән ыҫлап ултыра. Әле бына кисә генә СССР-ҙың 50 йыллығы урамының "Промсвязь" туҡталышында тағы бер "Макдоналдс" бинаһының күккә үрләй башлағанын күреп, аптырауға ҡалдым: күпме төҙөргә була был йән көйөктәрен, һимерергә теләүселәр өсөн әле эшләп ултырғандары ла баштан ашҡан бит!

Ә Мәскәүҙә уларҙың ҡайһыларын яба башлағандар тип яҙҙылар.

**Фәрүәз ИҪӘНБАЕВ.**

# ЭСКӘН КЕШЕГӘ...

## аҡса бирергәме, юҡмы?



**"Йәш кеше, ғәфү итегеҙ, һеҙгә мөрәжәғәт итергә мөмкинме икән?" тигән һорау юл аша сығырға торған ерҙән артҡа әйләнеп ҡарарға мәжбүр итте. Шундуҡ әрмелә үҙебеҙҙең командирҙарға рөхсәт һорап ҡына өндәшеүебеҙ хәтергә төштө. "Ҡайһылай оло ағай, ә үҙе миңә, йәш кешегә, өндәшергә рөхсәт һорай", - тип уйлап ҡуйҙым да: "Эйе", - тип яуаплап, туҡтап ҡалдым...**

Яҡшы ғына кейемен үтектән үткәрмәй, әрпеш кенә итеп кейеп алған 50-60 йәштәрҙәге ағай минең янға килеп етте лә, түбәнселек менән: "Мине бысраҡ кеше икән, тип уйлай күрмәгеҙ инде. Аҡсам бөттө. Ярҙам итмәҫһегеҙме?" - тип, йөҙөнә ялбарыу саҡҡылары сығарҙы.

- Һеҙгә аҡса ниндәй маҡсатта кәрәк һуң? Араҡыға, йә тәмәкегә булһа - бирмәйем, - тигән һүҙҙәремде ишеткәс, ағай:

- Юҡ-юҡ, хәҙер әйтәм... - тине лә, бер аҙға тынып ҡалды. Минең бындай һорау биреремде көтмәне шикелле. Әңгәмәсемдең мутлашырға самалауын һиҙеп ҡалып, мин ҡырҡа һуҡтым:

- Әйтмәһәгеҙ ҙә беләм - араҡы эсергә теләйһегеҙ. Һеҙҙән алама еҫ борҡоп тора. Айыҡ булһағыҙ, һис шикһеҙ, аҡса бирер инем, ә былай - бирмәйем! - тинем дә, юлдың теге яғына ыңғайланым. Ағай: "Берүк ғәфү итә күрегеҙ! Берүк ғәфү итә күрегеҙ", - тип, светофор эргәһендә тороп ҡалды...

Юҡ инде, ағай, үҙеңә - ауырыу, туғандарыңа - ҡайғы һатып алыуыңа өлөш индерәсәгем юҡ, тигән һығымтаға килеп, дөрөҫ эшләнем тип уйлайым. Ни тиһәң дә, эскән кешенең дә, тәмәкеселәрҙең дә теләнселәп йөрөгәндә ғаиләһененең, балаларының мәнфәғәтен ҡайғыртыуын бер тапҡыр ҙа күргәнем юҡ. Әммә ҡайһы бер таныштарҙың бахмурҙан ауырыған кешеләргә "баш төҙәтергә" аҡса биреп сығарыуын күреп, ытырғанғаным бар. Улар менән килешмәйем...

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ШАҢДАУ*



# ШӨКӨР ТИП ЙӘШӘЙБЕҘ...

**Гәзитебеҙҙең 43-сө һанында "Хаҡлыҡ та бар һымаҡ" тигән исем аҫтында социологтарҙың байҙар һәм ярлылар мәсьәләһен тикшереү һөҙөмтәләре баҫылып сыҡҡайны.**

Мин ошоноң кеүек төрлө һорау алыуҙарҙың һөҙөмтәләренә, рейтингтарға ышанмайым. Ни өсөнмө? Мин 70 йәште аша атлаған быуын вәкиле. Ошо оҙон ғүмеремдә бер ҡасан да, бер кем дә минең фекеремде һорашҡаны булманы. Был һорау алыуҙарҙа илде үҙгәртеп ҡорған мәлде онотторорға тырышалар кеүек тойола. Беҙҙең быуын бар иткән байлыҡтарҙы хосусилаштырып байып ҡалғандарҙы аҡларға тырышыу, ярлы булыуығыҙҙа үҙегеҙ ғәйепле, тигән фекерҙе аңдарыбыҙға һеңдереү тип ҡабул итәм социологтарҙың был яҙмаларын.

Илдәге тотороҡлоҡ тик ил халҡының, таланһа ла, үҙҙәренән үҙҙәре көлә белеүенә генә бәйле бит. Һаҡлыҡ кассаларындағы ғүмер буйы йыйған аҡсаларыбыҙҙан ҡолаҡ ҡаҡҡас: "Беҙ - Чичиковтар!" - тип көлөштөк тә, тындыҡ. Бер-ике быуын үтеп, "талап байыу" йылдары онотолор, хәтерҙәр тоноҡланыр, шул саҡ халыҡты талап байыған байҙарға ла хөрмәт менән ҡарай башларҙар, бәлки. Илде үҙгәртеп ҡороу осоронда йәшәгән мәкерле талаусылар ябай халыҡты күпме ыҙалатһа ла, үҙебеҙҙе әле лә "ярлы", "меҫкен" тип тоймайбыҙ, "Шөкөр!" - тип йәшәйбеҙ. Юҡҡа ғына халҡыбыҙ:

*Ярлы ла ярлы тимәгеҙ,*
*Ярлы хаҡын йыймағыҙ;*
*Ярлы хаҡын йыйһағыҙ,*
*Яҡты донъя йөҙөндә*
*Рәхәт торам, тимәгеҙ*", - тип йырламайҙыр. Байлығың күп булһа, ул байлыҡты юғалтыуҙан ҡурҡып, борсолоп йәшәйһең, рәхәт йәшәмәйһең, тиҙәр бит. Тик үҙенең һәләтен, талантын, белемен егеп етеш йәшәүселәрҙең генә күңеле тыныс, уларҙы ғына халыҡ хөрмәт итә.

# ТАҒЫ ҺОРАУ ТЫУА...

**Минең һорауымды ҡолаҡҡа элеп, гәзит биттәрендә "Флешмоб" һүҙен ентекләп аңлатып яҙҙығыҙ, рәхмәт. Гөлт итеп тоҡанған, ҡайҙалыр ашыҡҡан, тиҙ-тиҙ генә сығыш яһап таралышҡан халыҡ төркөмө була икән ул.**

Тик тағы бер һорау тыуҙы бит әле. Ҡайҙа, ниңә ашығалар икән улар? Беҙҙең милләткә ашығыу бөтөнләй хас һыҙат түгел бит. "Салауат уҡыуҙарын" да ашығып флешмоб итеп үткәреп ебәрҙеләр. Әле "Шоңҡар" журналы редакцияһында эшләүселәр шағир Рәшит Назаровтың шиғырҙарын уҡыу буйынса конкурсты ла интернетта йә кеҫә телефоны аша ғына үткәрмәкселәр. Ҙур халыҡ төркөмөнөң дә ишеткеһе киләлер Рәшит Назаровтың шиғырҙарын, тигән уй килмәйме икән "ашығыусыларҙың" башына? Ҡайҙа ашығабыҙ? Кемдән йәшеренәбеҙ? Ошонда Рафаэль Сафиндың "Томан" шиғыры иҫкә төшә:

*Ҡыҫҡырғылар килә: "Етте!"*
*Етте бындай көнкүреш.*
*Алышырға икән - әйҙә,*
*Майҙан асыҡ - кил, кереш!*

*Аңла ябай бер әйберҙе:*
*Йөрәүсе хаҡ эш менән*
*Йәшеренмәй. Сыҡ ҡояшҡа,*
*Сыҡ томандар эсенән!"*

# ҮҘҘӘРЕНӘ ҮҘҘӘРЕ УТ ӨҪТӘП...

**Гәзитебеҙҙә даими баҫыла килгән "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһын күптәр яратып уҡый. 44-се һандағы аҡылды уҡып, һеҙгә бер "һаҡаллы" көләмәс яҙырға булдым әле.**

Бәлки, ишеткәнегеҙ ҙә барҙыр әле был көләмәсте. Бер һәйбәт кеше, Иҙрис тип алайыҡ уның исемен, фани донъянан үтеп, баҡыйлыҡҡа күскәс, ожмахҡа эләккән, ти. Фани тормошонда ла бик ҡыҙыҡһыныусан әҙәм булараҡ, тамуҡты ла күрһәтеүҙәрен һораған Иҙрис. Фәрештәләр уны тамуҡҡа алып барған. Иҙрис күрә: ҙур ҡаҙанда гонаһ ҡылыусылар ҡайнай. Бына берәүһе ҡаҙан ҡапҡасын асып килеп сыҡҡан да йүгереп ҡасып киткән, ти. Иҙрис ары атлаған. Тағы бер ҡаҙанда гонаһ ҡылыусылар ҡайнай, ти. Тағы берәү ҡаҙандың ҡапҡасын асып килеп сыҡҡан да, икенсе берәүҙе тартып сығарып маташа, ти. Ары китһә, тағы ла ҙур бер ҡаҙанға тап була Иҙрис. Күрә: унан берәү килеп сыҡҡан да, аҫтына утын өҫтәп, яңынан ҡаҙанға һикереп менеп сумған, ти. Фәрештәләр Иҙристең ни һорарын һиҙеп, шулай яуаплаған: "Беренсе ҡаҙанда Европа халҡы ҡайнай, уларҙың һәр береһе, үҙе ҡотолһа - шул еткән, тип йәшәй. Икенсе ҡаҙанда йәһүдтәр ҡайнай. Улар үҙе ҡотолоу менән иптәшенә йә туғанына ярҙамға ашыға. Ә өсөнсө ҡаҙанда рәсәйлеләр ҡайнай, үҙҙәренә үҙҙәре ут өҫтәп рәхәтләнә улар".

Был көләмәсте һәр кеше үҙенсә аңлар. Аҡыллыға - ишара, тиҙәр бит.

**Айгөл АХУНОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә Башҡортостанда тыуған совет дипломаты, атаҡлы ижтимағи-сәйәси эшмәкәр Кәрим Хәкимовтың 125 йыллығына арналған "Рәсәй һәм Көнсығыш илдәре: үҙ-ара эш итеү һәм хеҙмәттәшлек тармаҡтары" халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция уҙҙы. Рәсәйҙән һәм сит илдәрҙән килгән алдынғы шәрҡиәтселәр ислам һәм уның донъялағы заманса роле, Көнсығыш мәҙәниәте, шулай уҡ заманса халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙә көнүҙәк мәсьәләләр хаҡында һөйләне.

✓Ҡырғыҙстан Республикаһының Премьер-министры Джоомарт Оторбаев етәкселегендәге рәсми делегация эш сәфәре менән Башҡортостанда булды. Ҡунаҡтар Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов менән осрашты, төбәктең ауыл хужалығы һәм сәнәғәт потенциалы менән танышты, "Алексеевка" совхозында, шулай уҡ Башҡорт дәүләт аграр университетында булды. 9-10 декабрҙә Бешкәктә Башҡортостан бизнес-делегацияһы буласаҡ. Сәфәр барышында килешеүҙәр төҙөләсәк тип күҙаллана. 2015 йылдың март айында Рөстәм Хәмитов Бешкәктә Башҡортостан мәҙәниәте көндәрен уҙғарырға тәҡдим итте.

✓2015 йылдың 1 ғинуарынан Рәсәйҙә минималь эш хаҡы айына 5965 һум күләмендә билдәләнгән. Рәсәй Президенты Владимир Путин "Минималь эш хаҡы күләме хаҡында"ғы закон статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Федераль законға ҡул ҡуйған. Башҡортостанда минималь эш хаҡы 5500-ҙән 6900 һумға тиклем артты. Төбәктә минималь эш хаҡын күтәреү тураһындағы килешеүгә Рөстәм Хәмитов 2014 йылдың 1 сентябрендә БР Эш биреүселәр союзы, БР Сауҙа-сәнәғәт палатаһы һәм БР Профсоюздар федерацияһы вәкилдәре ҡатнашлығында Социаль-хеҙмәт мөнәсәбәттәрен көйләү буйынса өс яҡлы республика комиссияһы ултырышында ҡул ҡуйҙы.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Тажикстандың Рәсәй Федерацияһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы илсеһе Имомуддин Сатторов менән осрашыу үткәрҙе. Имомуддин Сатторов Тажикстандың Өфөләге яңы Генераль консулы Олимхон Шамсов менән таныштырҙы. Ул шулай уҡ Тажикстандың Президенты Эмомали Рахмондан ҙур сәләм еткерҙе һәм ауыл хужалығы мәсьәләләренә яуаплы булған вице-премьер Муродали Алимардондың Өфөгә килергә әҙерләнеүе хаҡында хәбәр итте.

**“Башинформ”дан.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ПАССАЖИРҘАР ӨСӨН...

## һәйбәт яңылыҡ

**Өфөлә яңы трамвай линиялары һалына башлаясаҡ. Яҡын киләсәктәге бурыс - "Дәүләт циркы" туҡталышынан алып "Ҡала мәҙәниәт йорто"на тиклем Октябрь проспектын трамвай линияһы менән тоташтырыу.**

Баш ҡаланың Электр транспорты идаралығы етәксеһе Асҡар Фазлыев хәбәр итеүенсә, рельстар Рәсәй урамы буйлап үтәсәк. Был проектты ғәмәлгә ашырыуға ике йыл самаһы талап ителә. Шуға күрә әлегә ваҡытта был юл участкаһында троллейбус линияһы ғәмәлдә ҡала. Шулай уҡ "Сәй фабрикаһы"нан алып Глумилино биҫтәһенә тиклемге участка ла трамвай линияһы менән тоташтырыласаҡ. Электр транспорт тармағын үҫтереүҙең өсөнсө этабы - Сипайлово биҫтәһендә трамвай юлдары һалыу. Линия Гагарин, Королев, Ватутин, Яңы тау урамдары аша үтәсәк һәм Октябрь проспектында Дәүләт циркы тирәһендә тоташасаҡ. Ҡаланың төньяҡ һәм көньяҡ өлөштәрен тулыһынса трамвай линиялары менән тоташтырыу өсөн биш йыл самаһы ваҡыт кәрәк, тип планлаштыралар идаралыҡта.

Трамвайҙар селтәрен киңәйтеүҙән тыш, транспортта уңайлыҡтар булдырыу буйынса ла эштәр башҡарыла. Вагондар махсус мейестәр менән йыһазландырыла, ул пассажирҙарға йыйылыла йөрөргә мөмкинлек бирәсәк. Водителдәрҙең ултырғыстарын йылытыу системаһы һатып алына. Шулай уҡ яҡын арала трамвайҙарҙың артҡы тәҙрәләре янып торoccусы өсмөйөштәр менән йыһазландырыласаҡ, улар транспорт туҡтаған саҡта яныып-һүнеп торасаҡ. Был автомобиль водителдәренә трамвайҙан сығыусы пассажирҙарға юл биреү бурысы хаҡында иҫкәртәсәк.

Шулай уҡ киләһе йыл Өфөнөң Инорс һәм Сипайлово биҫтәләрен троллейбус линияһы тоташтырасаҡ. Яңы троллейбус маршруттары Сипайлово аша Черниковканан һәм Инорстан ҡала үҙәгенә тура хәрәкәт ойоштороға мөмкинлек бирәсәк. Троллейбустарҙың Сельская Богородская урамы буйлап хәрәкәте өсөн контактлы селтәр электр подстанцияһына тоташтырылған, шулай уҡ бында тауҙар ҡуйылған һәм электр транспорты хәрәкәтенең линияһы проектланған.

Яңы электр транспорты маршруты Инорс халҡына юлда йөрөү ваҡытын ҡыҫҡартырға мөмкинлек бирәсәк. Троллейбустар биҫтәнән, Черниковка аша урау юлды ситләп, Сипайлово аша Менделеев урамына һәм ҡаланың тарихи үҙәгенә тура сыға аласаҡ.

Һәм тағы. Өфөлә "4-се бала табыу йорто" - "Дим" - "Миловка паркы" маршруты буйынса 254-се автобус йөрөй башланы. Әлегә автобустар Романовка һәм Мармылев ауылдарына тиклем генә бара. "Миловка паркы" торлаҡ комплексы төҙәлеп бөткәс, автобустарҙың хәрәкәте яңы биҫтәгә тиклем оҙайтыласаҡ.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Уҡыуҙа, олимпиадаларҙа, спортта, мәҙәни сараларҙа уңышҡа өлгәшкән балаларға Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы стипендияһын тапшырыу яҡшы йолаға әйләнде. Сираттағы шундай тантанала стипендиаттарҙы баш ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Биктимер улы Баязитов ҡотланы һәм стипендиялар тапшырҙы.**



# БАЛАЛАРҘЫ ЛА...

## дәртләндереп тороу кәрәк

- Балаларҙың хеҙмәтен шулай юғары баһалау киләсәктә уларға бөгөнгө көндә атҡарып булмаҫлыҡ ҡыйын тойолған маҡсаттарына өлгәшеүгә яҡшы этәргес буласаҡ, - тине тәбрикләү тантанаһын асып Сынтимер Биктимер улы һәм баш ҡалала һәләтле балаларға ярҙам итеү өсөн бөтә шарттар тыуҙырылыуы тураһында әйтте.

Ҡала хакимиәте башлығы исемендәге стипендияға был юлы Өфө мәктәптәрендә уҡыған 40 уҡыусы, шулай уҡ өҫтәмә белем биреү учреждениеларында шөғөлләнгән 17 бала лайыҡ булды. Ошо стипендиаттарҙың береһе Әлмирә Бәширова менән һөйләшәбеҙ. Ул Нариман Сабитов исемендәге 1-се музыка мәктәбенең 7-се синыфында белем ала. Бәләкәйҙән музыка менән шөғөлләнгән, күп конкурстарҙа еңгән. "Стипендия алыуыма бик шатмын. Һәләтле балаларҙы күреп, уларға ярҙам итеп торғандары өсөн ҡала етәкселегенә рәхмәтемде белдергем килә", - ти ул.

Алмаз Авзалов исемле малай 108-се мәктәптә 5-се синыфта белем ала икән. Ул фәнни конференцияларҙа даими ҡатнашып тора. "Быйыл әсәйем менән бергә фәнни эш яҙып, крайҙы өйрәнеү буйынса фәнни-ғәмәли конференцияла еңеп сыҡтыҡ. Хеҙмәтем менән Ижевск, Екатеринбург ҡалаларына барҙыҡ. Киләсәктә лә фән менән ныҡлап шөғөлләнергә һәм баш ҡалаға, республикаға кәрәкле, файҙалы кеше булып үҫергә маҡсат ҡуйҙым", - тип, буласаҡ ғалим киләсәккә пландары менән уртаҡлашты.

**Азамат САЛАУАТОВ.**

О, СПОРТ!

# АГРАР УНИВЕРСИТЕТ...

## баскетболсылары менән дә көслө



**Башҡорт дәүләт аграр университеты баскетболсылары студенттар араһында үткәрелгән студенттарҙың "ЕвроКап-2015" Халыҡ-ара баскетбол лигаһы беренселеге финалына сыҡты. Ошо көндәрҙә улар үҙ майҙанында М.В. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының "МГУ-Динамо" командаһы менән көс һынашып, еңеп сыҡты һәм был ярыштың финалына үткән Рәсәйҙең иң көслө дүрт командаһы исемлегенә инде.**

Осрашыуҙың тәүге минуттарында мәскәүҙәр уйын дилбегәһен үҙ ҡулына алды һәм дүртенсе минутта уҡ иҫәпте 11:3 итте. Шулай ҙа БДАУ егеттәре һаҡты көсәйтеп, тиҙҙән тупты үҙ ҡулдарына алды, алыҫтан һөжүмгә күсеп, етенсе минутта уҡ иҫәпте тигеҙләүгә өлгәште. Артабан майҙан хужалары һөжүмде көсәйтә генә барҙы һәм 97:81 иҫәбе менән еңеүгә өлгәште.

БДАУ егеттәре студенттарҙың баскетбол буйынса Европа беренселегендә Рәсәй өсөн сығыш яһаясаҡ. Беренселектә ҡатнашыусы илдәр исемлегендә Германия, Грузия, Израиль, Латвия, Литва, Сербия, Төркиә, Черногория, Чехия, Эстония, Япония бар. Ғинуарҙа беҙҙекеләр сит ил командаларына ҡаршы уйнай башлаясаҡ.

**Байым РӘХИМЙӘНОВ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯҢЫ ЙЫЛ КИЛӘ!

**Яңы йыл - һәр кемдең күңеленә ниндәйҙер мөғжизә алып килеүсе, бала саҡҡа алып ҡайтыусы һәм серле донъяға сәйәхәткә саҡырыусы байрам. Шуға күрә уны балалар ҙа,ололар ҙа берҙәй ярата һәм баш ҡалала байрам мөхитен тыуҙырыуға ябай халыҡ ҡына түгел, эшҡыуарҙар, төрлө предприятие һәм ойошма етәкселәре лә әүҙем ҡушылып, үҙҙәренә ҡараған территорияны биҙәү буйынса иғлан ителгән конкурста ҡатнаша ала.**

Еңеүселәр "Иң яҡшы биҙәлгән административ бина" (учреждениены, төрлө милек формаһындағы предприятие); "Иң яҡшы биҙәлгән мәғариф учреждениеһы"; "Иң яҡшы биҙәлгән һаулыҡ һаҡлау учреждениеһы"; "Иң яҡшы биҙәлгән сауҙа, йәмәғәт туҡланыуы, халыҡты көнкүреш хеҙмәтләндереүе предприятиеһы"; "Иң яҡшы биҙәлгән мәҙәниәт учреждениеһы"; "Иң яҡшы биҙәлгән йәштәр учреждениеһы" номинациялары буйынса билдәләнәсәк. Конкурс ике этапта үҙғарыла. Беренсеһе - 8-18 декабрь, икенсеһе - 19-31 декабрь. Һәр районда беренсе этаптың әсәр еңеүсеһе икенсе этапта көс һынашасаҡ.

# ТАҘАЛЫҠ ҺАҠЛАНА БАРЫБЕР

**Социологик һорау алыуҙар юлы менән ҡалала сүпсар сығарыуҙы ойоштороу кимәле асыҡланған.**

Өфөләрҙең 63,9 проценты был эшкә ыңғай баһа бирһә, 11,5 проценты кире ҡараште булған, ә 25 проценты яуап бирергә ҡыйынһынған. Шуны ла билдәләргә кәрәк - йылдан-йыл ыңғай баһа биреүселәр һаны арта. Әгәр 2009 йылда был күрһәткес 55 процент булһа, быйыл инде 11 процентҡа артҡан. Яуап биреүселәр үҙҙәренең йорт ихатаһындағы сүпсарҙың сығарылыуына ла ыңғай ҡарашта. 75,8 процент был эш менән ҡәнәғәт. 10 респонденттың алтыһы Өфөнө таҙа ҡала тип иҫәпләй. Дүрттән бер өлөшө был фекер менән риза түгел.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2015 йыл Башҡортостан Республикаһында, Рәсәй Федерацияһындағы кеүек, Әҙәбиәт йылы тип иғлан ителде. Тейешле Указға республика Президенты Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйҙы. Ҡабул ителгән ҡарарҙың төп маҡсаты - йәмғиәттең иғтибарын әҙәбиәткә һәм уҡыуға йәлеп итеү. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә республикала Әҙәбиәт йылын уҙғарыу буйынса ойоштороу комитетын булдырырға һәм уның составын раҫларға, төп саралар планын әҙерләүгә һәм раҫлауҙы тәьмин итергә ҡушылды. Республиканың муниципаль районлар һәм ҡала округтары хакимиәттәренә Башҡортостанда Әҙәбиәт йылын уҙғарыу сиктәрендә тейешле саралар үткәрергә кәңәш ителде.

✓Яңы йыл тантаналары өсөн республикала 143 мең ылыҫлы ағас әҙерләнәсәк. Ағастарҙың күп өлөшөн Белорет (18 мең дана) һәм Йылайыр (15 мең) райондарында әҙерләү ҡуҙаллана. "Бөгөнгә көнгә төбәктә 38 мең ылыҫлы ағас әҙерләнгән, уларҙың 12 мең самаһы һатылған. Иң күберәге ҡарағай әҙерләнгән - 26 мең данаға яҡын. Аҡ шыршы туғыҙ мең, шыршы өс мендән ашыу әҙерләп ҡуйылған. Бынан тыш, "Белорет урманы" дәүләт унитар предприятиеһы хеҙмәткәрҙәре әлеге ваҡытта 2,6 меңдән ашыу ылыҫлы ағас ботаҡтары әҙерләп һатҡан", - тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Урман хужалығы министрлығынан.

✓1, 2, 3, 4, 5, 6 һәм 8 ғинуарҙа яңы йыл каникулдары һәм 7 ғинуарҙа Раштыуа байрамы - эшләмәгән байрам көндәре. 3 һәм 4 ғинуар шәмбе һәм йәкшәмбегә тура килгәс, ял көндәре күсерелә. 3 ғинуарҙағы ял көнө йома, 9 ғинуарға, ә 4 ғинуар - дүшәмбе, 4 майға күсерелә. Был хаҡта республиканың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы хәбәр итә. Шулай итеп, биш көнлөк эш аҙнаһында республика халҡы 2015 йылдың 1 ғинуарынан алып 11-нә тиклем ял итәсәк.

✓2015 йылда пенсияның тупланма өлөшөн финанслауға күсерелгән иғәнәләр Рәсәй мотлаҡ пенсия страховкаһы системаһының "бүлеү" өлөшөнә күсереләсәк. Ул страховкаланған кешенең шәхси иҫәбендә сағыласаҡ һәм страховкалау пенсияһын финанслауға йүнәлтеләсәк. Владимир Путин "Пенсия тупланмалары булдырыу мәсьәләре буйынса Рәсәй Федерацияһындағы айырым закондар сығарыу акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Федераль законға ҡул ҡуйған.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ



# АУЫРЛЫҠТАРЫ БАРЛАНДЫ ЛА УЛ...

## тик улар ҡағыҙҙа ғына ҡалмаһын ине

**Ҡурған тигәндә, иң элек был төбәктәге башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының үҙенсәлекле милли кейемдәре һәм әлегәсә ҡулланылған француз яулыҡтары (ҡушъяулыҡтар) менән бер рәттән, Сафакүл районының Аҙналы ауылы дөйөм белем биреү мәктәбендә урынлашҡан бай экспонатлы крайҙы өйрәнеү музейы күҙ алдына баҫа. Шуға ла "Башҡортостанда - Ҡурған өлкәһе башҡорттарының мәҙәниәт көндәре" сараһына килгән делегация составында Аҙналы ауылы музейын һаҡлаусы Наил Ғилемйәновты күргәс, иң тәүҙә бөгөнгө оптималләштереү заманында үткәнде бөгөнгөгә бәйләп торған тарихи ҡомартҡылар яҙмышы менән ҡыҙыҡһындым.**

- Бөтә Рәсәй буйынса күҙәтелгән хәл, әлбиттә, беҙҙең өлкәгә лә, беҙҙең ауылға ла ҡағылмай ҡалманы. Йәштәр ситкә, ҙурыраҡ ауылдарға, район үҙәгенә күсенә, ауылда мәктәп, мәҙәниәт усағы ябылды, ҡарт-ҡоро ғына ҡалды. Нindәй генә саралар ойоштороһа ла, экспозициябыҙ менән ҡатнашабыҙ, халыҡҡа тарихыбыҙҙы күрһәтәбеҙ. Элек уҡыусылар беҙҙең мәктәпкә музей менән танышырға экскурсияға килһә, хәҙер музей үҙе мәктәптәргә сыға. Мәктәп ябылғас, ул, әлбиттә, йылытылмай. Экспонаттар махсус температурала һаҡланырға тейеш, әлбиттә, ләкин ундай шарттар юҡ хәҙер. Өфөлә шул тема буйынса ла һөйләшеүҙәр алып барҙыҡ. Кисекмәҫтән мәсьәләне хәл итергә, йә музейҙы икенсе урынға күсерергә, йә булмаһа Башҡортостанға килтерергә кәрәк, тигән һығымта яһалды...

Наил Фаил улының әсенеүҙәрен Аҙналы ауылы музейы менән таныш һәм үҙ тарихына битараф булмаған кеше генә аңлауы мөмкин. Ә инде Ҡурған өлкәһе тарих, фольклор һәм этнография менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн - үҙе бер хазина. Сөнки бында һәр һандыҡ төбөндә тарих һаҡлана. Ысынлап та, ғалимдар билдәләүенсә, Ҡурған өлкәһе - ҡатын-ҡыҙ милли кейемдәренең төп нөсхәһендә һаҡланған төбәктәрҙең береһе. Был хаҡта сара барышында уҙғарылған "Курған башҡорттары: рухи үҫеш тарихы, бөгөнгөһө һәм киләсәге" темаһына арналған түңәрәк ҡорҙа сығыш яһаусылар ҙа билдәләп үтте. Филология фәндәре докторы Әхмәт Сөләймәнов әйтеүенсә, ялан-ҡатай башҡорттары эргәһенә беренсе фольклор экспедицияһы Кирәй Мәргән тарафынан 1959 йылда ойоштороla һәм уның барышында ҡыҙыҡлы материалдар табыла - тап ошо экспедиция барышында 50-гә яҡын башҡорт халыҡ йыры тәрлө варианттарҙа яҙып алына. Һәм ошо йырҙарҙы күңел төпкөлөндә һаҡлаған Ҡурған башҡорттарының үҙенсәлеге шунда күҙәтелә: улар тәүҙә йырҙың тарихын һөйләй, шунан ғына уны башҡара.

Кирәй Мәргән экспедицияһынан һуң тағы ла бер нисә фольклор, этнографик экспедициялар ойоштороla, һәм йылдан-йыл ауыҙ-тел байлығының ярлыланыуы, материалдарҙың кәмеүе күҙәтелә. Йәғни халыҡ хәтерендә һаҡланған рухи, әҙәби байлығыбыҙ оло быуын кәмегән һайын юғала бара. Шуға ҡарамаҫтан, Ҡурған өлкәһе башҡорттары милли фольклор үҫешенә ҙур өлөш индерә. Мәҫәлән, иртәк жанры тап ялан-ҡатай башҡорттарында һаҡланып ҡалған була һәм Кирәй Мәргән уны ҡабаттан тергеҙә. Бөгөн инде иртәк жанры дәреслектәрҙә лә ҡулланыла, әҙәби һүҙлектәрҙә лә лайыҡлы урын алған.

Шулай уҡ фольклор экспедициялары барышында Ҡурған башҡорттары араһында киң таралған суҡурай тигән атама тураһында ла иҫкә алмай китеү яҙыҡ булыр. Заманында бында туйҙарҙа тиҫтәнән ашыу ҡурайсы ҡатнашҡан. Әммә милләттәштәребеҙҙең был милли уйын ҡоралы беҙ күреп өйрәнгән ҡурайҙан бер ни тиклем айырылған. Ул бәләкәйерәк, йоҡараҡ. Тиҙ ярылмаһын өсөн, киптергәндә һарыҡтың сей эсәген кейҙерәләр һәм эсенә ҡом тултырып, күләгәлә киптерәләр. Һуңынан уны шымарталар. Шундай ҡурай суҡурай тип аталған. Уның моңо ла үҙенсәлекле булған (бында "Таштуғай" йырының һүҙҙәренә иғтибар итеү кәрәктер: "Таштуғайҡай, һиненң ҡамышынды, суҡурайҡай итеп тартайым" (еҙ ҡурайҡай түгел!).

Әхмәт Мөхәмәтвәли улы үҙенең сығышында тағы ла бер етди мәлгә иғтибар йүнәлтте: Ҡурған башҡорттары бөгөн мәҙәни саралар өсөн сәхнә костюмдары һорай икән, бәлки, уларҙың



был үтенесен ҡәнәғәтләндермәҫкә кәрәктер. Сөнки, ғалим фекеренсә, бөгөн сәхнә өсөн стилләштереп тегелгән костюмдар халҡыбыҙҙың борондан ҡалған һәм бик һирәк кенә беҙҙең көндәргә килеп еткән кейем өлгөләрен ҡулланылыштан бөтөнләй ҡыҫырыҡлап сығарып бара. Әйтеп китеүебеҙсә, Ҡурған өлкәһе башҡорттарҙың милли кейемдәре бөгөнгәсә һаҡланып килгән төбәктәрҙең береһе. "Күптән түгел генә булып үткән "Ашҡаҙар таңдары" фольклор байрамында Ҡурғандан килеп, лауреат исеменә лайыҡ булған фольклор ансамбле шул төбәк башҡорттарының милли кейемдәрендә сығыш яһап, байрамдың үҙенсәлекле бер биҙәгенә әүерелде. Улар, йырлар алдынан йырҙың тарихын һөйләгән кеүек, ҡатын-ҡыҙ күлдәктәрендәге һәр һырҙың, һәр биҙәктең, һәр нағыштың нимә аңлатҡанын белә, уларҙың тарихын һөйләй. Был күлдәктәрҙә - кеше ғүмере, уның үткән юлы, күңел торошо тыуғандан алып үлгәнгә тиклем асыҡ яҙылған", - тип билдәләне ул. Тимәк, Ҡурған башҡорттарының үҙҙәренең иҫ киткес бай костюмдарын тиражларға кәрәк. Бында, әлбиттә, Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы яғынан ярҙам булыуы мотлаҡ.

Ғөмүмән, Ҡурған өлкәһенең үҙенсәлекле төбәк булыуын ҡабат-ҡабат билдәләргә мөмкин. Әлеге ваҡытта гүзәл заттарыбыҙҙың көрәш, ауыр атлетика менән шөғөлләнгәнен күреү, нисектер, ҡалыпҡа һыймаған кеүек. Әммә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының элек-электән ирҙәре менән бергә яу сапҡанын иҫәпкә алһаң, тимәк, тәбиғи көс уларға ла бирелгән. Шулай булмаһа, улар йылдар буйы ирҙәрен хәрби хеҙмәттән көтөп, донъяһын ҡарап, батыр улдар үҫтерә алыр инеме икән? Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының тәбиғи көсөн, таһыллығын раҫлауҙы тап Ҡурған башҡорттары һабантуйында күрергә мөмкин дә инде. Унда ир-ат ҡына түгел, ҡатын-ҡыҙ көрәше лә бар. Хәҙер, әлбиттә, ул күргәҙмә сығыш ҡына булып ҡалған, әммә үтһыҙ төтөн булмай бит.

Гуманитар тикшеренеүҙәр институты хеҙмәткәре, философия фәндәре кандидаты Рәфил Аҫылғужин билдәләүенсә, Ҡурған өлкәһе башҡорттарының тағы бер үҙенсәлеге - ул башҡа бер ерҙә лә осрамаған ҡалмаҡ ырыуының тап уларҙа ғына һаҡланып ҡалыуы. Мәғлүм булыуынса, милләтебеҙҙең 40-тан ашыу ырыуы бар, һәм әлеге ваҡытта ғалимдар уларҙың һәр береһе тураһында мәғлүмәт туплап, һәр бер ырыуға айырым том бағышлай. Бөгөнгә өс том донъя күргән, икеһе нәшриәттә ята, башҡалары буйынса эшмәкәрлек дауам итә.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Быума йүтәл

❖ Көҙ-ҡыш башында быума йүтәл (астма) менән яфаланыусылар бигерәк йонсой. Был сир еңелерәк үтһен өсөн 600 грамм балға 150 грамм аҡ май, бутҡа һымаҡ иҙелгән 100 грамм керән, 100 грамм иҙелгән һарымһаҡ һалырға, яҡшылап болғарға һәм һыуы ҡайнап торған һауытҡа ултыртып йылытырға, болғап торорға. Был дарыуҙы быяла һауытҡа һалып, һыуыткысҡа һаҡларға. ашарҙан 1 сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ ҡабырға, ауыҙҙа оҙағыраҡ торорға кәрәк, шул саҡта шифаһы күберәк тейә. Дауаланыуҙы 2 ай буйына дауам итергә. Был дарыу һыуыҡ тейеүҙән дә, вируслы инфекцияларҙан да һаҡлай.

❖ Астма менән ауырыусыларға, үпкәһе сирлеләргә һоло менән дауаланыу ҙа файҙалы. 1 литр һөткә 1 стакан һоло (ҡабығы менән) һалып, мейескә йәки духовкаға ултыртып, йомшартырға кәрәк. Күләме 1 стакан ҡалырға тейеш. Шуны һөҙөп, ҡуйы һоло һөтөн йылы көйө эсергә.

❖ Һолоноң һаламы ла файҙалы. Һаламды бешекләп, мискәгә һалып, ауырыуҙы шунда ултыртырға кәрәк.

### Киҙеүҙән һуң...

❖ Киҙеү (грипп) үтеп китһә лә, табы ҡала ул. Мәҫәлән, йөрәк йыш тибә, хәл бөтә, йоҡо килә, тиҙ арыта, ҡолаҡ сыңлай, күҙ алдында ҡара түңәрәктәр оса, күҙ алды ҡараңғылана икән, организмда цинк, баҡыр кеүек кәрәкле матдәләр кәмегән, тигән һүҙ. Шуға күрә витаминдар алып ашағыҙ. Антибиотиктар ҡулланыу эсәктәргә зыян килтерә, шуға әсе һөт продукттары - кефир, йогурт эсергә кәрәк.

❖ Петрушка, укроп кеүек тәмләткес үләндәрҙе күберәк ашарға кәрәк.

❖ Туйғансы йоҡларға һәм саф һауала күберәк йөрөргә кәрәк.

### Ауыҙҙан еҫ килһә...

❖ Теште таҙартҡас, ауыҙҙы ҡайын еләге япрағы, аҡ сәскә төнәтмәһе менән сайҡатырға. Төнәтмә яһау өсөн 1 стакан ҡайнап торған һыуға 1 ҡалаҡ үлән һалып, бешекләргә кәрәк.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БҮРЕ КУЛЬТЫ

**Төрлө риүәйәт-легендаларҙа, әкиәттәрҙә, шулай уҡ халыҡ байрамдары, йолаларында бүре шулай уҡ иң йыш осраған йәнлектәрҙең береһе. Тәүбабабыҙ бүре булған, тигән ҡараш та, уны изгеләштереү ҙә әле булһа ла йәшәй.**

Әгәр ҙә ғаиләлә балалар тыуып та, тормаһа, яңы тыуған сабыйға Бүребай, Байбүре, Аҡбүре, Бүрехан, Борхан, Ҡашҡар, Ҡашҡарбай тигән исем атағандар. Хәҙерге заманда бындай исемдәр осрамаһа ла, бүре атамаһынан яһалған исемдәр Көнбайыш Европанан һәм Үҙәк Азиянан алып Төньяҡ Америкаға тиклемге территорияла киң таралған. Бүре культы йәшәгән ерҙәрҙә был исемдәр һаҡлаусы ролен үтәгән.

Кеше бүренән барлыҡҡа килгән, тигән ышаныс йолаларҙа ла һаҡланған. Балаһы булмаған ҡатынды бүре ауыҙынан үткәрәләр. Бының өсөн үлтерелгән бүренең ауыҙын ҡырҡып алып, уны тарттырып, киптерәләр. Ошо уҡ йола ауыр балалаған ҡатындар өсөн дә үткәрелгән. Ғаиләлә балалар тормаған булһа, яңы тыуған сабыйҙы ла бүре ауыҙынан үткәреү йолаһы бар. Шулай уҡ ауырлы ҡатынды ете тапҡыр бүре ауыҙынан үткәрһәң, бала йәшәмеш була. Сабыйҙы ен-шайтан алыштырмаһын, быума, ҡуянсыҡ, ҡыҙма ауырыуҙарынан дауалау өсөн дә бүре ауыҙынан үткәргәндәр.

Балаға күҙ теймәһен өсөн уның муйынына бүре тештәренән яһалған муйынсаҡ таҡҡандар, бишеккә элгәндәр, йәки баланың кейеменә теккәндәр. Бишеккә бүре йөнө тегеп ҡуйыу ҙа ошо функцияны үтәгән. Бүре үте ярһыу балаларҙы дауалауҙа ҡулланылған. Был осраҡта баланың түшен үт менән ыуғандар.

Өлкәндәрҙе дауалауҙа ла бүренең төрлө өлөштәре ҡулланыла. Оло ауырыу тип йөрөтөлгән ауыр сирҙәр, быума, ҡыҙма ваҡытында бүре ауыҙы аша үткәреү йолаһы бар. Тапма менән сирлене бүре ауыҙынан өс тапҡыр үткәрәләр. Ҡотороҡ сире мәлендә ауырыуҙы бүре тырнағы менән тырнағандар һәм тырнаҡты уның муйынына элеп ҡуйғандар. Тапма, биҙгәк, ваба мәлендә лә бүре тырнағы йөрөткәндәр. Тапма менән сирлене бүренең тиреһен ябып та дауалайҙар. Ауырыу, бүренән ҡурҡып, китә, тип ышанғандар. Бүренең үт ҡыуығы бөтөн ауырыуҙан да дауалай, тип, уны күҙгә аҡ һалғанда, ҡыҙамыҡтыны, яман шеште дауалауҙа ҡулланғандар. Шуға ла бүренең тиреһен тунаған саҡта уның үт ҡыуығына зыян килтермәй генә алалар, ҡояш төшмәгән ҡараңғы урында киптерәләр, һуңынан киҫәктәргә бүлеп, муҡсала һаҡлайҙар. Кәрәк булып киткәндә, имселәр уны һыуға һалып, дарыу итеп ҡулланған.

Өй нигеҙенә йәки тупһа аҫтына бүренең баш һөйәген күмеү ғаиләне ауырыуҙан, тел-тештән һаҡлай, ҡот, байлыҡ, бәхет килтерә, тигән ышаныу ҙа бар. Ошо уҡ маҡсатта бүренең яңаҡ һөйәктәре, тырнаҡтары нигеҙгә күмелгән. Һарайҙың эргәһенә бүренең баш һөйәген күмеү, ҡураға баш һөйәген элеп ҡуйыу малды йыртҡыс януарҙар һөжүменән һаҡларға тейеш булған. Инә ҡортто бүренең муйын һөйәге тишектәренән үткәреү ҡорт ғаиләһенең эшсәнлеген арттырған.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова. "Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан. (Дауамы бар).**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ



# АУЫРЛЫҠТАРЫ БАРЛАНДЫ ЛА УЛ...

## тик улар ҡағыҙҙа ғына ҡалмаһын ине

**(Башы 5-се биттә).**

Иғтибар итһәгеҙ, сығыш яһаусыларҙы һәр ваҡытта ла ике төркөмгә бүлергә мөмкин: бөтөн нәмәне яҡшы итеп күрһәтеүселәр һәм проблемаларҙы һыҙыҡ өҫтөнә алыусылар. Һәм бындай сығыштар Ҡурған өлкәһе делегацияһына ғына хас түгел, уны бөтөн ерҙә лә күҙәтергә мөмкин. Әлбиттә, яҡшы күренештәр ҙә бар. Мәҫәлән, 2014 йылдың 4 июлендә төҙөлгән Башҡортостан Республикаһы һәм Ҡурған өлкәһе хөкүмәттәре араһында Сауҙа-иҡтисади, фәнни-техник, социаль һәм мәҙәни өлкәләге килешеү киләсәктә бәйләнештәрҙең тағы ла нығынырына ишара, бары тик уны файҙалана белергә генә кәрәк. Сөнки быға тиклем төҙөлгән килешеүҙәр нигеҙендә республиканың профессиональ һәм сәнғәт коллективтары Ҡурған өлкәһенә даими гастролдәргә сыға, ҡурғандар иһә беҙҙә үткән фестиваль-конкурстарҙа ҡатнаша. Шулай уҡ йыл һайын һабантуйҙар, фольклор байрамдары, мәҙәниәт көндәре, фәнни-ғәмәли конференциялар һәм башҡа саралар ойошторолоп тора. Шул уҡ ваҡытта башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу, милли ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һаҡлау мәсьәләләренә килгәндә, эштәр тейешенсә башҡарылмай. Тотош илдә алып барылған кире күренештәр башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙәге милләттәштәребеҙҙең бәкәленә ныҡлап һуға. Әхмәт Сөләймәнов белдереүенсә, заманында ауылдарҙы перспективаһыҙ тип бөтөрөү башланғас, Ҡурған өлкәһенең Сафакүл районында ғына 18 башҡорт ауылы юҡҡа сыға. Бөгөн иһә әкеренләп башҡалары ла шундай яҙмышҡа дусар ителә. Мәктәп һәм мәҙәниәт усағы ябылыуы - ауыл бөтөүҙең хәүефле беренсе сигналы. Ә инде башҡорт мәктәптәре ябылыуы киләсәктә оло быуын менән бер рәттән, башҡорт теленең бөтөнләй бөтөүенә килтерәсәге көн кеүек асыҡ. Сарала ҡатнашыусы Сафакүл районы Надеждин мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Йәлил Садиҡов үҙенең сығышында башҡорт теле уҡытылған мәктәптәрҙең һаны кәмеүе сәбәбен мәктәптәрҙең ябылыуына һәм уҡытыусылар булмауға бәйләне: "Быйылғы уҡыу йылында ғына өс мәктәп ябылды. Ялан, Ҡамышлы, Абултай (төп башҡорт ауылы, уҡытырға уҡытыусы юҡ), Сөләймән һәм Сафакүл (төрлө милләт йәшәһә лә, башҡорттар күп) ауылдарында башҡорт теле уҡытылмай. Өлкәгә ике тапҡыр Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институтынан килеп, уҡытыусыларҙың белемен камиллаштырыу курстары үткәрҙеләр. Беренсе тапҡыр 19 кеше уҡыһа, икенсеһендә әҙерәк була. Хәҙер инде 3-4 кеше генә уҡырға теләк белдерә. Бының да үҙенең сәбәптәре бар - халыҡ күпләп Силәбе өлкәһенә күсеп китә.

Ауыл кимәлендә генә башланып, хәҙер өлкә кимәлендә үткәрелгән "Сыңрау торна" фестивале - балаларға тел генә өйрәтеү түгел, мәҙәниәтте өйрәтеүҙә лә ҙур роль уйнай. Унда Башҡортостандан төркөмдәр йәки йырсылар килеп ҡатнашһа ла яҡшы булыр ине, балаларҙың рухын үҫтерер ине", - ти Йәлил Фәйрүз улы.

Ысынлап та, Башҡортостанда ғәҙәти кеүек тойолған күренеш тә күрше өлкә өсөн рух, дәрт, илһам һәм илһөйәрлек сығанағы булып тора. Юҡҡа ғына сығыш яһаусыларҙан, бөгөн Ҡурған өлкәһендә һәр машина салонынан "Юлдаш" каналының йырмондары ағыла, тигән ябай ғына һөйләм дә ғорурлыҡ булып яңғыраманы. Сөнки күрше өлкәлә Башҡортостан юлдаш каналы тапшырыуҙарының ҡабаттан эфирға сығыуы үҙе бер шатлыҡ булған. Әйткәндәй, Ҡурған башҡорттары үҙҙәре лә башҡортса тапшырыуҙар программаһын әҙерләй. Шулай уҡ "Замандаш" гәзите лә ауырлыҡ менән булһа ла нәшер ителә. Элегерәк был баҫма айына бер донъя күрһә, һуңынан кварталға берәүгә ҡалдырыла. Бөгөн иһә йылына ике тапҡыр ғына сыға. Бында ла уйланырға урын бар.

Башҡортостан Республикаһы суверенитет яулағандан һуң һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә лә, бигерәк тә Өфө күҙ ауырыуҙары институты менән, бәйләнештәр нығынғайны. Һуңғы ваҡытта был хеҙмәттәшлек тә туҡталып ҡалған.

Ғөмүмән, Ҡурған өлкәһе - Башҡортостандың мәжбүри рәүештә айырылған өлөшө генә түгел, ул республиканың арҡа терәрҙәй шәхестәрен тыуҙырыусы төбәк тә булыуын онотторға ярамай. Шәриф Манатовты, Зәки Вәлидиҙең арҡаҙашы Ғәлимйән Тағандың исемдәрен генә атау ҙа күп нәмә хаҡында һөйләй.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Фәнил Фәйзуллин, философия фәндәре докторы:** Мин күптән түгел генә фольклор материалдарын социаль тикшереүҙең һөҙөмтәләренә иғтибар иттем. Ниməһе ҡыҙыҡ: башҡорттар милли сығышын билдәләгәндә, башҡа милләттәрҙән айырмалы, беренсе урынға үҙҙәренең тарихи территорияһын ҡуя икән. Бының ниңә шулай икәнен аңлатыуы ауыр түгел, сөнки башҡорттар төрлө ырыуҙар ҡушылыуынан барлыҡҡа килгән. Шунан сығып фекер йөрөткәндә, бәлки, беҙгә мәсьәләне Федерация Советы, Дәүләт Думаһы кимәлендә күтәрергә кәрәктер? Юҡһа, күрше өлкәләрҙә йәшәгән башҡорттарҙы диаспора кеүек кенә итеп ҡарайҙар һәм уларға диаспораға ярҙам иткән кеүек ярҙам ырғыталар. Был проблема федераль кимәлдә лә, уның башҡорттар күпләп йәшәгән субъекттары кимәлендә лә шулай ҡабул ителә. Әммә милләттәштәребеҙ бит үҙҙәренең тарихи тыуған ерендә йәшәй, һәм шул күҙлектән сығып, башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә икенсе дәүләт теле мәсьәләһе буйынса ла һүҙ күтәрергә кәрәктер? (Рәсәй тарихында бындай прецедент Ҡырымда бар - унда рус теле менән бер рәттән тағы ла ике тел - украин һәм ҡырым татарҙары теле дәүләт теле булып тора - **ред.**). Ул ваҡытта бөгөн ҡаршылыҡ тыуҙырған бик күп һорауҙар, шул иҫәптән башҡорт телен уҡытыу ҙа, мәҙәниәтте үҫтереү ҙә, кадрҙар менән тәьмин итеү ҙә үҙенән-үҙе хәл ителер ине.

Икенсе мәсьәлә: телде, мәҙәниәтте, сәнғәтте, әҙәбиәтте, мәғарифты үҫтереү тураһында һүҙ алып барғанда, ниңәлер, осрашыуҙарға үҙебеҙҙең министрҙарҙы йәки уларҙың вәкилдәрен саҡырабыҙ. Әммә ни өсөн башҡорттар күпләп йәшәгән өлкәләрҙең министрлыҡтарынан йәки идаралыҡтарынан ошо мәсьәлә менән етди шөғөлләнеүҙәрен талап итмәйбеҙ? Мәҙәниәт усаҡтары, мәктәптәр ябыла, дәреслектәр етмәй икән, ни өсөн был турала Башҡортостан ғына баш ватырға тейеш? Минеңсә, ошо төбәктәрҙең бюджетында ошо территориялағы милли мәктәптәрҙе финанслау, уларҙы милли компоненттар менән тәьмин итеү буйынса аҡса һалынырға тейеш. Ни өсөн Рәсәй субъекттары юғары белемле кадрҙар менән тәьмин итеү мәсьәләһендә Төньяҡ округтар ҡабул иткән кеүек махсус ҡарарҙар, программалар ҡабул итмәй? Мәҫәлән, Санкт-Петербургтың юғары уҡыу йорттарында махсус рәүештә төньяҡ төбәктәр өсөн кадрҙар әҙерләйҙәр. Башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәр Башҡортостан уҡыу йорттарында килешеү нигеҙендә шундай төркөмдәр булдырһа, һәм егет-ҡыҙҙар уҡыуҙы тамалағандан һуң мотлаҡ рәүештә кире ҡайтып, 3-5 йыл эшләргә тейеш булһа, мәсьәлә ыңғай хәл ителер ине.

**Нурислам Ҡалмантаев, тарих фәндәре кандидаты:** Ауылдарҙа мәктәптәр ябыла икән, уларҙы башҡорттар күберәк булған ерҙә асырға кәрәк. Сөнки йәштәр ауылдан китеп, ҙурыраҡ ауылға йәки район үҙәгенә күсенә. Ә статистика буйынса, район үҙәктәрендә 60-70 процент башҡорттар йәшәй, әммә уларҙа башҡорт мәктәптәре юҡ. Бына ошо ҙур ауылдарҙа, район үҙәгендә башҡорт гимназияһы йәки мәктәбе асыуҙы хәл итергә кәрәк.

**Ғиниәт Ҡунафин, филология фәндәре докторы:** Сығыш яһаусыларҙы ентекле тыңлағандан һәм түңәрәк ҡорҙа ҡабул ителгән тәҡдимдәр менән танышҡандан һуң, шундай фекергә килдем: 2015-2016 йылдарҙа Ҡурған өлкәһенең башҡорттар күпләп йәшәгән райондарына БР Гуманитар тикшеренеүҙәр институты, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре, БР вуздары ғалимдары, уҡытыусылары, аспиранттары, студенттарынан торған комплекслы этнографик, фольклор, археографик экспедиция ойошторорға; ике субъект араһындағы килешеүҙәр нигеҙендә Сафакүл һәм Әлмән районы хакимиәттәре менән Башҡортостан вуздары араһында белгестәр әҙерләү буйынса килешеү төҙөү буйынса маҡсатлы эш алып барырға; БР Мәғариф министрлығына Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына Ҡурған өлкәһенән башҡорт балаларын квота буйынса уҡырға ҡабул итеү сараһын эшләргә; "Башҡортостан энциклопедияһы", "Ғилем", "Китап" нәшриәттәре Ҡурған өлкәһенең башҡорттар күпләп йәшәгән ике районы китапханаларына китаптар ебәрһен өсөн махсус ҡарар ҡабул итеүгә өлгәшергә кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# АҠ БОЛҒАР ИЛЕ, ЙӘКИ ОЛО БАШҠОРТОСТАН

**XXI быуатта башҡорт халҡының тарихына, уның йәшәгән территорияларына ҡағылышлы күп кенә китаптар яҙылыуына ҡарамаҫтан, тарихыбыҙҙың билдәле булмаған, өйрәнелмәгән, асыҡланмаған яҡтары ла бар әле. Социология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Б. Бикбай исемендәге әҙәби премия лауреаты Йәдкәр БӘШИРОВтың "Урал һәм Волга буйы халыҡтары тарихына яңы ҡараш" тигән хеҙмәте ошо мәсьәләгә ҡайһы бер асыҡлыҡтар индерергә ынтылышы менән ҡиммәт һәм ҡыҙыҡлы.**



## Башҡорттарҙың төньяҡ халыҡтары менән сауҙа бәйләнештәре

Башҡорт ҡәбиләләре йәшәгән территорияларға һәм уларҙың яңы ерҙәрҙе үҙләштереүҙәре тураһында күп ғалимдарҙың хеҙмәттәре бар. Мәҫәлән, фарсы ғалимы Әбү Ғәли ибн Русте 913 йылда ғәрәп телендә яҙған бер хеҙмәтендә "Башҡорт иле"нең географияһын билдәләп киткән. Был халыҡтың ерҙәре бәшәнәктәр менән болғарҙар араһында ята, тип яҙа ул. Ошо уҡ автор башҡа ғалимдарҙың, башҡорт халҡына ҡараған ҡайһы бер төркөмдәрҙең IX-X быуаттарҙа көнбайышта Урал тауҙарынан алып Арал диңгеҙенә тиклем, шулай уҡ Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ ярҙарында йәшәүен һәм бәшәнәктәр союзына инеүен билдәләүҙәре тураһында ла әйтеп китә. Өсөнсөләр, ти ибн Русте, башҡорттарҙың Урал тауының ике яғында, Волга, Кама, Тобол һәм Яйыҡтың үрге ағымында йәшәгән үҙаллы халыҡ икәнен һыҙыҡ өҫтөнә ала. Башҡорттар киң территориялар биләп йәшәгәнгә күрә, уның этник берлегенең ойошоуона, ысынлап та, ошо ерҙә йәшәгән һәм башҡа төбәктәрҙән күсеп килгән күп ҡәбиләләр йәлеп ителә.

1238 йылда Ғәзи-Барадж хакимлығы аҫтына Кама буйындағы Башҡорт территорияһы һәм уның ситендәге таулы райондар эләгә. Батый Менгеға ҙур территорияларҙы, шул иҫәптән Кама буйын тапшыра. Ерҙәрҙе бүлгәндә Оло Биләр шулай уҡ уға эләгә, ә башҡорттарға уларҙың элекке Унжа ерҙәре ҡайтарыла. Был ерҙәр хаҡында Аҡ Болғарға сәйәхәте ваҡытында Ҡол Ғәле ентекләп яҙа.

Билдәле шағир Мөхәмәт Ғәле ибн Мирхужа (Ҡол Ғәле) 1172 йылда Тамтүбәлә тыуа. Ике йылдан һуң Ҡол Ғәле Өтәк исемле батша хакимлыҡ иткән дәүләттең баш ҡалаһы Биләргә күсеп китә. Һуңынан билдәле шағир булып танылғас, ул үҙенең Бөйөк Болғарҙың төньяғына, Аҡ Болғар иленә сәйәхәте тураһында ентекләп яҙа. Аҡ Болғар ул ваҡытта төньяҡ-көнбайыш дәүләттәр менән тығыҙ сауҙа бәйләнештәрендә була һәм Финляндияға, Карелияға, Кольский ярымутрауына йоғонто яһай алыу көсөнә эйә була. Аҡ Болғарҙың төньяҡ-көнбайыш сиктәрендә XIII быуат башында йәшәгән әйле ырыуынан сыҡҡан билдәле шағир бына нимә тип яҙа: "Тавыштай (ФинлЯндия), Кариле (Карелия) һәм Чулман-Морон (Кольский ярымутрауы) тулыһынса Аҡ Болғарҙың Унжа губернаһына ҡарай. Был губернаның баш ҡалаһы Талиб ҡалаһы... Тавышбырҙың (Фин боғаҙының) төньяҡ ярҙарының көнсығыш ситенән сик Галиджий (Ладога) күленә бара, унан Унжа ҡалаһына, артабан Бат Угер күленә тиклем, унан Лача күленә, унан Мосха ауылына йәйелә. Был урында Татьма ҡәлғәһенең Әхәд исемле әмире тарафынан галидж батшаһы Хәлиб бәк (Глеб) үлтерелә. Мосханан сик Унжа йылғаһына бара... Унага (Онега) һәм Миджан (Мезень) буйҙарында галиджи өлкәһе Түбәнге Тун (Нижняя Двина) урынлашҡан. Был ерҙәрҙә сик тәүҙә Түбәнге Миджандан, Түбәнге Тоймаға һәм Күк-Тунға бара, һуңынан Шонҡыр ҡәлғәһенә тоташа. Унда Аҡ Болғарҙың 300 кешенән торған даими гарнизоны тора. Сик һуңынан Кесе Унага ҡәлғәһенә йүнәлә. Был ерҙә Аҡ диңгеҙгә тиклем сик булып кесе Унаға һәм Унаға (Онега) йылғалары хеҙмәт итә... Беҙҙең караuан Кесе Унағаға килгән саҡта уның сауҙагәрҙәрен һәм тауарын 30 һыу кәмәһенә тейәнеләр...

Кесе Унаға менән Болғарһыу ҡәлғәләре урынлашҡан ерҙә... Болғар Ҡапҡа тип аталған урын бар. Кесе Галиджынан Түбәнге Тунға үтер кәрәк булғанда, йәки, киреһенсә, Түбәнге Тундан Кесе Галиджыға күскәндә, Галиджия кешеләре беҙҙең Кесе Унаға һәм Болғар һыу ҡәлғәләренең ҡараусыларына (коменданттарына) мөрәжәғәт итәләр, уларҙан рөхсәт һәм оҙатып барыуҙарын һорайҙар. Ошо коменданттар оҙатыуында Болғар Ҡапҡаһын үтәләр... Ҡурҡыныс менән янаған бөтә юлбаҫар ҙа тиерлек Ҡара Унжа өлкәһенән киләләр. Бер кемдәр ҙә - Аҡ Болғарҙар ҙа, галиджийҙар ҙа, балынсылар ҙа, Ҡара Унжаны тыныс төбәк итә алманылар...

Беҙҙең кәмәләр Кесе Унаға һәм Унаға буйлап йөҙгән ваҡытта уларҙы алмашлап йә аҡ болғарҙар, йә галиджийҙар, шулай уҡ төрөкболғар телендә аралашыусы башҡа ҡәбиләләр оҙатып барҙы. Улар шул тиклем дуҫ йәшәйҙәр, хатта араларында ыҙғыш-ғауға булыуын бөтөнләй күрмәнек. Беҙҙән бер нимәләре менән айырылмаған был кешеләргә ҡарап, халыҡтар бер-береһе менән тыныс йәшәй ала икән, тип уйлап ҡуйҙым. Бер өлөшө беҙгә , ә икенсеһе галиджиялыларға ҡараған Унаға ҡалаһында беҙҙең кешеләр һәм йөгөбөҙ 10 диңгеҙ карабына тейәлде. Был ерҙә беҙҙе Унжаның оло бейе (губернаторы) Сәхиб оҙатып йөрөнө. Беҙ уның менән хушлашҡандан һуң Кандалай буйлап тәүҙә Кемгә, һуңынан Талыш йәки Балыш тип аталған ауылға йөҙҙөк. Беҙ унда ошо ерҙәрҙең бейе Лапыш менән осраштыҡ... Ошо ерҙәрҙә йәшәгән лабырҙар үҙҙәрен иң боронғо болғарҙар итеп һанайҙар.

...Уларҙың башлығы менән таныштыҡ, ул беҙҙе оҙаҡ ебәрмәй торҙо. Беҙҙең килеүебеҙ уны ҡыуандырыуын әйтте... Хушлашҡан саҡта мин ҡумыҙҙа уйнап күрһәттем һәм үҙем менән булған бер ҡумыҙҙы бүләк иттем. Һәм мин лабырҙар өсөн ҡумыҙ - изге әйбер булыуын күрҙем. Мин биргән бүләкте улар ҡулдарында ҡатын-ҡыҙ баланы тотҡанға ҡарағанда ла нәзәкәтлерәк итеп йөрөттөләр...".

Башҡорттарҙың XII быуатта Төньяҡ Боҙло океан тураһында ни тиклем белеүҙәрен ғәрәп сәйәхәтсеһе Әбү Хәмит Гарнатиҙың яҙмаларынан күрергә була. Был сәйәхәтсе Башҡортостанда, өс йыл дауамында, 1150 йылдан 1153 йылға ҡәҙәр йәшәй. Төньяҡ-көнбайыш илдәр менән төҙөлгән сауҙа бәйләнештәре арҡаһында халыҡтар даими рәүештә аралашып йәшәй. Шулай итеп, ҡайһы бер халыҡтар ҙа төньяҡҡа ҡарай күсенә, хатта Скандинавия ярымутрауына тиклем барып етә. Ошо арҡала ҡәбиләләр араһында ниндәйҙер кимәлдә ҡушылыу ҙа бара. Гарнати башҡорттарҙың төньяҡта йәшәгән ҡәбиләләр менән әүҙем рәүештә сауҙа итеүе тураһында яҙа. Етмәһә, автор яҙыуынса, Төньяҡ Боҙло океан ярында йәшәүсе халыҡтарҙың иҡтисади хәле, көнкүреше бүләр (йәки биләр) ырыуы башҡорттары менән сауҙа итеүгә ныҡ бәйле була. Бөйөк Болғарҙың төньяҡ төбәгендә төрлө төрки телле ҡәбиләләр йәшәй. Улар араһында джуграй (уғры) тип аталған башҡорттарға ҡараған халыҡ та була. Был мәғлүмәттәр беҙгә башҡорттарҙың заманына күрә ҙур ғына ҡәүем булыу тураһында һөйләргә мөмкинлек бирә.

Шулай итеп, Болғар ханлығы составында үҙ вәкәләттәре булған Бөйөк Башҡортостан, йәки Аҡ Болғар урта быуаттарҙа киң территорияларға йәйелгән, күп илдәр, халыҡтар менән сауҙа бәйләнештәре булған башҡорт ырыуҙарының дәүләте була. Тик ҡайһы бер сәбәптәр арҡаһында (мәҫәлән, берәүҙәр был илдең этник составында фин-уғыр телле ҡәбиләләр булыуын иҫәпкә алып) тарихсылар башҡорттарҙың ошо осорҙағы дәүләтселеге хаҡында һөйләп бармайҙар, бәлки, күрмәҫкә тырышалар һәм ентекләп өйрәнмәйҙәр. Бәлки, халҡыбыҙҙың үткәненә тәрәнерәк ҡараш булһын өсөн ошо осорҙағы башҡорт дәүләтселеген дә белергә кәрәктер.

**(Аҙағы. Башы 48-се һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Туй һәм мәүлит, ураҙа, ҡорбан, ғәшүрә, рәжәп кеүек дини байрамдарҙан тыш, башҡорттарҙа тағы ла ҡарғатуй һәм һабантуй байрамдары бар.

Ҡарғатуй ҡар иреп, үлән сығып, ҡарғалар килгәс уҙғарыла. Ғәҙәттә уны үткәреү ваҡыты апрель һуңынан июнь башына тиклем. Унда бары тик ҡатын-ҡыҙ, йәш ҡыҙҙар һәм 13 йәштән оло булмаған малайҙар ғына ҡатнаша. Үткәреү урыны итеп ауылдан ике саҡрымдан да алыҫ булмаған уба һайлана. Унда самауыр, сәй, шәкәр, икмәк һәм ярма алып барып, бутҡа бешереп ашайҙар, сәй эсәләр **(һүрәт)**. Оло ҡатындар бутҡа бешергән ваҡ-



ытта йәштәр түңәрәктә әйләнә (әйлән-бәйлән), туп, ҡаршылыҡтар аша һикереп уйнай, ҡайһы берҙә күлдәктәрен ыштандарына ҡыҫтырып, йүгерешә. Йүгереүҙә ҡыҙҙар һәм бала тапмаған ҡатындар ярыша. Байрам менән етәкселек итеүсе иң өлкән ҡатын-ҡыҙ башкейемдә була.

Көнбайыш һәм көньяҡ-көнсығыш Башҡортостанда был байрам ҡарға бутҡаһы атамаһы аҫтында билдәле һәм ул һабантуйҙан бер көн алда уҙғарыла. Көньяҡта һәм көнсығышта был байрамда тик ҡатын-ҡыҙ ғына ҡатнашһа, көнбайыш башҡорттарында ул балалар байрамы тип иҫәпләнә. Бер төркөм малайҙар өй беренсә, "ярма, ярма, ярма", тип ҡысҡырып йөрөп, ярма, йомортҡа һәм май йыя. Һуңынан йылға буйына барып, бутҡа бешерә. Ә инде йыйылған йомортҡаны улар һабантуйға алып бара. Ҡарғатуй, ҡарға бутҡаһы ике атамала ла йөрөп, Бөрө һәм Оса өйәҙенән башҡа, бөтөн ерҙә лә XX быуат башында ла үткәрелә.

Башҡорт байрамы һабантуй йыл һайын ер һөрөү алдынан, мотлаҡ ҡарға туйҙан һуң йәки көнсығышта ер һөрөү һәм бесән мәле араһында уҙғарыла. Һабантуй туйҙан ҡайһы бер деталдәрҙә генә айырыла. Ул түбәндәгесә уҙа. Һабантуй уҙғарыусы ауыл күрше, бик йыш икенсе ырыуға ҡараған ауылды ҡунаҡҡа саҡыра. Саҡырылған ҡунаҡтар ғаиләләре менән килә һәм һуңынан яуап итеп үҙҙәрендә байрам ойоштора. Табын алдан ауылдан йыйылған аҙыҡ-түлек, аҡса (һәр йорттан 40 тин) иҫәбенә ҡорола. Йыйылған аҡсаға, ауылдың күләменә ҡарап, өс-дүрт ат, абруйлы ҡунаҡтар өсөн сәй, шәкәр, лимон һатып алына.

XX быуат башында малайҙар, улар артынан ололар йомортҡа йыя. Ә инде билдәләнгән бер вәкил йәш ҡатын-ҡыҙҙан - таҫтамалдар, яулыҡтар, сауҙагәрҙәрҙән ситса йыйып, уларҙы байрам майҙанына алып бара.

Көн үҙәгенән һуң, ололар мәсеттән намаҙҙан сыҡҡас, бар халыҡ байрам урынына йыйыла. Улар япмалар аҫтына күләгәгә йәки ҡаршы яҡҡа ултыра, һәм түңәрәк майҙан барлыҡҡа килтерә **(һүрәт)**.



*✓ Тик был миҙалға ысынлап лайыҡ булмағандар ҙа эйә булыуы күңелде ҡыра, миҙалдың бәҫен төшөрә. Күп бала табыу менән генәме ни, әгәр уларға тейешле тәрбиә, өлгө бирә алмаһаң.*

# НИНДӘЙ ГЕНӘ

## үҙгәрешһеҙ ҡалырға тейешле

**Кешелек донъяһындағы төп ҡанундарҙың береһе булған ғаилә ҡороу йолаһы һуңғы йылдарҙа ҙур үҙгәрештәр кисерә. Был үҙгәрештәр беҙҙең башҡорттар араһында ла урын ала бара. Һәр замандың - үҙ заңы, үҙ көйө, тиһәк тә, был хәл һағайырға мәжбүр итә барыбер. Шуға ла ғаилә, законлы никах мәсьәләләре ата-әсә, йәштәр өсөн генә түгел, ә бар йәмғиәт, шулай уҡ ғалимдар, төрлө кимәлдәге етәкселәр өсөн дә иғтибар үҙәгендә булыр бер темаға әүерелде. Бөгөн беҙ Белорет районының йәш етәкселәре - Нура ауылы хакимиәте башлығы Азат Фәрит улы Шәнгәрәев, Ишле ауылы хакимиәте башлығы Фәнис Рәшит улы Даньянов һәм Сосновка ауылы хакимиәте башлығы Айгиз Динислам улы Мусин менән ғаилә ҡиммәттәре хаҡында һөйләшергә булдыҡ. Вазифалы урын биләүсе етәксе, шулай уҡ ғаилә башлыҡтары ла булараҡ, улар үҙ биләмәләрендә ғаилә институтын һаҡлау, уға ярҙам күрһәтеү йәһәтенән нимәләр эшләй, ниндәй өлгө күрһәтә? Етәксе дәрәжәһенә үрләгәнһең икән, халҡыңа ла күтәрелергә, уңышҡа өлгәшергә, уның гөрөф-ғәҙәттәрен хөрмәт итергә тейешһең, тигән ҡағиҙәне улар үҙҙәре нисек үтәй?**

**▶ Бөгөн рухи ҡиммәттәрҙе үҫтереүгә дәүләт ҙур финанс ярҙамы күрһәтә. Шулай ҙа ғаилә ҡиммәттәре иң тәүҙә кешенең үҙендә, башында булырға һәм кешенән-кешегә, быуындан-быуынға күсергә тейеш. Был сифаттарҙы дәүләт программалары менән генә үҫтереп булмай. Мәҫәлән, 2008 йылды Ғаилә йылы тип иғлан иткәндә, йылды үткәреү саралары өсөн 95 млрд һум аҡса бүленде. Был йәһәттән күпләп аҡса түгелеүе дөрөҫмө?**

**Айгиз Мусин:** "95 млрд һум" тип әйтһәң генә күп күренә ул. Уны Рәсәй субъекттарына бүлә башлаһаң, әллә ни ҙур булмаған сумма килеп сығасаҡ. Ашаған белмәй, тураған белә, тип бушҡа ғына әйтмәйҙәр шул. Минең ҡулда булһа, был маҡсатҡа тағы ла күберәк аҡса бүлер инем. Нимә генә тиһәк тә, мәҙәни сараларҙың бөгөнгө тормошта роле бик ҙур. Бөтә кеше лә етәксе кабинетының ишеген ҡағып йөрөй алмай. Ә ошондай сараларҙа кеше бер-береһе менән аралаша, фекерҙәре, ниндәйҙер яңы идеялары менән бүлешә, башҡаларҙың тормошона байҡау яһай, фекеренә ҡолаҡ һала. Халыҡ бер ҡайҙа ла йөрөмәй, ҡатнашмай, тип зарлана алмайбыҙ. Был йәһәттән беҙҙә эштәр яйға һалынған. Баш ҡала артистарын да концерт, спектаклдәр менән саҡырып торабыҙ. Бюджет аҡсаһын ауылдың киләсәген булдырыу, төҙөкләндереү эштәренән тыш, йәш быуынды тәрбиәләүгә, рухи ҡиммәттәрҙе үҫтереүгә, сәләмәт тормошто пропагандалауға, традицияларыбыҙҙы һаҡлауға ла тигеҙ бүлергә тырышабыҙ. Сығымдар үҙен аҡлай. Мәҫәлән, "Айыҡ ауыл" акцияһында ҡатнашыуылыҙҙың һөҙөмтәһе бик ҙур булды. Эскелек ҡырҡа кәмене, магазин хужалары менән килешеп, һатыуҙан спиртлы эсемлектәрҙе алдыҡ. Йәштәребеҙ әүҙемләште, хәҙер дискотекалар эскеһеҙ, һуғышһыҙ үтә. Өйләнеүселәр һаны ла артты. Эскән ир-егеттәребеҙ менән аңғәмәләр үткәрҙек, уларҙың күбеһе эш табыуға өлгәште. Клубта йәштәр өсөн вокаль, бейеү, ҡул эштәре түңәрәге эшләй. Рысыҡай клубына бильярд өҫтәле һатып алдыҡ. Яңы идеялар менән рухланған йәштәребеҙ үҙҙәре төрлө тәҡдимдәр менән мөрәжәғәт итә, бар башланғыстарҙы ла ыңғай күтәреп ала. Тимәк, уларҙа өмөт, сәм бар, тигән һүҙ был. Әйҙәп йөрөүселәр булғас, күп кенә эштәрҙе өмә, акциялар уҙғарып башҡарабыҙ. Кескәйҙәр өсөн балалар майҙансыҡтарын да халыҡ менән бергәләп урынлаштырҙыҡ. Әлбиттә, бюджет аҡсаһына ғына күҙ терәп ултырмайбыҙ, бағыусылар табырға, улар менән хеҙмәттәшлек итергә тырышабыҙ. Ошондай ваҡ, ләкин ауыл өсөн мөһим эштәрҙе башҡарғанда, Рәсәй өсөн 95 млрд һум аҡсаның әллә ни күп булмауы яҡшы аңлашылалыр хәҙер. Шуға ла, дәүләт программалары рухи ҡиммәттәрҙе, мәҙәниәтте үҫтерә, традицияларҙы һаҡлай, тип түгел, ә ошо өлкәлә күп эштәр башҡарылға ярҙам итә, тип ҡарарға кәрәк.

**Азат Шәнгәрәев:** Ысынлап та, бары тик кешенең мәҙәни кимәле юғары булыу һөҙөмтәһендә генә һаҡлап ҡалып була торған рухи ҡиммәттәрһеҙ ныҡлы, заманса, тотороҡло йәмғиәт төҙөп булмай. Рухи мәҙәнилек үҙ эсенә күп нәмәне ала. Юғары мәҙәниле кешеләр законды ла, әхлаҡты ла, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе лә, динде лә, белемде лә берҙәй аңлай һәм хөрмәт итә. Шуныһы ҡыуаныслы, мәҙәниәтте, төрлө ҡиммәттәрҙе үҫтереүҙе дәүләтебеҙ бөгөнгө көндөң актуаль проблемаһы тип таныны. Шуға күрә, бөтә яҡтан да үлсәп, иҫәпләп ҡараһаң, 95 млрд һумдың ҙур сумма булмауы яҡшы аңлашылырға тейеш. Дәүләт программаларын ҡабул иткәндә тормоштағы социаль-иҡтисади проблемаларҙы иҫәпкә алыу мөһим. Шул осраҡта ғына уның һөҙөмтәһе юғары буласаҡ һәм ул уңышлы тормошҡа ашырыласаҡ.

**▶ Балаларыһыҙ Рәсәйҙең киләсәге юҡ, тиһәләр ҙә, йәшерен-батырыны юҡ, күп балалы ғаиләләргә бөгөн барыбер ҙә ғәжәпләнеберәк ҡарайҙар. Эш биреүселәр ҙә хеҙмәткәренең йыш декретка китеүен, больничныйға сығыуын өнәп бөтмәй. Күп балалыҡты ғәҙәти күренешкә әйләндереү өсөн дәүләт тарафынан нимә эшләнергә тейеш?**

**Фәнис Даньянов:** Күп балалыҡты пропагандалау өсөн тәү сиратта дәүләттең ярҙамы мотлаҡ. Шәхси торлаҡ булдырыуға, төҙәләш эштәренә ярҙам күрһәтеүгә баҫым яһарға кәрәк. Арҡа терәр ныҡлы нигеҙең булмайынса тороп, бала тәрбиәләү, рухи ҡиммәттәр, традицияларҙы һаҡлау тураһында нисек һүҙ йөрөтәһең? Күп балалы ғаиләләргә балалар пособиеһын арттырһалар, ниндәйҙер льготалар булдырылһа, ошо ғаиләнең яҡшы уҡыған, өлгөлө тәртибе булған өс балалы ғаиләләргә 1500 һум, дүрт һәм унан күберәк бала тәрбиәләүселәргә 2000 һум аҡса бүлә. Ғаилә был аҡса иҫәбенә йәшәргә түгел, ә уны баланың кәрәк-ярағына тотонорға тейеш тә бит... Әгәр ҙә был аҡса ҡулға бирелмәй, ниндәйҙер айырым маҡсат өсөн махсус иҫәпкә күсерелһә, аҡсаның тәғәйенләнеше һөҙөмтәлерәк булыр ине.

Республикабыҙҙа күп бала тапҡан ҡатындарға миҙал тапшырыу ҙа матур традиция булып китте. Тик был миҙалға ысынлап лайыҡ булмағандар ҙа эйә булыуы күңелде ҡыра, миҙалдың бәҫен төшөрә. Күп бала табыу менән генәме ни, әгәр уларға тейешле тәрбиә, өлгө бирә алмаһаң. Иҫәп менән сифат тура килмәй икән, 5 түгел, 15 бала тапһалар ҙа, миҙал тураһында һүҙ ҙә булырға тейеш түгел. Был йәһәттән дәүләт тарафынан айырым күҙәтеү органдары булдырыу ҙа дөрөҫ булыр ине. Күп бала табып та, уларҙы лайыҡлы тәрбиәләй алмаған ҡатындар ни илгә кәрәкле кешеләр үҫтерә алмай, ни үҙҙәренең йүнле хеҙмәт стажы булмай.

**▶ Йәштәр араһында законлы никахҡа инмәй генә, граждандыҡ никахы менән йәшәү ғәҙәти күренешкә әйләнеп бара. Һандар теле менән әйткәндә, бөгөн ғаиләләрҙең 10 проценты самаһы никахын рәсми теркәмәүҙе хуп күрә икән. Шул сәбәпле, балаларҙың өстән бер өлөшө никахһыҙ ғаиләлә тыуа. Бурыстарыңды закон менән нығытмай ғына граждандыҡ никахы менән йәшәү дөрөҫмө?**

**Айгиз Мусин:** Ҡатыным менән ике ҡыҙ, бер малай тәрбиәләйбеҙ. Үҙебеҙҙең йола буйынса өйләнештек. Нисек кенә ышандырырға тырышмаһындар, граждандыҡ никахы менән йәшәүҙе дөрөҫ түгел, тип һанайым. Былдай никах менән яуаплылыҡтан ҡасҡандар, үҙ-үҙенә ышанмағандар ғына йәшәй. Әгәр ҙә тойғолар ысын икән, уны закон менән рәсмиләштереүҙән ҡурҡырға ярамай.

**▶ Дәүләтебеҙ һәр кемгә шәхси тормошҡа хоҡуҡ бирә. Ғаилә кодексы тормоштары алға бармаған парҙарҙың айырылышыуын да сикләмәй, кемгә ғашиҡ булырға, өйләнергә кәрәклеген дә һәр кем үҙе хәл итә. Тик шулай ҙа бөгөн ғаилә ҡороу мәсьәләһе үтә еңел хәл ителмәйме?**

**Фәнис Даньянов:** Өйләнеү мәсьәләһе элек-электән етди хәл ителгән. Кем менәндер туғанлашыу алдынан буласаҡ ҡоҙаларҙың ете ырыуына тиклем байҡау яһалған, сөнки никах тотороҡлоғо яңы туғандар араһындағы мөнәсәбәттәргә лә ныҡлы бәйләнгән. Шуға күрә, тормош юлдашы һайлар алдынан атай-әсәй кәңәшенә ҡолаҡ һалыу ҙа мөһим. Табышып, ҡауышҡандар икән, үҙҙәре беләләр, тип, баланың кем менән йәшәп ятыуын да күреп белмәү ҙур хата. Әгәр ҙә йәштәр тормош юлдашы итеп һайлаған кешеһен ата-әсәһе менән таныштырмай ғына граждандыҡ никахы менән йәшәүҙе хуп күрә икән, был осраҡта мотлаҡ ололар тәүге аҙым яһарға, үҙе башлап буласаҡ килене йә кейәүе, ҡоҙағыйҙары менән танышырға, туғанлашырға тейеш.

**Азат Шәнгәрәев:** Ғаилә ҡороу еңел-елпе генә эш түгел, сөнки иненә икенсе яртың менән иҫәпләшеү, уртаҡ хужалыҡ алып барыу, балалар тәрбиәләү кеүек яңы бурыстар,

*Өйләнеү мәсьәләһе элек-электән етди хәл ителгән. Кем менәндер туғанлашыу алдынан буласаҡ ҡоҙаларҙың ете ырыуына тиклем байҡау яһалған, сөнки никах тотороҡлоғо яңы туғандар араһындағы мөнәсәбәттәргә лә ныҡлы бәйләнгән. Шуға күрә, тормош юлдашы һайлар алдынан атай-әсәй кәңәшенә ҡолаҡ һалыу ҙа мөһим. Табышып, ҡауышҡандар икән, үҙҙәре беләләр, тип, баланың кем менән йәшәп ятыуын да күреп белмәү ҙур хата. Әгәр ҙә йәштәр тормош юлдашы итеп һайлаған кешеһен ата-әсәһе менән таныштырмай ғына граждандыҡ никахы менән йәшәүҙе хуп күрә икән, был осраҡта мотлаҡ ололар тәүге аҙым яһарға, үҙе башлап буласаҡ килене йә кейәүе, ҡоҙағыйҙары менән танышырға, туғанлашырға тейеш.*

балаларын төрлө ҡалаларға экскурсияларға йөрөтһәләр, ял йорттарына юлламалар бирһәләр, башҡаларҙа ла ҡыҙыҡһыныу уяныр, күп балалыҡтың бәҫе күтәрелер ине. Бөгөн балалар пособиеһы иҫәпкә бар, һанға юҡ күләмендә. Уны һәр кемгә лә 140-ар һумлап бүлеп биргәнсә, шул аҡсаны бүлгеләмәй-йолҡоламай ғына күп бала тәрбиәләүселәргә өҫтәп түләһәләр, файҙалыраҡ булмаҫ инеме икән?

**Азат Шәнгәрәев:** Әгәр ҙә дәүләт ихласлап тотонһа, һис шикһеҙ, күп балалыҡтың баһаһын күтәреп, популярлаштырып булыр ине. Ысынлап та, бер кемгә лә сер түгел, арабыҙҙа балалар аҡсаһына ғына йәшәргә мәжбүр булыусылар ҙа, ошо аҡсаны араҡыға исраф итеүселәр ҙә етерлек. Хөкүмәт

**Фәнис Даньянов:** Бөгөн ниндәй генә өлкәне алма, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, тотош ил, милләт мәсьәләһе булһынмы, һәр ҡайһыһы ҙур үҙгәреш кисерә. Заман елдәре ғаилә ҡиммәттәрен дә урап үтмәне. Шуға күрә, граждандыҡ никахын да бөтөнләй үк кире ҡағыу, бәлки, дөрөҫ түгелдер. Минеңсә, бөтәһен дә тиҙ хәл итергә яратҡан бөгөнгө йәштәр өсөн былдай никах хистәр ныҡлығын тикшереү өсөн һы-

***✓ Ярҙам итергә тырышһаҡ та, дәүләт ярҙамы менән үҙ мөйөшөн булдырырға теләүселәр әлегә бик һирәк, бер нисә ғаилә әсәлек капиталын файҙаланып, йорт күтәрҙе. Был аҡсаны ла маҡсатҡа ярашлы тотонмаусылар бар.***

# ГЕНӘ ЗАМАНДА ЛА...

## ғаилә ҡиммәттәре бар

мәшәҡәттәр йөкмәтелә. Бында йәштәрҙең генә ризалығы етмәй, мотлаҡ атай-әсәйҙең фатихаһы, кәңәше лә кәрәк. Әгәр ҙә егет менән ҡыҙҙың хистәре ышаныслы икән, атай-әсәй уларҙың мөнәсәбәтенә фатихаһын бирергә, буласаҡ киленен йә кейәүен нисек бар, шулай ҡабул итергә, балаһының хистәрен хөрмәт итергә тейеш. Бында "оҡшамай" йәки "яратмайым" тип ауыҙ асыу урынһыҙ.

**▸ Һәр ғаиләнең үҙ традициялары, ҡиммәттәре булырға тейешме? Баланы хеҙмәткә өйрәтеү, дин мәсьәләләрен аңлатыу нисек атҡарылырға тейеш?**

**Фәнис Данъянов:** Тәрбиә бала саҡтан аңға һалынырға һәм һеңдерелергә тейеш. Бала ғаиләлә алған сифаттары менән йәмғиәткә аяҡ баҫа. Әгәр ҙә был сифаттар кире ғәҙәттәр менән һуғарылған икән, тимәк, дәүләткә лә ауырға тура киләсәк. Дәүләтебеҙ бала хоҡуҡтарын яҡлау буйынса төрлө закондар сығара. Тик ошо закондарҙы бер яҡлы ғына ҡабул итеүселәрҙең дә булыуы үкенесле. Мәҫәлән, элек мәктәптәрҙә алмашлап дежур итеү, Тимур командалары ғәҙәти күренеш ине. Бер кемдең дә ата-әсәһе был йәһәттән дәғүә белдермәне. Ә бөгөн иһә класс иҙәнен йыуған өсөн, бала хоҡуҡтарын боҙаһығыҙ, тип, директорға йүгерәләр. Был осраҡта ата-әсәләр йыйылышында үҙ-ара килешеп, закон боҙмай ғына бер ҡарарға килеү уңышлы булыр ине. Бөтәһе лә бер һүҙҙән булғанда хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында бәхәстәр ҙә килеп сыҡмаҫ ине. Ә инде дин мәсьәләһе балалар тәрбиәләгәндә бигерәк тә сетерекле. Һүҙ ҙә юҡ, диндең тәрбиә, әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләрендәге роле баһалап бөткөһөҙ. Тик был йәһәттән бик һаҡ һәм белеп эш итеү зарур. Хиджап ҡабул иткәндә лә тәү сиратта баланың үҙе менән һөйләшергә кәрәк: теләйме ул быны, әллә инде ата-әсәһенең баҫымы аҫтында ғына ошо юлға баҫырға мәжбүрме?

**Азат Шәнгәрәев:** Элек беҙҙең ҡыҙҙарҙың бала саҡта яланбаш йөрөүе бер ҙә хилаф һаналмаған, был йәһәттән тыйыу ҙа булмаған. Бөгөн дин юлынан киткән йәштәрҙең кейеменә күҙ һалһаң, беҙҙең милләткә хас булмаған көнсығыш ҡатын-ҡыҙы кейемен мода итеп алыуҙарын күрәһең. Ә бит башҡорттар бер ваҡытта ла улай кейенмәгән. Йәшкә ҡарап, яулыҡ ябыныуҙың да үҙ тәртибе булған. Еткән ҡыҙҙар уны ҡыя ябынһа, оло инәйҙәр иһә арҡаларына төшөрөп, эйәк аҫтынан бәйләгән, эш менән мәшғүл саҡта яулыҡты сөйөп ябыныу ҙа ғәйеп булмаған. Ҡыҙыҡ өсөн генә белергә ине, хиджап ҡабул иткәндәрҙең барыһы ла бөтә күңеле менән динде аңлап эш итәме, әллә инде уны заман модаһы итеп кенә күрәме? Дин ҡабул итеү өҫтөнә үтә яуаплы, етди бурыс алыу ул. Башланғыс класс уҡыусыһының үҙ аллы ғына дөрөҫ ҡарар ҡабул итеүе икеле. Динде ныҡлап аңлағас, бындай бурыстарҙы үтәй алыу-алмауын ул үҙе генә хәл итә ала.

Ә инде баланы хеҙмәткә өйрәтеүгә килгәндә, элекке тәрбиәнән дә ҡулайлыраҡ сара белмәйем. Элек бала өйҙә генә түгел, мәктәптә лә хеҙмәт серҙәренә өйрәнде. Ул саҡта дәрестәрҙән тыш, йәмғиәткә файҙалы эш тигән айырым дәрес була торғайны. Бындай дәрестәрҙә уҡыусылар фермаларҙа, төрлө ойошмаларҙа ярҙам күрһәтте, ысын хеҙмәт кешеһе менән яҡындан аралашты. Дәрестән тыш, мәктәп, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашҡан балаларҙы өлгө итеп ҡуйҙылар, Маҡтау ҡағыҙҙары тапшырҙылар. Бындай дәртләндереү саралары башҡаларҙа ла әүҙемлек, шундай эштәрҙә ҡатнашыу теләге уята торғайны. Мәктәп, ата-әсәләр менән килешеп эшләгәндә әле лә был алымды ҡулланырға була. Беҙҙе, эшләгәнең кешегә булһа, өйрәнгәнең үҙеңә, тип үҫтерҙеләр. Хәҙерге ата-әсәләр ҙә ошо принципҡа таянып эшләһә ине лә бит.

***Элек беҙҙең ҡыҙҙарҙың бала саҡта яланбаш йөрөүе бер ҙә хилаф һаналмаған, был йәһәттән тыйыу ҙа булмаған. Бөгөн дин юлынан киткән йәштәрҙең кейеменә күҙ һалһаң, беҙҙең милләткә хас булмаған көнсығыш ҡатын-ҡыҙы кейемен мода итеп алыуҙарын күрәһең. Ә бит башҡорттар бер ваҡытта ла улай кейенмәгән. Йәшкә ҡарап, яулыҡ ябыныуҙың да үҙ тәртибе булған. Еткән ҡыҙҙар уны ҡыя ябынһа, оло инәйҙәр иһә арҡаларына төшөрөп, эйәк аҫтынан бәйләгән, эш менән мәшғүл саҡта яулыҡты сөйөп ябыныу ҙа ғәйеп булмаған. Ҡыҙыҡ өсөн генә белергә ине, хиджап ҡабул иткәндәрҙең барыһы ла бөтә күңеле менән динде аңлап эш итәме, әллә инде уны заман модаһы итеп кенә күрәме?***

**▸ Ауылдың киләсәге булһын, йәштәр ауылда ҡалһын өсөн нимәләр эшләргә кәрәк? Етәксе булараҡ, был йәһәттән ниндәй эштәр башҡараһығыҙ?**

**Айгиз Мусин:** Был йәһәттән беҙҙең биләмәлә эштәр зарланырлыҡ түгел. Биләмә территорияһында "Ар ташы", "Ҡарағайлыҡ" турбазалары, ҡайһы бер етештереү предприятиелары эш урындары менән ярҙам итә. Крәҫтиән-фермер хужалыҡтары ла бар. Перспектива ҙур булғас, йәштәр ҙә күпләп ауылда ҡала, ер ала, йорт һала. Хакимиәт йәштәргә төрлө яҡлап ярҙам итергә тырыша, ер алыу, төҙөлөш башлау буйынса консультация биреү өсөн ҡаланан белгестәр саҡыртабыҙ. Биш кеше йыйылһа, уларҙы бергә йыйып, документтар юллау буйынса ярҙам итәбеҙ, кәңәштәр бирәбеҙ. Йәштәребеҙ дәртле, бер-береһенән күреп, сәмләнеп йәшәй, төрлө дәүләт программаларында ла әүҙем ҡатнаша. Яңы йорттар һалып инә. Мәктәпһеҙ, йәштәрһеҙ ауылдың киләсәге юҡ икәнен дә яҡшы аңлайбыҙ. Шуға күрә ауылдарҙы төҙөкләндереү, юлдар һалыу, урамдарҙа автоматлаштырылған яҡтыртыу системаһы ҡуйыу, һыу скважиналары ҡаҙҙырыу буйынса бик күп эштәр башҡарабыҙ. Алла бирһә, 2015 йылда "Ауылдарға газ үткәреү" дәүләт програмаһына эләгәсәкбеҙ. Шул арҡала Сосновка ауылында 160 саҡрым ергә газ үткәреләсәк.

**Азат Шәнгәрәев:** Ауылдың киләсәге туранан-тура ауылдаштарҙың әүҙемлегенә, битараф булмауына бәйләнгән. Беҙҙең биләмә бәләкәй генә, халыҡ иҫәбе биш йөҙгә лә тулмай. Оптималләштереүгә бәйле, ауылдағы тулы булмаған урта мәктәп башланғыс мәктәп итеп ҡалдырылды. Эш урыны булмағанлыҡтан, йәштәр ҙә ситкә китергә тырыша. Йәштәр өсөн төрлө программалар эшләй ҙә бит, барыһы ла уның менән файҙалана алмай. Кемеһененеңдер мәшәҡәтләнеп йөрөргә түҙемлеге етмәй, икенсеһенең документ юлларға аҡсаһы юҡ. Хакимиәт ҡулынан килгәнсә ярҙам итергә тырышһа ла, әлегә был тырышыу бер яҡлы ғына килеп сыға. Ғәмһеҙлекмелер инде, ҡайһы берәүҙәр яҙып биргән белешмәләрҙе лә ваҡытында килеп алмай. Шулай ҙа һуңғы ваҡыттарҙа башҡаларҙың торлаҡ төҙөү, ер алыу өсөн нисегерәк итеп дәүләт ярҙамы менән файҙаланыуын беҙҙекеләр ҙә ишетә, күрә башланы шикелле. Халыҡ яйлап ҡына күҙен асҡандай булды. Тик улар ныҡлап уянып, ярҙам, кәңәш һорап килгәнсе, ауыл хакимиәте генә түгел, хатта ауыл да булмаҫҡа мөмкин. Ярҙам итергә тырышһаҡ та, дәүләт ярҙамы менән үҙ мөйөшөн булдырырға теләүселәр әлегә бик һирәк, бер нисә ғаилә әсәлек капиталын файҙаланып, йорт күтәрҙе. Шуныһы күңелде ҡыра: был аҡсаны ла маҡсатҡа ярашлы тотонмаусылар бар. Ә бит аҡса менән уйлап эш итмәһәң, ул иртәгә булмай. Һөҙөмтәлә - йортоң да юҡ, кеҫәңдә лә елдәр уйнай. Көтөүлектәр булмағанлыҡтан, беҙҙә малсылыҡ менән шөғөлләнеү отошло түгел. Ә бына ҡошҡорт үрсетеү, баҡсасылыҡ, туризмды үҫтереү буйынса мөмкинлектәр бар. Тәүәккәлдәр, ныҡыштар бынамын итеп үҙ эшен асып ебәрә алыр ине.

**▸ Ир - баш, ҡатын -муйын, тибеҙ. Ҡайһы бер осраҡтарҙа баштың муйын ролендә йөрөүен нисек аңларға?**

**Айгиз Мусин:** Ирмен тигән ир ҡайҙа булһа ла ир булып ҡалырға тейеш. Был минминләнеп, ҡатын менән кәңәшләшмәй, үҙеңсә генә эшләүҙе аңлатмай, әлбиттә. Килешеп эшләүгә бер ни ҙә етмәй. Шулай ҙа ғаиләне ҡарау, уның киләсәген планлаштырыу, балаларҙы оло тормошҡа аяҡ баҫтырыу кеүек бурыстар тәү сиратта ир иңендә ятырға тейеш. Ҡатын - ғаилә усағын һаҡлаусы, өйҙә тыныс, матур мөхит булдырыусы. Тәрбиә биреүҙә атай-әсәйҙең аныҡ ҡына айырым бурыстары юҡ тип уйлайым. Баланың бөтә ғәҙәт-ҡылыҡтары өсөн улар икеһе лә берҙәй яуаплы, шулай ҙа был йәһәттән ҡатындың роле ҙурыраҡ булырға тейештер. Беренсенән, ул күберәк ваҡытын бала менән үткәрә, баланың һәр аҙымы тиерлек уның күҙ алдында. Ғаилә ҡарайым, тип, көнө-төнө эш менән йүгергән атайҙың абруйын балалары алдында күтәреү, ир абруйын хөрмәт итергә өйрәтеү ҙә ҡатындан тора.

**Азат Шәнгәрәев:** Ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡатын-ҡыҙҙың лидер булыуы менән килешмәй ҙә булмай, сөнки арабыҙҙа ирлек бурысын тулыһынса үҙ өҫтөнә алмаған көслө заттарыбыҙ ҙа етерлек. Бына шундай саҡтарҙа, булмағанды көтөп ултырмай, үҙе тормош арбаһына егелгән ҡатын-ҡыҙҙы хупларға ғына ҡала. Быны булдырмау өсөн малайҙарҙа бәләкәй саҡтан уҡ ирлек сифаттары тәрбиәләү мөһим. Бөгөн күп кенә ата-әсәләрҙең улдарын армияға ебәрмәҫ өсөн бихисап аҡса түгеүен, әллә күпме тупһаларҙы тапауын да беләбеҙ. Армия - ул бөтә ир-егеттәр ҙә мотлаҡ үтергә тейеш булған сынығыу мәктәбе. Улын хеҙмәттән алып ҡалырға тырышҡан атай-әсәйҙәр ҙур хата эшләй. Ғөмүмән, ир-егетте үтә наҙламай, иркәләтмәй, һәр нәмәлә сама белеп үҫтереү кәрәк. Ир кеше ағас ултыртырға, өй төҙөргә, ул үҫтерергә бурыслы, тигән ҡағиҙә кесе йәштән малайҙарҙың мейеһенә һеңдерелергә тейеш. Һәр көнгә ышаныс менән ҡарап, ысын ир-ат булып йәшәр өсөн белемле булыуың да мөһим. Белемең бар икән, эшең дә, аҡсаң да булыр. Ҡыҙҙарға был йәһәттән әллә ни ҡурҡыныс юҡ, сөнки йүнле генә кейәүгә сығып, балалар үҫтереп, иренә ярап, эшләмәй ҙә бынамын тигән итеп йәшәй ала. Шуға күрә, улым ҡатын-ҡыҙ ҡурайына бейемәһен, һүҙен дә әйтә, эшен дә эшләй белһен, тиһәң, белем алыуҙың тәүге урында тороуын аңлау кәрәк.



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ошо диалогтан һуң, етәксе вазифаһында эшләүселәр менән бындай темаға ла әңгәмәләр кәрәк икән ул, тигән һығымта яһалды бына. Ни өсөн икәне тураһында үҙегеҙ һығымталар яһағыҙ һәм әңгәмәләге фекерҙәрҙе дауам итә алаһығыҙ. Хаттар көтәбеҙ.**

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Районда 54 ауылдың 37-һендә "Ағинәйҙәр ҡоро" әүҙем эшләп килә икән. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәше лә, олоһо ла бер төптән булып, башҡорт ауылдарындағы рухи донъяны һаҡлап ҡалыу теләге менән берләшкән был ҡорға.*



АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО



**"Ҡырмыҫҡалар ҙур түгел, күмәкләшеп тау өйә", тиҙәр бит әле беҙҙең халыҡта. Яңғыҙың башҡарған эш ырамаһа ла, бергәләп тотонғанда тау өйөргә лә, аҡтарырға ла мөмкин. Шулай булмаһа, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағындағы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының республикабыҙ райондарындағы һәм ҡалаларындағы ағинәйҙәр хәрәкәте киң ҡолас йәйеп, ҡыҫҡа ғына арауыҡ эсендә шул тиклем уңышлы эшләп китә алыр инеме ни! Күңел етһә, ҡеүәт тә етә, тигәндәй, ниһайәт, беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ ҙа ҡырмыҫҡалар кеүек берләшеп, бер уй-ниәт менән янып йәшәй, эшләй башланы. Башҡортостандың ҡайһы төбәгендә йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, милләттәштәребеҙҙең уй-ниәттәре бер булыуын ошо көндәрҙә Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында үткәрелгән "Ағинәйҙәр ҡоро"ноң сираттағы йыйыны асыҡ дәлилләне. Ун ете райондан йыйылған ағинәйҙәр тағы бер тапҡыр үҙҙәренең бер төптән, бер юҫыҡта, күмәкләшеп эшләүҙәренә инанып, тәжрибә уртаҡлашып, кәңәшләшеп, күңелдәрен үҫтереп ҡайтты.**



# БУЛЫР ИЛДЕҢ ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРЫ...

## бер-береһенә "Ағинәй" тип өндәшер





Заман ауыр, тормош көтөүе йылдан-йыл ҡатмарлана, кешелек ҡиммәттәре үҙгәрә, матди байлыҡ өҫтөн ҡуйыла бара, тип йыш зарланабыҙ. Рухиәткә, әхлаҡ һәм тәрбиәгә урын ҡалмай, йәштәр аҙғынлыҡҡа, насар йоғонтоға бирелә, башҡорт халҡы үҙ тамырҙарынан ситләшә, тигән фекер башыбыҙға ныҡлап һеңгән. Башҡорттарҙы һаҡларға, яҡларға кәрәк, тип оран һалабыҙ, ниմәнән һаҡларға һәм кемдән яҡларға икәнен дә төҫмөрләгән кеүекбеҙ. Ә шулай ҙа беҙгә ошондай зарҙарҙы телдән төшөрөп, беҙҙең өсөн кемдәрҙер килеп эшләр, проблемаларыбыҙҙы хәл итер, тип көтөп ултырыуҙан туҡтап, яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулыбыҙға алырға, үҙебеҙ өсөн үҙебеҙ эшләргә, балаларыбыҙға, йәштәребеҙгә рухи байлығыбыҙҙы тапшырып ҡалырға ашығырға кәрәк. Аллаға шөкөр, быны аңлаған, халыҡтың киләсәге ошо милләт вәкилдәре ҡулында булыуына төшөнгән шәхестәребеҙ, зыялыларыбыҙ бар. "Ағинәйҙәр ҡоро" ағзалары ла шул кешеләр сафына ҡапыл килеп инделәр ҙә, йән-фарман эшкә тотоноп та киттеләр. Тырышлыҡтарының һөҙөмтәләре күҙгә күренеп арта ғына бара хәҙер.



Сентябрҙә ун бишләп райондың ағинәйҙәре Әбйәлил районында йыйылып, тәжрибә уртаҡлашып, алға алған бурыстарҙы төҫмөрләп, артабан ниндәй юҫыҡта эшләргә кәрәк булыуын аныҡлап ҡайтҡайны. Уларҙы Аҡъярға ла шул уҡ маҡсат йыйҙы: күрешеп, аралашып, ҡатмарлы һорауҙарға бергәләп яуап эҙләп, Хәйбулла ағинәйҙәренең тәжрибәһен күреп ҡайтырға ине ниәттәре. Ноябрь айының ҡарһыҙ һыуығы ла, Хәйбулла далаһының әсе еле лә осрашыуға оло теләк, дәрт менән килгән ҡатын-ҡыҙҙарға ҡамасаулай алманы. Хәйбуллалар ҡунаҡтарҙы Аҡъяр ауылы мәҙәниәт һарайының ишеге алдында икмәк-ҡымыҙ менән ихлас ҡаршыланы. Сараның тәүге өлөшөндә хужабикәләр ҡул эштәре буйынса оҫталыҡтарын күрһәтте. Башҡортостанда ғына түгел, бөтөн Рәсәйгә билдәле Вәзәмдең һуғылған шәлдәре, Яңы Ергән ауылы оҫтабикәләренең сихри биҙәктәр төшкән иҫ киткес нескә мамыҡ шәлдәре ҡунаҡтарҙың иғтибарын йәлеп итмәй ҡалманы.



Шул арала Хәйбулла ағинәйҙәренең ҡайһы берҙәре менән әңгәмә ҡороп алдыҡ. Баҡтиһәң, районда 54 ауылдың 37-һендә "Ағинәйҙәр ҡоро" әүҙем эшләп килә икән. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәше лә, олоһо ла бер төптән булып, башҡорт ауылдарындағы рухи донъяны һаҡлап ҡалыу теләге менән берләшкән был ҡорға. Татырүҙәк ауылы ағинәйҙәре, мәҫәлән, биш-алты ай эсендә генә балалар, ололар менән берлектә бик күп эштәр башҡарып өлгөргән. "Пенсия йәшендәге оло инәйҙәребеҙ ҙә төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнаша. Донъя мәшәҡәттәре ҡамасау түгел, ауыл тормошон йәмләгән һәр сараның башланғысында йөрөйбөҙ. Эшләнмәгән эштәр бик күп, өлгөрөргә тырышабыҙ", - ти Татырүҙәк ауылы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Римма Солтанова. "Йәштәрҙән ҡалышырға иҫәп юҡ әле! Аҡыл һорап килеүсегә аҡыл бирергә, кәңәш итеүсегә ярҙамлашып ебәрергә һәр ваҡыт әҙербеҙ!" тинеләр уның һүҙен йөпләп һигеҙенсе тиҫтәләрен тултырған Шәфиғә Аҡбулатова менән Фәүзиә Иҡсанова.



Бүребай ауылы ағинәйҙәре, бергә йыйылып, бәйләм артында фекер алышып алғас, балалар баҡсаһына, мәктәпкә барып, төрлө саралар ойоштороуҙары тураһында һөйләне. "Күптән түгел балаларға ҡаҙ өмәһе йолаһын күрһәтеп алдыҡ. Йәштәр ҙә ҡыҙыҡһына, уларға ла бөтөн йолаларҙы ла өйрәтәбеҙ. Бабайҙарыбыҙ ҙа әүҙем, беҙҙең ыңғайға йөрөйҙәр. Үткәргән сараларыбыҙ шулай балаларыбыҙҙҙың, йәштәребеҙҙең күңеленә рух һендереүгә, әҙәплелеккә булышлыҡ итә", - ти бүребайҙар.

Йәнтеш ауылы ҡатын-ҡыҙҙары "Ағинәйҙәр ҡоро"на ойошҡанға тиклем үк ошо ойошма күҙаллаған маҡсаттар, бурыстарҙы атҡарыу менән шөғөлләнгән булған. "Ике йыл элек Баймаҡҡа "Ағинәйҙәр ҡоро" йыйынына барып, ундағы аҡһаҡалдар һәм ағинәйҙәр ойошмаларының эшен күреп, өйрәнеп ҡайтҡас, беҙ ҙә ошо уҡ бурыстарҙы үҙ иңенә йөкмәгән әүҙем ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ҡорға тупланыҡ. Шунан алып ауыл халҡын яҡшы, әҙәпле, иманлы, ынтылышлы, маҡсатлы йәшәргә саҡырып, сығыштар яһап, төрлө саралар үткәреп торабыҙ. Бөтә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ла ағинәйҙәр дәрәжәһенә өлгәшергә, өлгөлө ҡатын, әсәй, өләсәй булырға саҡырабыҙ. Мин һәр урында ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ағинәйҙәр тип сәләмләйем. "Булыр илдең балаһы бер-береһенә батыр тиер", тигәндәй, "Булыр илдең ҡатын-ҡыҙҙары бер-береһенә "Ағинәй" тип өндәшер", тигәнде ҡағыҙә итеп алғанбыҙ..." - ти Йәнтеш ауылы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Фәниә Арыҫланова.

Хәйбулла ағинәйҙәре үҙ тәжрибәләре менән ихлас бүлешкәндә ҡунаҡтар һәр ишетелгән һүҙҙе күңелдәренә һала барҙы. Ейәнсура районынан килгән Үргән ауылы ағинәйе Гүзәл Аҡсурина шуларҙы һөйләне: "Дүрт кеше килдек. Хәйбулла ағинәйҙәрен тыңлап, халҡымда ошондай йолалар, рух, сәм һаҡланыуын күреп, һоҡланып ултырам. Үҙебеҙҙең дәртебеҙҙе, халҡыбыҙҙың рухын үҙебеҙ күтәреп йәшәргә тейешбеҙ, тигән һығымта яһап ҡайтып китәбеҙ был саранан. Хәйбулла ағинәйҙәре тәжрибәһе беҙҙең Ейәнсура ағинәйҙәре өсөн дә һабаҡ, эшебеҙҙе әүҙемләштереүгә бер сәм булды, тип тә әйтмәксемен".

Бөрйән районы ағинәйҙәре йыйынға башҡаларға ҡарап тамаша ҡылыуҙы ғына түгел, үҙҙәренә ҡаратып ҡуйып тамаша ҡылдырырға тигән ниәтте лә йөкмәп килгән. Ҡорама оҫтабикәһе Рәшиҙә Ғиззәтуллина үҙенең ҡул эштәре күргәҙмәһен урынлаштырып, ҡыҙыҡһынған һәр кемгә төрлө туҡымаларҙан ҡоралған әйберҙәре тураһында ентекле һөйләп, өйрәтеп торҙо. "Ҡатын-ҡыҙҙарға район мәҙәниәт йортонда ҡорама ҡорауҙ-

✓ ***"Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының да етәкселәргә халыҡ фекерен еткерергә хоҡуғы бар. Был ағинәйҙәр башлап ебәргән эштең икенсе этабы булыр, тип ышанабыҙ... - тине Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы.***



ың заманса ысулдарын өйрәтеү ниәтендә махсус курстар үткәрәм, әлеге көндә даими рәүештә ун бишләп өйрәнсегем бар. Донъя кимәлендә мода һаналған йүнәлеш булғас, уны кәсепкә әйләндереп, киң йәйелдереп ебәрә алһаҡ, шәп буласаҡ. Заманса технологиялар буйынса тегелгән эштәребеҙ менән республика, Рәсәй кимәлендәге күргәҙмәләрҙә ҡатнашырға, конкурстарҙа еңеүҙәр яуларға иҫәп бар киләсәктә", - ти Рәшиҙә Ғиззәтуллина, синель технологияһы буйынса тегелгән ҡатын-ҡыҙҙар костюмын күрһәтеп. Ҡыҙыҡһынған һәр кемгә ихлас өйрәтеп, ярҙам итергә әҙер торған Бөрйән ағинәйе менән әңгәмәләшеп торған арала эргәбеҙгә Ишембай районы ағинәйҙәре килеп етте. Улар ҙа ауыл тормошонда әүҙем ҡатнашып йәшәүҙәре тураһында мәғлүмәт еткерҙе.

Хәйбулла ағинәйҙәренең һәр сығышы күңелгә ятты, ялыҡтырманы, һабаҡ бирҙе. Бигерәк тә уларҙың боронғо димләү йолаһын сәхнәләштереп күрһәтеүе фәһемле булды. Ауылдарҙа өйләнмәгән ир-егеттәр күбәйеүе башҡорт халҡының киләсәген хәстәрләүсе ағинәйҙәрҙең дә күҙ уңынан ситтә ҡалмаған. Улар хәҙер бергәләп димселәү йолаһын яйға һалырға йыйына. Ғөмүмән, эшләгән эштәре, тупланған тәжрибәһе байтаҡ булып сыҡты Хәйбулла районы ағинәйҙәренең. Ошо тос эш ун биш-егерме минутлыҡ видеоролик аша һәм Хәйбулла районы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Миңзифа Ишемғолованың ҡыҙыҡлы телмәрендә тулы итеп сағылдырылды. Шундай мәғлүмәт айырыуса ҡыҙыҡ тойолдо: райондың бер ауылында - самауыр байрамы, икенсеһендә - билмән, өсөнсөһөндә - ҡабаҡ, дүртенсеһендә - икмәк, бишенсеһендә - ситән, алтынсыһында - ҡорот, етенсеһендә балсыҡтан кирбес һуғыу һәм башҡа байрамдар үткәрелгән һәм улар ауылдарҙың брендына әүерелгән саралар итеп күтәрмәләнгән.

- Бындай байрамдар ойоштороу буйынса хәйбуллаларҙың тәжрибәһе айырыуса иғтибарға лайыҡ, - тине Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендәге "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гөлфиә Янбаева. - Йырлап-бейеп, күңел асыу ғына түгел ул байрамдарҙың маҡсаты, ә ауылдаштарҙы, йәштәрҙе әүҙемләштереү, берләштереү, дәртләндереү, сәмләндереү, уларҙы ауылдың йәмәғәт тормошона йәлеп итеү, иң мөһиме, элекке хеҙмәт төрҙәрен, шөғөл-һөнәрҙәрҙе иҫкә төшөрөү. Мәҫәлән, балсыҡтан кирбес һуғыу, талдан ситән, төрлө кәрзин, ҡош оялары үреү кеүек шөғөлдәрҙе күптән ҡулдан төшөрҙөк. Ниңә уларҙы яңынан аяҡҡа баҫтырмаҫҡа, тип тотоноп киткән дә инде был эшкә хәйбуллалар. Бына шулай, бер район ағинәйҙәренең эш тәжрибәһен икенсе район ағинәйҙәре лә күрһен, үҙләштерһен, тигән маҡсатта йыйҙыҡ әлеге йыйыныбыҙҙы. Артабан да бер-беребеҙҙән өйрәнәйек, рух, дәрт, тәжрибә, ҡот менән бүлешәйек. Беҙҙең был эшебеҙ милләт бишеге булған ауылдарыбыҙҙы һаҡлауға, халҡыбыҙҙы ошо маҡсатта берләштереүгә, үҙебеҙҙең барлығыбыҙҙы белдереүгә, тауышыбыҙҙы башҡаларға ишеттереүгә булышлыҡ итһен...

Был фекерҙе Хәйбулла районы "Ағинәйҙәр ҡоро" йыйынын йәмләгән мәртәбәле ҡунаҡтар - Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Хәләф Ишморатов, "Башбланкиздат"тың генераль директоры Гөлсәсәк Әлибаева, яҙыусы Мәрйәм Бураҡаевалар ҙа хупланы.

- Рәсәй Федерацияһының "Йәмәғәт контроле" тураһында ярты йыл элек ҡабул ителгән законы бар. Ошо законға ярашлы, төрлө йәмәғәт ойошмалары юғары вазифала эшләүсе етәкселәрҙең, төрлө чиновниктарҙың эшенә баһа бирә, тәнҡит һүҙҙәрен еткерә һәм төрлө тәҡдимдәр индерә ала. "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының да етәкселәргә халыҡ фекерен еткерергә хоҡуғы бар. Был ағинәйҙәр башлап ебәргән эштең икенсе этабы булыр, тип ышанабыҙ... - тине Сәлиә Шәрифйән ҡыҙы. Сығышы һуңында ул иң әүҙем ағинәйҙәргә үҙенең иҫтәлекле бүләктәрен тапшырҙы, ә Хәйбулла районы Аҡъяр ауылының "Ағинәйҙәр ҡоро"на ноутбук тапшырҙы.

Ағинәйҙәрҙең эше башҡорт ауылдарындағы тормошто йәнләндереп ебәреүгә, рухи ҡиммәттәрҙе һаҡлап ҡалыуға ғына ҡайтып ҡалмауын, ә дәүләт кимәлендә лә ҙур әһәмиәткә эйә булыуын Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары Хәләф Ишморатов билдәләп үтте:

- Бөгөн Рәсәй космосҡа осорған ракеталары һаны, газ запастары һәм уны сит илдәргә сығарыу буйынса донъяла беренсе урында торһа, төрлө насар ауырыуҙар, ата-әсәләре тарафынан ташланған балалар, аборт эшләүҙәр буйынса ла - донъя лидеры. Ошо хәлдәрҙе күҙ уңында тотоп, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙҙың рухи үҙаңын үҫтереү буйынса әүҙем эш башланы. Әлбиттә, ошо эштә ағинәйҙәрҙең роле баһалап бөткөһөҙ, мин быға Хәйбулла районы ағинәйҙәре миҫалында тағы бер тапҡыр инандым. Халҡыбыҙ мәнфәғәтендә эшләнгән был эштәрҙең әҙер рецебы юҡ, уны һәр кем үҙенең йөрәге ҡушыуы буйынса ғына атҡара ала. Бөгөн беҙ бына ошондай фиҙаҡәрлектең, энтузиазмдың шаһиты булдыҡ... - тине Хәләф Хәлфетдин улы һәм йәмғиәттең проблемаларын аңлап, был йүнәлештә ағинәйҙәргә һәр яҡлап ярҙам итеп тороусы Хәйбулла район хакимиәте башлығы Раил Хажиморат улы Ибраһимовтың, ауыл биләмәләре башлыҡтарының маҡтауға лайыҡ эшен хуплап телгә алды.

Ысынлап та, халҡынды күтәреп, һин үҙенде лә күтәрәһең, тигән хәҡиҡәтте раҫланы әлеге йыйын ваҡытында Хәйбулла районы етәкселәре. Район хакимиәте башлығы Раил Ибраһимов "Ағинәйҙәр ҡоро"нда ҡатнашып, сығыш яһап, иң әүҙем, иң өлгөр ағинәйҙәргә иҫтәлекле бүләктәр, маҡтау ҡағыҙҙары тапшырып, был сараның район халҡы тормошонда ла ҙур әһәмиәткә эйә булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Йыйынды ойоштороуға ҙур көс һалған башҡа етәкселәр ҙә - район хакимиәте башлығы урынбаҫары Минзәлә Баймырҙина, мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Лариса Мәмбәтова, ауыл биләмәләре башлыҡтары үҙҙәренең, кешенән эш талап итеү еңел, кешене шул эште атҡарырлыҡ итеп тәрбиәләү мөһим, тигәнде һанлағандарҙан икәнен күрһәтте.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аҫыл таш-һыу төбөндә, аҫыл һүҙ-күңел төбөндә, тигән кеүек, Хәйбулла районында үткәрелгән "Ағинәйҙәр ҡоро" ойошмаһы ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың йөрәк түрендә быуаттар буйы һаҡланып ҡала килгән аҫыл һүҙҙәрен, изге ниәттәрен ҡапыл өҫкә ҡалҡытып, бөтә халҡыбыҙға аҫыл таштар итеп һирпеп ебәрергә ярҙам итте төҫлө. Бөгөн милләтебеҙҙең ынйылары республикабыҙ буйлап таралып, иҫ киткес бер ҙур рухи тanyisҡа әүерелде. Күңелдәре етһә, киләсәктә ағинәйҙәрҙең йәмғиәт проблемаларын хәл итергә, етәкселәргә эштәрендә йүнәлеш бирергә, балаларыбыҙҙы илһөйәр, телһөйәр итеп тәрбиәләргә лә ҡеүәттәре етер, иншалла!**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*АҒИНӘЙҘӘР ӘЙТЕШЕ*

# ОРАН ҺАЛ ҺИН ТИРӘ-ЙҮНГӘ,

## Ҡайтһын өсөн йәшәү ҡото



**Менәүерә Бохарбаева:**
Килеп баҫтым алдарыңа, әхирәтем,
Башым ҡайнай бәғер телгән һорауҙарҙан,
Сараһы юҡ ҡотолорға был ыҙанан,
Яуапты һин бирерһең, тип өмөт итәм.
Күрәһеңме аҡ ҡайынды, ниндәй ғорур,
Күтәрәлмаҫ ҡар ятһа ла иңдәрендә.
Елбер елгә әкрен генә, эйелгәндәй,
Ниҙер һөйләй, ниҙер көйләй үҙ телендә.

**Мәрфуға Азаматова:**
Аҡ ҡайының - Ағинәй, тип әйтәйем мин.
Тамыр йәйеп, ғорур йәшәй үҙ ерендә,
Изге уйҙар, иман нуры күңелендә,
Күтәрә алмаҫ милләт ғәме иңдәрендә:
Ил яҙмышы, бөгөнө һәм киләсәге
Тураһында борсолоуҙар хәстәр һалған.
Ил терәге булырҙай ул үҫтерер
Йәш әсәләр, йәш ҡыҙҙарҙың ҡай береһе
Елбәҙәк ел ыңғайына юлын борған...

**Менәүерә Бохарбаева:**
Ҡатын тиһәң, ҡатын микән,
Ирме тиһәң - ир түгелдер.
Өҫтө-башы күптән бөткән,
Бары кеше сүрәтелер.
Шәме һүнгән, ҡап-ҡараңғы,
Быҫҡып яна усағы ла.
Утҡа өрөр кеше юҡмы,
Бөтөрмө ни донъяһы ла?
Ҡотҡарырлыҡ әмәл бармы,
Оран һалыр зат ҡалдымы?

**Мәрфуға Азаматова:**
Атын-затын аңламаҫлыҡ,
Ҡешелек йөҙөн юғалтып,
Йөрөп ятҡан был бәндәләр -
Йәшел йылан ҡоллоғона
Дусар булған меҫкен йәндәр.
Юҡҡа сыҡҡан асылында,
Быҫҡып янған усағында
Ҡалғандыр бит бер тере ҡуҙ!
Ағинәйем, өрөп кенә
Тоҡандырсы ошо ҡуҙҙы,
Еткерсе һин изге һүҙҙе,
Бөтмәһен, тип, ошо донъя,
Һүнмәһен, тип, күңел уты,
Оран һал һин тирә-йүнгә,
Ҡайтһын өсөн йәшәү ҡото.

**Менәүерә Бохарбаева:**
Ҡулдарында аҡ еп уның,
Аҡ селтәрҙәр бәйләмә.
Күңел наҙын, күҙе нурын
Шул бәйләмгә теҙәме?
Кеше быны белерме,
Алтын, ебәк, аҡсанан
Тонған күҙҙәр күрерме,
Дөрөҫ баһа бирерме?

**Мәрфуға Азаматова:**
Ата - улын , әсә - ҡыҙын
Белмәгән бер заманда,
Ғәмһеҙлектән, яһиллыҡтан
Ҡиммәттәр буталғанда,
Күңел нурын, йөрәк наҙын
Аҡ еп итеп Ағинәй
Сабый бала күңеленә
Аҡ нурҙан селтәр бәйләй.
Ағинәйҙәр изгелеге ерҙә ятып ҡалмаһын,
Күҙе тонған ҡомһоҙҙарҙы
Намыҫ уты ялмаһын!

**Менәүерә Бохарбаева:**
Әкиәттәге йомро йомғаҡ ҡайҙа бара?
Һис кем белмәй, ә артынан йүгерә бала..
Ошо бала хәлкәйендә ҡалманыҡмы,
"Һайт" тигәнгә "тайт" тиешеп сапманыҡмы,
Әйҙәүсенән илаһи зат яһаныҡмы,
Ә һуңынан терһәк тешләп һыҡтаныҡмы?

**Мәрфуға Азаматова:**
Етем ҡыҙҙы йомро йомғаҡ
Яҡшыллыҡҡа илткән дә һуң.
Әкиәт бит, ә тормошта
Әйҙәүселәр кем ине һуң?
Аҡ-ҡараһын бутай-бутай,
Аңламайса нимә ялған,
Ә нимә хаҡ?
Ниңә яла яғыла нахаҡ?
Диндән яҙып, иман юйып,
Кешеләрҙе Алла яһап,
Табындыҡ бит, гүйә, ахмаҡ.
Динһеҙлеккә илткән һуҡмаҡ,
ай-һай, тайғаҡ,
Беҙ үҙебеҙ хәҙер инде йомро йомғаҡ,
Ҡайҙа барыр, ҡайҙа туҡтар күңел-ҡамғаҡ,
Ағинәйҙәр генә табыр быға яуап.

**Менәүерә Бохарбаева:**
Әхирәтем, ғәжәп бер төш күрҙем:
Киң аҡланға, имеш, сыҡҡанбыҙ,
Сәскәләргә ҡарап һоҡланабыҙ,
Таң ҡалабыҙ күреп күк йөҙөн.
Ошо сафлыҡ, ошо матурлыҡтан
Илаһи бер моңдар түгелде,
Һәм сорнаны бөтә күңелде.
Ата-инәм элек төш юратҡан,
Булһа юраусыһы изгенән.
Аҡлыҡ юллап, иман һорап,
Юрап бирсе минең төшөмдө.

**Мәрфуға Азаматова:**
Изге төш күргәнһең, әхирәтем,
Юрайыҡсы оло шатлыҡҡа:
Киң аҡланы күркәм ҡор булһа,
Аяҙ күк - ул матур киләсәк.
Күңелдәре паҡлыҡ, сафлыҡ тулы
Ағинәйҙәр беҙгә нур сәсә.
Күңелдәрҙе сорнар илаһи моң
Ғәфләт йоҡоһонан уятырҙай
Рух ныҡлығы, илһам, көс бирерҙәй
Ил инәһе әйтер һүҙ булыр,
Ағинәйҙәр әйтер һүҙ булыр!

**Менәүерә Бохарбаева:**
Юрағаның, әхирәтем, юш булһын,
Яуаптарың йөрәгемә им һалһын!

**Был әйтеш 2014 йылдың 25 ноябрендә Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында үткән "Ағинәйҙәр ҡоро"нда әйтелде.**

ИНТЕРНЕТТАН



## МУЗЫКАНТТЫҢ... хәтере яҡшы

■ Күптәр дарыуҙарҙы дөрөҫ ҡабул итмәй. Cochrane Library баҫмаһында бер төркөм ғалимдар 182 төрлө тикшеренеүҙәрҙең һығымталарын баҫтырып сығарған. Һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың яртыһы табиптарҙың күрһәтмәләрен үтәмәй. Кемдер дарыуҙы тейешле курс менән эсмәй, кемдер уны ҡасан һәм күпме эсергә кәрәклеген онота. Был хаталарҙы төҙәтеү өсөн тәүҙә үҙеңдең хаталаныуыңды танырға кәрәк, ти ғалимдар. Бөгөн төрлө сығанаҡтар ниндәй дарыуҙы нисек һәм ҡасан ҡабул итеү хаҡындағы мәғлүмәт менән тулған, уларҙың араһында ҡайһыһы дөрөҫлөккә тап килеүен билдәләүе лә ауыр.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, музыканттарҙың хәтере башҡа кешеләрҙекенә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Юта университеты (АҠШ) үткәргән һынауҙарҙа 14 музыкант һәм музыкаға бер ҡыҫылышы ла булмаған 15 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың барыһына ла картиналар йәки һүҙҙәр йыйылмаһы тәҡдим ителгән. Шул уҡ минутта улар әле генә күргән һүрәттәрен йәки һүҙҙәрҙе иксенсе өйөмдә ятҡан картиналар араһынан һайлап алырға тейеш булған. Музыканттар икеосраҡта ла эште тиҙерәк башҡарған һәм һирәгерәк яңылышҡан. Музыкант һөнәрен һайлаусыларҙың хәтере ни өсөн нығыраҡ үҫешеүен ғалимдар аңлата алмай. Һәр хәлдә, ниндәйҙер музыка ҡоралында уйнау, сәнғәт менән ҡыҙыҡһыныу кешенең аҡыл ҡеүәһен үҫтерә, был тикшеренеүҙәр ошоно дәлилләй.

■ Кеше үҙенең яҡшы һәм кире сифаттарына ғәҙел булырға һәм уларҙы ҡабул итергә тейеш. Шул саҡта ғына ул икенсе яртыһы менән романтик мөнәсәбәттәр ҡора ала, тип белдерә Огайо штаты университеты (АҠШ) психологтары. Тикшеренеүҙәрҙә 62 пар студент ҡатнашҡан. Улар өс өлөшкә бүленгән һораулыҡҡа яуап биргән. Психологтар тәүҙә кешенең үҙенә ҡуйған баһаһын һәм был саҡта ни тиклем ғәҙел булыуын тикшергән. Икенсе өлөштә студенттарҙың һөйгәндәренә булған мөнәсәбәте асыҡланған, уларҙың бер-береһенә асыҡ булыуы, сер йәшермәүе баһаланған. Өсөнсө өлөштә иһә үҙ-ара мөнәсәбәттәр һәм һәр кемдең шәхес булараҡ үҫеше тураһында һүҙ барған. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, үҙ шәхесенә ғәҙел баһа биреүселәрҙең шәхси тормошо ла яйлы барған, үҙҙәре лә үҫеш кисергән.

■ Көнөл һалып эшләнгән эш иң негатив факторҙы - хроник стресты булдырмай икән. Быны 2600 кеше ҡатнашлығында үткән тикшеренеүҙәр күрһәткән. Техас штаты ғалимдары фекеренсә, ижади карашлы кешеләр, ҡағыҙҙа булараҡ, яҡшыраҡ йоҡлай һәм дөрөҫөрәк туҡлана. Аҡыл талап ителгән, ҡатмарлы мәсьәләләр хәл итергә тура килгән һөнәр эйәләре ауыр физик йәиһә уйлау талап ителмәгән ерҙә эшләүселәргә ҡарағанда үҙҙәрен йәшерәк тоя икән, уларҙың һаулығы ла нығыраҡ була.

■ Израиль ғалимдары, көн һайын йыуынмағыҙ, тип белдерә. Һыу менән һабын тиренең бәшмәк һәм бактерияларҙан һаҡлаусы тәбиғи ҡатламын йыуып төшөрә, тимәк, уның кислота-һелте балансын боҙа. Шулай уҡ йыш йыуыныу тиренең D витаминын синтезлаусы зоналары боҙолоуына килтерә, шуға ла организмда был кәрәкле элемент етешмәй башлай. Белгестәр көн һайын иң кәрәкле гигиеник процедураларҙы ғына башҡарырға, ә душты аҙнаһына ике тапҡыр инергә кәңәш итә.

ХЕҘМӘТ ҺАБАҒЫ

# ҮҘЕҢ ЕТЕШТЕРГӘН РИЗЫҠҠА...

## етә буламы һуң!

**Халҡыбыҙҙың мәҡәл-әйтемдәренең тәрән мәғәнәһенә, ундағы тормош фәлсәфәһенең дөрөҫлөгөнә хайран ҡалырлыҡ. Ысынбарлыҡты шулай ҡыҫҡа һәм тос итеп әйтеп биреү, уларҙы быуындан-быуынға еткереү өсөн ни тиклем аҡыл, фекер тупларға кәрәк икән, тип ғәжәп итәһең. Кешеләр менән осрашып аралашҡанда "Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр", йә иһә, "Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән", "Аяғың тәп итмәй, ауыҙың сәп итмәй", "Эшләгән - ашаған, эшләмәгән - ҡаҡшаған" кеүек мәҡәлдәрҙең бушҡа ғына килеп сыҡмауына инанаһың. Бөгөнгө һүҙебеҙ ҙә ошо мәҡәлдәрҙәге хәҡикәтте асыҡ дәлилләүселәрҙең береһе - Белорет районының Абҙаҡ ауылы килене Илзирә ӘХМӘТЙӘНОВА хаҡында булыр.**



Тыуған ояһында алған тәрбиәһе, ата-әсәһенән күскән эшһөйәрлеге менән ауыл тормошон яратып, уның бар матурлығын тойоп йәшәүселәрҙең береһе ул балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләүсе, тормош иптәше Рөстәм менән ике ул һәм бер ҡыҙ тәрбиәләп үҫтереүсе Илзирә. Әлбиттә, күптәргә өлгө булып, ауылда гөрләтеп донъя көтөүгә бөтәһенең дә барымы булмай. Берәүҙәр - алма, икенселәр хөрмә яратҡан кеүек, тормошта ла кемдер ауылды үҙ итә, икенселәр ҡалала йәшәүҙе хуп күрә. Ғөмүмән, бөгөн ауыл халҡын һис икеләнмәй ике төркөмгә бүлергә булыр ине: мал тотоп, ҡош-ҡорт үрсетеп, баҡса үҫтереп, рәхәтләнеп ауыл тормошо файҙаһын күреүселәр һәм быларҙың барыһын да файҙаһыҙға көс түгеү тип һанап, магазин кәштәләрендәге әҙер ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүселәр. Ә бына Илзирәне бер һүҙһеҙ тәүгеләр рәтенә индерергә була. "Ауылдан башҡа тормошомдо күҙ алдына ла килтерә алмайым. Көнөлең бошҡан саҡтарҙа баҡсаңа сығып, түтәлдә ҡаҙыныуҙан, йәиһә ҡурандағы ҡош-ҡортоңа ем һибеүҙән генә лә әллә күпме йәм, тынyслыҡ табырға була", - ти ул. Бөгөн беҙ Илзирә менән ауылда мал тотоп йәшәүҙең өҫтөнлөгө хаҡында әңгәмә ҡорҙоҡ.

- Мал тотоп ыҙалағансы, теләгән нәмәне магазиндан ғына сығаһың да алаһың, тиеүселәр күбәйҙе, - тип һөйләп китте Илзирә. - Уйлап ҡараһаң, уларҙың һүҙендә лә хаҡлыҡ бар кеүек. Мал тотам, тиһәң, бесәнен эшләргә, бесән эшләйем, тиһәң, техникаһын, ягыулыгын һатып алырға кәрәк. Ә инде баҡса үҫтерәһең икән, көнө-төнө тупраҡта соҡсонорға, баш ҡалҡытҡан һәр шытымыңды тәрбиәләргә, һыуын һибергә, сүбен утарға тура килә. Һин шулай баш күтәрмәй эш менән булғанда, икенсе берәүҙәрҙең йәй хозурлығына кинәнеп, рәхәтләнеп һыу инеүе, ҡояшта ҡыҙыныуы күптәрҙе уйланырға ла мәжбүр итәлер. Шулай ҙа иртә таңдан тороп мал менән булған, баҡса ҡараған кешеләр барыбер ҙә үҙенә күберәк хөрмәт, һоҡланыу уята. Малыңды, баҡсаңдағы йәшелсә-емешеңде күҙгә тиклем иминаман ғына үҫтереп алыу - бер шөғөл булһа, уны ризыҡ итеп эшкәртеү тағы ла яуаплыраҡ һәм мөһимерәк эш. Ике һыйыр тотабыҙ, йыл һайын ҡаҙ, өйрәк, бройлер себештәре һатып алабыҙ. Ауылда йәшәп тә, мал тотмауҙы күҙ алдына ла килтермәйем. Шуға күрә, кәртә-ҡуралағы эштәрҙе көнөлемдә биреп, яратып башҡарам. Ҡасандыр атай-әсәй биргән тәрбиәнең бөгөн ни тиклем кәрәк, мөһим булыуын асыҡ тоям. Һуғым осоронда ла кәнәштәре ярап ҡала. Мәҫәлән, һуғымсының ҡулынан күп нәмә тороуын бәләкәй саҡтан ишетеп үҫтек. Шунлыҡтан, итебеҙ тәмле, татлы булһын өсөн был эшкә белгән кешене генә саҡырабыҙ.

Ғөмүмән, һуғым, ҡаҙ өмәләре беҙҙең өсөн үҙе бер йола үтәү ул. Был эштәрҙең үҙ рәте, нескәлеге бар. Бында эш ирҙәр һәм ҡатындар эшенә бүленә. Ирҙәр һуғымды һуйып, эсәкте төшөргәс, беҙ, ҡатындар, тиҙ арала эсәкте аралап алабыҙ. Әгәр ҙә яйлап тотонһаң, эсәк араһындағы май тунасаҡ һәм йыуғанда әйләндереүе ҡыйын буласаҡ. Эсәкте аралап бөткәс, уларҙы биҙрәләргә тултырып, йылғаға алып барып, ағын һыуҙа йыуаһың да, лайлаһы сыҡһын өсөн ағарғансы ҡарҙа яҡшылап тапайһың. Өйгә алып ҡайтҡас, эсәкҡарынға күп итеп тоҙ һалып, төнгөлөккә ҡалдыраһың. Ҡайһы берәүҙәр

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# "ТӘҮФИҠЛЫ БУЛ, ӨЛӘСӘЙ!"



**Беҙ, өс бер туған: ағай, һеңле һәм ҡусты, өсөбөҙ ҙә атай йортонан ситтәбеҙ. Беребеҙ - уҡый, икәүебеҙ - эшләй. Ҡырҙа йәшәгәс, ата-әсәй, өләсәйҙәр менән бары тик кеҫә телефоны аша ғына һөйләшеп хушһынырға тура килә.**

Кистәрен, ғәҙәттә, өсәүебеҙ телефондан бер "кор"ға тоташып алабыҙ ҙа, туғандарға шылтырата башлайбыҙ. Беҙҙең өсәүләп шылтыратҡанды көтмәгән туғандарыбыҙ менән тәүҙә беребеҙ һүҙ башлай, яйлап икенсебеҙ берәй реплика ҡыҫтырып, сымдың теге яғындағы әңгәмәсене аптырата, аҙаҡ өсөнсөбөҙ ҙә әңгәмәгә ҡушыла. Шулай итеп, барыбыҙ бергә осрашҡан һымаҡ килә лә сыға.

Сираттағы "кор" Хөснә өләсәйемә шылтыратыуҙан башланды. Тәүҙә Айгөл һеңлем уның хәлен белеште, унан ары - мин, аҙаҡ иң һуңғы аккордты шаян ҡустым Иҙел башҡарып ҡуйҙы. Өләсәйҙәр шулай бит инде: улар һәр һөйләшеү аҙағынан беҙгә һаулыҡ, именлек, тәүфиҡ, донъяға, йортилгә тынyслыҡ теләргә әүәҫ. Һүҙҙе йомғаҡлап, ҡустыбыҙ: "Ярай, өләсәй, тәүфиҡлы бул!", - тип әйтеп һалды. Данлыҡлы Байым ишан варисы Әхмәтҡәзи мулланың ҡыҙы булараҡ, өләсәй үҙе диндар кеше, кинйә ейәненең шаяртыуын аңлап ҡабул итте, беҙгә ҡушылып, күңелле генә көлөп, кинәйләп әйтеп ҡуйҙы: "Эйе шул, иң тәүҙә ололар тәүфиҡлы булырға тейеш, ул сағында балалар ҙа әҙәпле була. Ҡартайғас та аҡылдарын юғалтҡан кешеләр осрап тора бит..."

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

эсәкте бешекләй, теләмәгәндәр шунда уҡ уларҙы айырып, ас эсәкте, туҡ эсәкте, бөйәнен, ҡатлансығын, ҡарынын өлөштәргә бүлеп бәйләп, элеп ҡуя. Әгәр ҙә бешекләргә кәрәк булһа, йыуылған эсәктәрҙе саҡ ҡына ҡайнатып алып (оҙаҡ ҡайнатырға ярамай, ул саҡта эсәкте ҡырып булмаясаҡ) ҡырып, тағы берҙе йыуаһың.

Эсәк-ҡарынды эшкәртеү ҡатын-ҡыҙ эше булһа, итте өлөштәргә бүлеп элеүҙе ирҙәр башҡара. Йола буйынса, һуғым салған кешегә шунда уҡ салыу урынын, йәғни муйын өлөшөн биреп ҡайтарабыҙ. Итте 6 өлөшкә бүлеп, һүле аҡһын өсөн ышыҡ ергә элеп торабыҙ. Ит туңғас, уны үҙеңә кәрәккән бәләкәй өлөштәргә бүлеп, кипмәһен өсөн полиэтилен менән урап һалып ҡуябыҙ. Ҡайһы берәүҙәр итте ҡарға ла күмә. Тик улай иткәндә, иттең тәме, һуты юғала.

Тәүге көн ит, эсәк-ҡарынды тәрбиәләү менән булышһаҡ, икенсе көнгә яңы иттән күп итеп аш һалып, өмәселәремде ҡунаҡҡа саҡырам. Үҙем ҡырҡҡан һалмалы аш менән һыйлағас, ит менән картуф бирәм, баҡсамда үҫтергән йәшелсә-емешемде ултыртам. Әсәйем өйрәтеүенсә, һуйған көн - туйған көн булырға тейеш, шуға ла ризыҡты мул әҙерләргә тырышам. Был көн тәрбиәләп үҫтергән малыңды имен-аман ашарға насип булыу шатлығын яҡындарың, күрше-күләнең менән уртаҡлашыу ҙа ул. Ғөмүмән, һуғым һуйыу бер кешенең генә эше түгел. Был эште күмәкләп, дөрөҫ итеп башҡарыу шарт. Шуға күрә, ярҙамсыларымдың барыһын да ризалыҡта ҡалдырам.

Быйыл 20 өйрәк, 15 ҡаҙ бәпкәһе, 20 бройлер себеше лә һатып алдыҡ. Бройлерҙар йәйге осорҙа, иткә ҡытлыҡ ваҡытында яҡшы була. Бесән ваҡытында көтмәгәндә ҡунаҡ килеп төшһә лә салып ебәреүгә уңайлы. Уның күбеһен йәй буйы тотоноп та бөтәһең, шуға күрә көҙгөләккә әллә ни мәшәҡәт тә ҡалмай. Өйрәкте ем яуы булмаһын өсөн 3 айҙан да артыҡ тотмайбыҙ. Артыҡ ҡараһаң, уның кире ябығыуы ла бар. Ә бына ҡаҙ бәпкәләре бөтә яҡлап та наҙлыраҡ була. Уға тәрбиә лә яҡшы, ашатыу ҙа оҙағыраҡ булырға тейеш. Ҡаҙ өмәләрен ноябрҙә генә башлайбыҙ. Һуйыр алдынан ҡаҙҙың ҡауырһындары аҫтындағы бер-ике бөртөк мамығын йолҡоп ҡарайһың. Аҫтында яңы сығып килгән мамығы булмаһа, һуйырға ярай, тигән һүҙ. Әгәр ҙә мамыҡтары яңы сығып килһә, тағы ла ашата бирәһең, сөнки ваҡ мамыҡты таҙартыуы ҡыйын була. Ҡаҙҙы салыуҙы йола буйынса иң башта уның тәпәйҙәрен бәйләй һәм башын ҡиблаға ҡаратып, рәхимен әйтмәй генә бисмилла әйтеп сала. Тышта ҡаҙан аҫып, һуйылған ҡаҙҙарҙың муйынын бәйләп, ҡанаттарын ҡырҡып алабыҙ. Ҡанат аҫтындағы айырылып торған бер нисә бөртөк ҡаты йөндәрҙе йолҡоп алабыҙ. Улар мендәргә тығыу өсөн бармай, сөнки халыҡ уны хәрәм йөнө тип йөрөтә. Ҡайнар һыуға тығырҙан алда ҡойроҡ, ҡанат өлөшөндәге ҡауырһындарҙы йолҡоп, айырым һауытҡа һалып барабыҙ. Аҙаҡ тағы бер тапҡыр өмә ойоштороп, ҡауырһын һыҙырырға була. Шунан ҡаҙҙы әйләндерә-тулғандыра һыуға тығып алабыҙ ҙа, парына бырығып, мамығы йомшарһын өсөн, ҡалын әйбергә урап һалып торабыҙ. Һыу мамыҡтарҙы сетҡаға тултырып барабыҙ. Һуңғараҡ, әҙерәк бушағас, уны сетка эсендә көйө йыуабыҙ. Майын эсәктән айырып алыуы еңел булһын өсөн, йолҡонған ҡаҙҙарҙы ҡарға һалып, әҙерәк туңдырып алырға мөмкин. Алынған эсәктәр ҙә аҙыраҡ ҡарҙа ятһа, яҡшыраҡ була. Әгәр ҙә эсәктәрҙе лә эш итергә кәрәк икән, уны уртаға ярып, йыуып бешекләйһең. Иң һуңынан баш, тәпәйгә сират етә. Тәпәйҙәрҙең тышҡы тиреһен һыҙырабыҙ, баштың йөнөн йолҡоп, ауыҙ-томшоғоноң ҡаты ҡатламын, киңерҙәген алабыҙ. Һыҙырыуы еңел булһын өсөн уларҙы ҡайнар һыуға тығып алырға кәрәк. Йыуып бөткәс, тәпәйҙәрҙе ҡапма-ҡаршы һалып, йыуылған эсәк менән урайбыҙ. Был эштәрҙе тамамлағас, сират тағы ҡаҙҙарға күсә. Ҡаҙҙы тағы бер тапҡыр ҡайнаған һыуға тығып, тышын бысаҡ менән ҡырам да, ҡоро сепрәк менән һөртөп, аш содаһы һалып, мул һыуҙа тағы берҙе яҡшылап йыуам һәм һыуы һарҡһын өсөн ҡаҙҙарҙы кискә тиклем түңкәреп ҡуям. Кискеһен өмәселәрҙе ирҙәре менән бергә ашҡа саҡырам. Аш әҙер булғансы ҡатындар ҡаҙҙарҙы тоҙлап ҡуя. Күстәнәс итеп биреү өсөн ҡаҙҙың ботон, башын, тәпәйҙәрен бешереп, һәр береһенә өлөш итеп алдан әҙерләйем.

"Кем эшләмәй, шул ашамай" тип дөп-дөрөҫ әйткәндәр. Ауылда йәшәр өсөн ауылды яратыу, эш рәтен белеү мөһим. Эш итә белгәндә, мал аҫрап, баҡса үҫтереп, әллә күпме ризыҡ әҙерләргә мөмкин. Артығын һатып та ебәрәһең, килгән-киткән кешегә, туғандарға, дуҫтарға бына тигән күстәнәс тә була. Өйҙә йыл әйләнәһенә яңы ҡороттан, эремсектән, май-ҡаймаҡтан өҙөлмәйбеҙ. Ә инде үҙең эшләгән ҡойҡа (холодец), рулет, тултырмалар барҙа, магазин колбасалары ары торһон. Балалар өсөн дә файҙалы, аҡсаң да кеҫәңдә ҡала. Магазиндан составында нимә булғаны ла аңлашылмаған аҙыҡ-түлек алып ашағансы, үҙең үҫтергәнгә бер нәмә лә етмәй...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бына ошондай егәрле, дәртле килендәр йәшәй Абҙаҡта. Бәләкәйҙән эш һөйөп, атай-әсәйҙең өлгөһөнә эйәреп, улар кеүек булырға ынтылып, холҡо-фиғелдәрендә нәҡ уларҙы сағылдырып йәшәй белеү үҙе үк башта телгә алған мәҡәлдәребеҙҙең ни тиклем мәғәнәле, ысынбарлыҡты оҫта сағылдырыуына асыҡ дәлил булып тора ла инде.**

**Әнүзә ЗЫКРИНА.**

*ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ*

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ




## Ҡөрьәнде белмәүселәрҙең ғәйебе нимәлә?

- Ә Ҡөрьәнде бөтөнләй белмәүселәр, изге китаптарҙы күрмәгәндәр хаҡында ни тиерһең? Уларҙың гонаһы ниндәй дәрәжәлә һәм Яуап алыу көнөндә урындары ҡайҙа буласаҡ? Әйтәйек, Алыҫ Төньяҡтан эскимостарҙы йәки Африка джунглиҙарындағы кешеләрҙе нимә көтә? - тип дуҫым һөжүмен дауам итте.

- Беренсенән, һин һорауҙарҙы дөрөҫ бирмәйһең, - тинем мин уға. - Алла беҙҙең беребеҙҙе лә үҙ мәрхәмәтенән мәхрүм итмәгән, был турала Ҡөрьәндә: "Өгөт-нәсихәт үтмәгән бер халыҡ та юҡ", - тиелә.

Алланың асыштары йәки өгөттәре күп төрлө: улар - Ябраил килтергән китап, Алла үҙ ҡолоноң йөрәгенә йүнәлткән нур, күңелдәге шатлыҡ һәм ҡәнәғәтлек тойғоһо, аҡыллылыҡ, ысынбарлыҡ, буйһоноусанлыҡ, тәҡүәлек, ҡурҡыу. Үтә һиҙгер булған һәр кем был бүләкте Алла ҡөҙрәте менән ала икәнен аңлай.

Ләкин ҡолағын һәм йөрәген ҡаплағандарға китап та, бәйғәмбәрҙәр ҙә, белдерткес билдәләр ҙә ярҙам итмәй. Алла бер кемде лә үҙ мәрхәмәтенән айырмай һәм Ул ҡылған эштәре өсөн бер кем алдында ла яуап бирмәй.

Билдәле булыуынса, Алланың мәрхәмәте төрлө. Донъяла берәүҙәр - һуҡыр, икенселәр күҙле булып тыуа. Муса заманында йәшәгәндәр уның үҙ таяғы менән йылға ағышын туҡтатыуын, Иса заманында йәшәгәндәр уның үлектәрҙе терелтеүен күргән. Был мөғжизәләр хаҡында беҙ ишетеп кенә беләбеҙ. Шул уҡ ваҡытта дин мөғжизәләргә бәйләнмәгән. Һауалы тәкәбберҙәр үҙ бәйғәмбәрҙәре яһаған мөғжизәләрҙе күреп тә, быны сихыр тип раҫлаған.

Дуҫымдың тәржемә ителгән өс китапты: Инжил, Тәүрат һәм Ҡөрьәнде уҡығанына шикләнмәйем. Ошо китаптар уның шикләнеүҙәрен тәрәнәйткән һәм ул тағы ла:

- Ни өсөн Алланың мәрхәмәте бер төрлө түгел? Ни өсөн Алла берәүҙәргә Үҙ мөғжизәләрен күрһәтә, ә икенселәр улар хаҡында ишетеп кенә белә? - тип һораны.

- Мөғжизәләр һәр ваҡыт мәрхәмәт кенә булмай, ғазап та булыуы мөмкин. Алланың күктән һый ебәреүен һораған шәкерттәренә Иса: "Мин һеҙгә һый ебәрәм, ләкин аҙаҡтан кемегеҙ диндән баш тарта, шуға донъяла бер кемгә лә бирмәгән яза ебәрәсәкмен", - тип яуап ҡайтара. Сөнки мөғжизә ебәрелгәндән һуң, уға ышанмаусыларға ҙурыраҡ яза ебәрелә. Мөғжизәне күрмәй, уға ышанғандар бәхетле, ә ышанмағандарға - ҡайғы.

Ҡөрьән - үҙе ышандырырлыҡ дәлил, әгәр уның талаптарын үтәмәһәң, Яуап алыу көнөндә мәрхәмәт түгел, ә ыҙалар ғына аласаҡһың. Ә инде ҡотопта йәшәүсе Ҡөрьәнде белмәүсе эскимостарға килгәндә иһә... Бәлки, уларҙың ғүмер эсендә бер тапҡыр ғына ҡарашын күккә төбәп ялбарыуы дингә эскерһеҙ ышаныу тип ҡабул ителәлер һәм улар ярлыҡаналыр.

Аллаһы Тәғәлә беҙҙең ынтылыштарыбыҙ хаҡында беҙ әсә ҡарынында саҡта уҡ белә. Һәр ауырыуҙың, һәр мәхрүмселектең асылын Алла үҙе генә белә һәм, ни өсөн Алла сусҡаны сусҡа итеп яралтҡан, тип һорағандарға мин, уның күңеле сусҡаларса, шуға шулай яралтҡан, тип кенә әйтә алам. Үҙебеҙ тирәләй күргән бөтә әжерҙәр - ул ғәҙеллек, ләкин һәр нәмәнең асылына төшөнөү, был ғәҙеллектән шаршауҙы алып ташлау - һәр кемдең хәленән килерлек эш түгел.

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## "Аҡыл вирустары" менән идара итеү: аң өсөн көрәш

Мемдарҙың маҡсаты - аҡса эшләүегеҙгә, уңыш ҡаҙаныуығыҙға юл ҡуймау. Бөгөн улар киң таралған һәм күпселекте зарарлаған. Был мемдар дөрөҫ тип ҡабул ителә һәм артабан да уңышлы таратыла, сөнки кешеләргә тормош маҡсаттарына өлгәшә алмауҙарын аҡлау мөмкинлеге бирә. Бына ул көйләнештәр:

- Аҡса - насар.
- Байҙар - насар.
- Ярлы булыу - һәйбәт.
- Әгәр һеҙ йәшәү өсөн көрәшһәгеҙ һәм фиҙаҡәр эшләһәгеҙ, шуны уҡ эшләүсе башҡа яҡшы кешеләр һеҙгә ярҙам итер.
- Уңышһыҙҙар һәм "ваҡ кешеләр" - яҡшы кешеләр; "ҙур етәкселәр" - насар.
- Бай булыу өсөн йәнеңде шайтанға һатырға кәрәк.
- Байҙар - алдаҡсылар, һатлыҡтар һәм уғрылар.
- Ҙур компаниялар етәкселәре, кино йондоҙҙары, профессиональ спортсылар бик күп аҡса ала.
- Байҙарҙың аҡсаһы күп, әммә уларҙың проблемалары ла шул күләмдә. Бай булыу кәрәкмәй.
- Аҡса кешене боҙа.
- Үҙ-үҙеңдән баш тартҡан өсөн Аллаһы Тәғәлә үлгәндән һуң хозурлыҡ тәьмин итер.

Моғайын, һеҙгә алты йәш булғанда ата-әсәләрегеҙ һәм уҡытыусылар әйткән һүҙҙәр бөгөн эшегеҙҙә үрләргә ҡамасаулайҙыр. Бәлки, бынан 15 йыл элек ҡараған телешоу бөгөн килеп никахығыҙ тарҡалыу сәбәбе булып торалыр. Уҡыған китаптарығыҙ һәм ҡараған киноларығыҙ сәләмәтлегегеҙҙе ҡаҡшата һәм ауырыу булырға ярҙам итә, тигәнгә, бәлки, ышанмаҫһығыҙ ҙа. Әммә тап улар миллионлаған кешене зарарлай һәм һеҙ ҙә шуларҙың береһелер. Үҙегеҙҙе уратып алыусыларҙың йоғонтоһона бирелгәнһегеҙ икән, тимәк, һеҙ ҙә мендәрсә мем менән зарарланғанһығыҙ. Шулай уҡ йылғаға бысраҡ һыу ағып төшөп, миллионлаған бактерия, микроб менән зарарлаған кеүек, киң матбуғат сараларының һәм башҡаларҙың (ТВ, радио, киноларҙың, китаптарҙың, гәзит-журналдарҙың, интернеттың, электрон почтаның һ.б.) аңығыҙҙы төрлө вирустар менән тултырыуы мөмкин.

Мемдар биологик вирустар кеүек хәүефле һәм ҡурҡыныс. Компьютер вирустары кеүек үк, улар һеҙҙең аңығыҙҙа йәшәй, үрсей һәм башҡаларға тапшырыла. Бөгөн йәмғиәтте мемдар эпидемияһы баҫып алған. Йәмғиәт беҙҙе биологик һәм компьютер вирустарынан һаҡлау өсөн миллиардлаған долларҙар түгә, әммә күпселек "аң вирустары" тураһында бер ҡасан да бер нәмә лә ишетмәгән дә. Ә улар, моғайын да, иң хәүефлелер, сөнки һеҙ уларҙың йоғонтоһо аҫтында булыуығыҙ һәм зарарланыуығыҙ тураһында бер нәмә лә белмәйһегеҙ.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 8 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 02.50, 03.05 "Мужское/Женское".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Уходящая натура". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Вегас". Сериал (18+).
03.00 Новости.
03.50 "В наше время".
04.35 "Контрольная закупка".

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00, 03.35 "Диалог со смертью. Переговорщики" (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+)
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". "Пропавшие подруги". Детективный сериал. 6-я серия (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Красивая жизнь". Мелодраматический сериал. 12-14-я серии (12+).
23.50 "Национальная сокровищница России".
01.00 "Улицы разбитых фонарей" (16+).
04.25 "Комната смеха".

## "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина" (6+)
18.00 Әлфиә Кәримова (6+)
20.00 "Тәмле" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Азамат һәм Фидан Ғафаровтар (6+)

## БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Новости недели (16+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15 Новости недели (16+).**
**12.00 Диспут-клуб "Пятый угол" (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык" (12+).**
**14.45 "Живое село" (12+).**
**15.15 "Царь горы".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Борсаҡ".**
**16.30 Новости (на русск. яз.) (6+).**
**16.45 "КЛИО".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 04.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**20.45 Хоккей. КХЛ. В перерывах: Новости (на русск. яз.) (12+).**
**23.30 "Время спорта" (6+).**
**24.00 "Дознание" с Ильдаром Исангуловым (16+).**
**00.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**01.00 "Любовный менеджмент" (16+).**
**02,30 Н.Птушкина "Плачу вперед". Спектакль (12+).**
**06.15 "Орнамент".**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 9 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Уходящая натура" (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет".
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.05 "Мужское/Женское".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Уходящая натура". 3-я и 4-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Структура момента" (16+).
01.25 "Вегас". Сериал (18+).
03.00 Новости.
03.55 "В наше время" (12+).

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". "Пощечина". 7-я серия (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Красивая жизнь". 15-17-я серии (12+).
23.50 "Министр на доверии. Дело Сухомлинова". Док. фильм (12+).
00.50 "Улицы разбитых фонарей" (16+).
03.20 "Жизнь взаймы. Ломбарды. Возвращение" (12+).
04.10 "Комната смеха".

## "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Автограф". Ниса һәм Филарит Бакировтар (6+)
18.00 Әлим Ҡәйүмов йырлай (6+)
20.00 "Дарман" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Рәфисә Әсәҙуллина (6+)

## БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Зеркальце".**
**11.00, 16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 06.15 "Орнамент. Новоселье".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Доктор Тырса". Сериал (12+).**
**12.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30 Новости.**
**13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык" (12+).**
**14.45 "Башкорттар".**
**15.15 "Семәр".**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.00 "Ғәләмәт донья".**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 04.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Автограф" (12+).**
**23.30 "Ищу друга на конец света". Худ. фильм. По окончании: Новости (16+).**
**01.45 "Домострой" (12+).**
**02.45 Т.Миннуллин "Счастье с неба". Спектакль (12+).**

## 10 ДЕКАБРЯ СРЕДА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Уходящая натура". Сериал (12+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Уходящая натура". 5-я и 6-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Политика" (16+).
01.25 "Вегас" (18+).
03.00 Новости.
03.50 "В наше время" (12+).

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Битва за соль. Всемирная история". Док. фильм (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Триумф смешной девчонки". Сериал (12+).
12.40 "Сердце звезды". Сериал (12+).
13.35 "Вести-Башкортостан".
14.00 Разговор с Дмитрием Медведевым.
15.30 "Особый случай" (12+).
16.00 "Пока станица спит" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". 8-я серия "Невеста" (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Красивая жизнь". Сериал (12+).
23.50 "Дальневосточный леопард. Борьба за таежный престол".
00.55 "Улицы разбитых фонарей" (16+)
03.30 "Битва за соль. Всемирная история".
04.15 "Комната смеха".

## "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар". Фәнисә Бәҙретдинова (6+)
15.00 Фәрит Бикбулатов. Концерт (6+)
21.00 "Кис ултырып". Лилиә Биктимерова, Фәдис Ғәниев (6+)

## БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 16.15, 06.45 "Современник" (6+).**
**11.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30 Новости.**
**11.45 "Доктор Тырса". Сериал (16+).**
**12.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**12.45, 04.30 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бэхетнэмэ".**
**13.30, 14.30, 18.30, 24.00 Новости (на башк. яз.).**
**13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык".**
**14.45 "Тәмле" (12+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.45 "Шатлык йыры".**
**16.00 "Борсаҡ".**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.15 Позывной "Барс" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 04.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00 "Полезные новости".**
**21.20 Хоккей. КХЛ. В перерывах: Новости (на русск. яз.).**
**00.30 "Багровый цвет снегопада" (16+).**
**02.30 Спектакль (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 11 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Уходящая натура". Сериал (16+)
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Уходящая натура". Сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "На ночь глядя"(16+).
01.15 "Вегас". Сериал (18+).
02.45, 03.05 "Мужское/женское" (16+).
03.00 Новости.
03.45 "В наше время".
04.30 "Контрольная закупка" (12+).

## РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+)
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Любовь и роман". Мелодрама (12+).
22.55 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.35 "Операция "REX". Фильм А.Мамонтова (16+).
01.35 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+).
03.15 "Русская Аляска. Продано! Тайна сделки" (12+).
04.05 "Комната смеха".

## "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Куш беләҙек" (6+)
18.00 Миңзифа Исҡужина йырлай (6+)
21.00 "Кис ултырып". Әлфиә Әхмәтйәнова (6+)

## БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Доктор Тырса". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Башҡорт йыры-2014" (12+).**
**14.45 "Үткән ғүмер" (12+).**
**15.15 "Шәп арба".**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.00 "Семәр".**
**16.45 "Алтын тирмә".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 04.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.55 Хоккей. ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Липецк" (Липецк). Трансляция из Нефтекамска.**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 "ФК "Уфа" - наша команда!"**
**23.30 "Помпеи". Худ. фильм. По окончании: Новости (16+).**
**01.45 "Спина".**
**02.30 И.Юмагулов. "Нэркэс". Спектакль (12+).**
**05.30 "Мелодии души" (12+).**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 12 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Уходящая натура". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет".
16.00 "Мужское/Женское".
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.40 "Вечерний Ургант".
23.35 "Голос". Муз. конкурс (12+).
01.50 "Как Чарли Чаплин стал бродягой". Док. фильм (16+).
03.05 "Большой каньон". Криминальная драма (16+).

## РОССИЯ 1
05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "От всей души".
10.05 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Петросян-шоу" (16+).
23.15 "Специальный корреспондент" (16+).
00.50 "Обратный путь". Мелодрама (16+).
02.50 "Горячая десятка" (12+).
03.45 "1944. Битва за Крым" (12+).

## "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома" (0+)
20.00 "Рампа" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Венера Рәхмәтуллина, Рушан Биктимеров (6+)

## БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 17.45, 06.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30, 22.30, 02.00 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Доктор Тырса". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 01.15 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**12.45, 04.15 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бэхетнэмэ".**
**13.45 "Учу башкирский язык".**
**14.45 "Автограф" (6+).**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.30 "Гора новостей" (6+).**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.00 "Байтус" (6+).**
**16.45 ФК "Уфа" - наша команда! (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости экономики (16+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00, 06.30 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "История признания" (6+).**
**22.00 Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**23.15 Хоккей. КХЛ.**
**02.30 Т.Гарипова. "Песнь во сне". Спектакль (12+).**
**04.30 "Странный город" (12+).**
**05.30 "Мелодии души" (12+).**

## 13 ДЕКАБРЯ СУББОТА
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Зубная фея". Худ. фильм.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Мила Йовович. Русская душой". Док. фильм (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Нырнуть в небо" (12+).
14.15 "Жизнь - не сказка" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Выкуп". Худ. фильм.
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Ледниковый период".
21.00 "Время".
21.30 "Голос" (16+).
23.45 "Что? Где? Когда?"
00.50 "Ультиматум Борна". Боевик (12+).
03.20 "Сестрички Бэнгер". Комедия (16+).
04.55 "Контрольная закупка" (12+).

## РОССИЯ 1
04.45 "За витриной универмага". Худ. фильм.
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.25 "Вести-Башкортостан".
11.30 "Честный детектив".
12.00, 14.30 "Под прицелом любви". Мелодрама (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.45 "Это смешно" (12+).
17.40 "В жизни раз бывает 60!" Юбилейный концерт Игоря Крутого.
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Когда его совсем не ждешь". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.35 "Формула счастья". Худ. фильм (16+).
02.30 "Неоконченный урок". Худ. фильм (16+).
04.00 "Планета собак".
04.30 "Комната смеха".

## "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Уйна, ҡурай". Концерт (6+)
19.00 "Форрест Гамп". Фильм (6+)
21.00 "Кис ултырып". Гөлсинә Мөхәмәҙиева (6+)

## БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Индюки: назад в будущее 3D". Анимационный фильм.**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (12+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт".**
**12.30 Новости. Специальный репортаж (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" (12+).**
**13.30 "Орнамент" (6+).**
**13.45, 04.00 "Весело живем" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**16.00 "Баик-2014" (6+).**
**17.00 "Автограф" (12+).**
**17.30 "Хазина" (6+).**
**18.00 "Башкорттар".**
**18.25 Волейбол. "Урал" (Уфа) - "Факел" (Новый Уренгой). Прямая трансляция (6+).**
**20.30 "Живое село" (12+).**
**21.00 "Бизнес-сфера" (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**22.00 "Попкорм" (16+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" представляет..." (12+).**
**23.45 "Странный город" (12+).**
**00.45, 05.15 "Дикая штучка". Худ. фильм (12+).**
**02.15 Г.Шафиков. "Урал-батыр". Спектакль (12+).**
**04.15 "По следу снежного человека". Док. фильм (16+).**
**06.45 "Замандаш" (6+).**

## 14 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
## ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Выкуп". Драма (12+).
08.10 "Армейский магазин".
08.45 "Смешарики". "Пин-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора".
13.10 "Черно-белое".
14.15 "Жестокий романс". Драма (12+)
17.00 "Жестокий романс. А напоследок я скажу..." (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Большие гонки" (16+).
20.00 "Толстой. Воскресенье" (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Нерассказанная история США". Док. фильм (16+).
23.40 "Великое ограбление поезда". Сериал (16+).
01.30 "Встреча в Кируне". Худ. фильм (16+).
03.15 "В наше время" (12+).
04.15 "Контрольная закупка".

## РОССИЯ 1
05.15 "Слово для защиты".
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Кулинарная звезда" (12+).
12.10 "Домработница". Мелодрама (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Смеяться разрешается".
16.10 "Если ты не со мной". Мелодраматический сериал (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
23.50 "Я тебя никогда не забуду". Мелодрама (12+).
01.50 "Мой нежно любимый детектив". Худ. фильм (12+).
03.25 "Моя планета" представляет: "Одна на планете. Курилы. Что-то хорошее".
04.10 "Комната смеха".

## "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Римма Амангилдина. Концерт (6+)
16.00 "Әбйәлил". Спектакль (6+)
20.00 "Рампа" (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Башҡорт йыры"

## БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 "Йома".**
**08.30 "Остров Блэкмор".**
**10.00 "Физ-ра".**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ал да гол" (6+).**
**11.00 "Шәп арба" (6+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Сулпылар".**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели.**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню".**
**15.15 "Ни с кем не сравнимая".**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Автограф" (12+).**
**17.00 "Историческая среда".**
**17.30 "Наука 102" (12+).**
**18.00 "История признания" (6+).**
**18.15 "Орнамент".**
**18.30 "Весело живем" (12+).**
**18.45, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**19.00 "Любимое дело" (12+).**
**19.30 "Бизнес-обзор" (12+).**
**19.45 "Диспут-клуб "Пятый угол" (16+)**
**20.30 Новости недели (12+).**
**21.15 Хоккей. КХЛ (16+).**
**24.00 "Баик" (12+).**
**01.00 "Свидание с джазом" (16+).**
**01.30 "Люди, которые обнимают". Худ. фильм (12+).**
**03.00 Р.Киплинг. "Мы с тобой одной крови". Спектакль (12+).**
**04.45 "Отцы поневоле" (12+).**
**05.45 "Попкорм".**
**06.15 "Здоровое решение" (12+).**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# МИЛЛИ ФИЛЬМДАР МЕНӘН...

## донъяны ла яуларға була

**Өфөлә Мәҙәниәт йылының иң сағыу сараһы - "Аҡбуҙат" Халыҡ-ара милли һәм этник кинофестивале тамамланды. Мәҙәниәт өлкәһендәге Президент гранты ярҙамында тәүге тапҡыр ойошторолған был сара 11 илдән - Куба, Иран, Ираҡ, Германия, Болгария, Беларусь, Әзербайжан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Латвиянан шулай уҡ Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән: Мәскәү, Санкт-Петербург, Новосибирск, Екатеринбург ҡалаларынан, Саха (Якутия), Бүрәт, Татарстан, Төньяҡ Осетия-Алания республикаларынан кино сәнғәте эшмәкәрҙәрен йыйҙы.**



Баһалама рәйесе, кинорежиссер, кинооператор, киносценарист, Тажик республикаһының халыҡ артисы Давлат Худоназаровтың хаҡлы билдәләүенсә, мәҙәниәттә ҙур һәм бәләкәй халыҡтар юҡ. Бары тик уларға үҫеш өсөн ниндәйҙер шарттар тыуыуы ғына мөһим. Ҡасандыр совет заманында барыбыҙ ҙа уртаҡ идеология менән йәшәһәк, һуңғы егерме биш йыл самаһы милли кадрҙар әҙерләү менән мәшғүл булдыҡ, бөгөн иһә глобалләшеү үҙенең ҡанундарын урынлаштырып маташа. Әммә тап ошо мәлдә яңы ҡиммәттәр өҫкә ҡалҡып сыға, шуларҙың береһе булып этник үҙенсәлектәр тора. Донъя мәҙәниәте этностарға ҡарата ҙур ҡыҙыҡһыныу белдерә һәм башҡа сәнғәт төрҙәренә ҡарағанда мода һәм яңы йүнәлештәр тәьҫирәк тиҙерәк бирелеп барған кинематографияла был асыҡ сағылыш таба. Бөгөн кино аша халҡыңды башҡаларға танытыу мөмкинлеге шул тиклем ҙур. Ошоно аңлағанға күрә тыуа ла инде фестиваль үткәреү идеяһы.

Ойоштороусылар тарафынан фестивалгә һайлап алынған фильмдарҙы ҡарағандан һуң, төрлө халыҡтарҙың ҡыҙыҡһыныуҙары ла, фильмдарҙа күтәрелгән проблемалар ҙа, кино төшөрөүҙә осраған ҡаршылыҡтар ҙа уртаҡ икәнлеге төҫмөрләнде. Ғәҙәттә, милли кино фестивалдәрендәге эштәрҙә кеше яҙмыштарына ҡарағанда ниндәйҙер экзотика өҫтөнлөк алыусан. Был йәһәттән "Аҡбуҙат" милли һәм этник кино фестивале, беренсе тапҡыр үткәрелеүенә ҡарамаҫтан, яҡшы статуслы фильмдар тәҡдим итә алыуы менән айырылып торҙо. "Степняк" фильмының режиссеры Шамил Алиев әйтмешләй, милли кинола халыҡтың көнкүреше генә түгел, хатта тарихтан алынған берәй сағыу ваҡиға, миф, легенда, риүәйәт тә режиссерҙың әйтергә теләгән фекерен сағылдырыуҙа ярҙамсы ғына булырға тейеш. Был кинола, мәсәлән, Тәүраттан алынған тарих кешелектең антропологик һәләкәте тураһында һөйләй. "Тап глобалләшеү шарттарында үҙеңдең мәҙәниәтеңде, йолаларыңды һаҡлау кәрәк. Әгәр ҙә һин ошо ҡаршылыҡтарҙы еңә алаһың икән - артабан йәшәү хоҡуғына эйә булаһың, юҡ икән, халыҡтар һәм мәҙәниәттәр араһында сиктәр юйыла. Шул саҡта кеше ниндәйҙер биомассаға әүерелә, ә ул бер кемдә лә ҡыҙыҡһыныу уята алмаясаҡ", - ти Әзербайжандан килгән режиссер. Тамашасылар иғтибарын яулауға өлгәшкән Владимир Тумаевтың "Белый ягель" (Мәскәү) фильмының да себер халыҡтарының этник мәҙәниәтен, йолаларын күрһәтеүҙән юғарыраҡ бурысы бар - унда этик һәм этник һәләкәттән ҡотолоу юлдары эҙләнә. Үҙ нәҫеләнде дауам итеү, тимәк, халҡыңдың киләсәген хәстәрләү маҡсатынан да изгерәк юл юҡ, һәр хәлдә, ненецтарҙы ғына түгел, башҡа халыҡтарҙы ла үҙ йәшәү рәүешенән ситкә тайпылмау ғына милләт итеп һаҡлап ҡаласаҡ. Шулай ҙа фильмдарҙа ниндәй генә ваҡиға һүрәтләнмәһен, милләт йәшәгән ер, уның рухы мотлаҡ үҙ эҙен һала. Мәсәлән, бүрәт режиссеры Солбон Лыгденовтың "Булаг" фильмында күрһәтелгән эскелектән бөтөп барған ауыл, үкенескә күрә, бер кем өсөн дә яңылыҡ түгел. Әммә уның бүрәт вариантында ер һәм ҡан мифологияһының үҙенең төҫтәре бар, унда күк тә, ел дә, рухи сығанаҡтар ҙа башҡараҡ.

"Дөйөм кешелек ҡиммәттәре сиктәрендә этник кино мотлаҡ булырға тейеш. Ваҡытында бөтөн сюжеттарҙы ла яҙып сыҡҡан Шекспирҙы барыһы ла үҙенеке тип иҫәпләгән кеүек, этник кинола барған ваҡиғалар ҙа һәр беребеҙ өсөн яҡын. Беҙ барыбыҙ ҙа оҡшағанбыҙ, ике ҡулыбыҙ, ике аяғыбыҙ бар, бары тик һәр кемде халҡына хас һыҙаттар, үҙенсәлектәр айырып тора", - тигәйне әңгәмәләшкән саҡта "Дойду" фильмында (Саха (Якутия) уйнаған актер Дмитрий Трофимов. Тап ошондай фестивалдәр мәлендә башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәтен яҡшыраҡ аңларға мөмкин дә инде. "Был байрам Рәсәй һәм ҡасандыр дөйөм туған илебеҙҙең бер өлөшө булған халыҡтар араһында яңы күперҙәр һалып, беҙ бер-беребеҙ менән яңынан бәйләнештәр булдырһаҡ ине", - тигән теләген Давлат Худоназаров та белдерҙе.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

*ХОККЕЙ*

# УЙЫНДАР ҺӨҘӨМТӘЛЕ

**Юлаевсылар 28 ноябрҙә Омскиҙа урындағы"Авангард" командаһы менән осрашыуға етди әҙерләнеп килеүҙәрен уйындың тәүге минуттарында уҡ күрһәтте. Антти Пильстремдың голынан һуң хужаларҙың тренерҙар составы хатта голкиперҙы алыштырҙы.**

Тәүге осорҙа юлаевсылар тағы ла бер-нисә һөжүм эшләне, ләкин уңышҡа өлгәшә алманы. Хужалар ҙа беренсе егерме минутта Владимир Сохатский ҡапҡаһын аса алманы. Икенсе осорҙо "Авангард" ҡыҙыу башланы һәм иҫәпте тигеҙләү йәйин тапты. Ә осор аҙағында, юлаевсыларҙың әҙселектә ҡалыуынан файҙаланып, тағы бер гол индерҙе. Өсөнсө осор бер командаға ла мәрәй килтермәне. Уйын иҫәбе хужалар файҙаһына - 2:1.

Ҡыштың беренсе көнөндә "Салауат Юлаев" үҙ боҙонда "Барыс"ты ҡабул итте. Юлаевсылар менән осрашыуға тиклем Астана уйынсылары алты тапҡыр рәттән еңелдә, шуға күрә уларҙың был матчты тик еңеү менән генә тамамларға ынтылыуына шик булманы. Тик был юлы ла "Барыс"тар уңышҡа өлгәшә алманы. Көсөргәнешле матч юлаевсыларҙың еңеүе (3:2) менән тамамланды.

Ағымдағы йылдың һуңғы айында юлаевсыларҙың Өфөлә уҙғарасаҡ уйындар һаны күп түгел. Шуға күрә 3 декабрь "Адмирал" менән булған уйында хоккей яратыусыларҙың күп булыуы аптыратманы. Етмәһә, был матчта Өфө хоккейы тәрбиәләнеүселәре, ағалы-ҡустылы Дмитрий һәм Константин Макаровтарҙың бер-береһенә ҡаршы сығыуҙары ла уйынға интрига өҫтәне. Осрашыу тыныс темпта башланһа ла, сәғәт телдәре минуттарҙы күберәк һанаған һайын, уйын да ҡыҙҙы. Матчтағы беренсе голды юлаевсылар индерҙе һәм оҙаҡ та үтмәй, иҫәпте арттырыуға өлгәште. Икенсе осорҙа юлаевсылар штрафлы ташлау (штрафной бросок) эләктерҙе. Был мөмкинлекте ҡунаҡтар ҡулдан ысҡындырманы - Владислав Ушенин "Салауат Юлаев" ҡапҡаһына гол индерҙе. Өсөнсө осорҙа ике яҡ та мәрәй эшләй алманы. Шулай итеп, "йәшел машина" ҡунаҡтарға еңелеү "бүләк" итте. Уйын һөҙөмтәһе - 2:1.

Киләһе дүрт уйынды юлаевсылар ситтә уҙғарасаҡ. Яратҡан командабыҙға еңеүҙәр теләйбеҙ.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Декабрь (Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 8 (16) дүшәмбе | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 9 (17) шишәмбе | 7:59 | 9:29 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 10 (18) шаршамбы | 8:00 | 9:30 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 11 (19) кесе йома | 8:01 | 9:31 | 13:30 | 15:17 | 16:47 | 18:17 |
| 12 (20) йома | 8:02 | 9:32 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 13 (21) шәмбе | 8:03 | 9:33 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |
| 14 (22) йәкшәмбе | 8:04 | 9:34 | 13:30 | 15:16 | 16:46 | 18:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 декабрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия

**7 декабрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**9 декабрь "Әбейүшкә@эт.тушка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия

**10 декабрь "Ҡыҙҙар моңо - моно халҡымдың"** поэтик-музыкаль тамаша

**11 декабрь "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим)

**12 декабрь "Бирнәһеҙ ҡыҙ"** (А. Островский), драма

**13 декабрь "Шәүрәкәй"** (М. Буранғолов), музыкаль комедия

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 декабрь "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00

**9 декабрь "Автобус"** (С. Стратиев), комедия

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**7 декабрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия

**10 декабрь "Тиле йәшлек"** (И. Абдуллин), романтик комедия

**11 декабрь "Һатам! Иремде һатам!.."** (Н. Ғәйетбай), комедия

**12 декабрь "Ай булмаһа, йондоҙ бар..."** (Т. Миңнуллин), драма

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МИЛЛИ ФИЛЬМДАР МЕНӘН...

## донъяны ла яуларға була



(Башы 15-се биттә).

Фестивалдә тулы метражлы художестволы фильмдар барыһын да хайран итте. Ниндәй милләт вәкиле булыуына ҡарамаҫтан, һәр кем унда үҙ халҡының тарихын күреп тетрәнгәндер. Ҡаҙағстандың "Жаужурек мын бала", Ҡырғыҙстандың "Курманджан датка" тарихи фильмдары матур йөҙлө актерҙары, үҙенсәлекле сценарийы менән дә хәтерҙә ҡалды. "Курманджан датка" фильмы "Халыҡ тарихын сағыу сағылдырғаны өсөн" һәм оператор эше өсөн Ғилван Әмиров исемендәге махсус призларға лайыҡ булды. Ҡырғыҙ режиссеры Руслан Акундың "Перегон" фильмы шулай уҡ иң яҡшы оператор эше, ә Тынай Ибраһимовтың "Тринадцатый" фильмы "Документаль фильм өсөн иң яҡшы сценарий" номинацияһында билдәләнде. Ни генә тиһәң дә, милли кинематографияның кимәле тулы метражлы фильмдар менән үлсәнә. Был жанрға тәҡдим итеү өсөн бер генә башҡорт фильмы булмауынан сығып, дөйөм башҡорт киноһы тураһында һүҙ йөрөтөү дөрөҫ түгел, шулай ҙа икенсе фестивалгә тиклем был бушлыҡты тултырыр әмәл табылһын ине. "Курманджан датка" фильмының сценарий авторы Бакытбек Турдубаев әйтеүенсә, Ҡырғыҙстанда йылына төрлө жанрҙарҙа 200-гә яҡын милли кино донъя күрә. Шуның өсөн дә урындағы прокатта ҡырғыҙ фильмдары өҫтөнлөк итә, Голливуд төшөргән киноға унда бераү ҙә йөрөмәй икән. Бынан тыш, уларҙың кино әҫәрҙәре Америка экрандарында бара, әлеге көндә Рәсәй, анығыраҡ әйткәндә, Саха (Якутия) менән һөйләшеүҙәр алып барыла. Уларҙа бит совет осоронда уҡ кино төшөрөү эше яйға һалынғайны, бөгөн дә бар сығымдарҙы дәүләт үҙ өҫтөнә ала, тип уйлаусылар шулай уҡ хаталанасаҡ. Советтар иле тарҡалғандан һуң, дәүләт тулыһынса сығымдарын ҡаплаған беренсе фильм - ул "Курманджан датка". Ә ҡалған коммерция фильмдары өсөн режиссерҙар үҙҙәре аҡса таба. Иң ҡыҙығы, унда донъя күргән фильмдарҙың 90 процентын йәштәр төшөрә, тимәк, юлдарын табып, милли кинематографияға йәш быуынды ла ылыҡтыра беләләр.

Хәйер, килгән ҡунаҡтарҙың һәр береһе үҙ дәүләттәрендә фильмдарҙың күпләп төшөрөлөүе тураһында әйтте. Иранда ғына, мәҫәлән, йылына 600 фильм төшөрөлә, белгестәр билдәләүенсә, уларҙың һәр фильмы тамашасыны шул тиклем ылыҡтыра. Был фестивалдә лә Наргиз Абиярҙың "Зеркальные отражения" фильмында төп ролде башҡарған Гелари Аббасиға "Йорт усағын һаҡлаусы образы өсөн" махсус приз тапшырылды, "Тамашасы һөйөүе" призына ла ирандар лайыҡ булды. Фестивалгә тәҡдим ителгән башҡорт фильмдары араһынан Андрей Носковтың "Личное дело" фильмы "Ҡыҫҡа метражлы фильмда иң яҡшы сценарий", ә Вилүрә Иҫәндәүләтованың "Мөрйәләрҙән күтәрелә төтөн, бер үк һүрелмәһен" фильмы "Документаль фильмда иң яҡшы герой" номинацияһында еңеү яуланы. "Аҡбуҙат" милли һәм этник кино фестиваленең Гран-приһы Татьяна Скабардтың "Вечный странник" документаль фильмына тапшырылды. Уның төп геройы - актер, рәссам, яҙыусы, режиссер Шәфҡәт Абдусәләмов фестивалгә махсус ҡунаҡ итеп саҡырылғайны. Был фильмда ул тап рәссам, ижадсы булараҡ сығыш яһай.

Һәм тағы ла. Беҙ, үҙ еребеҙгә төрлө милләт вәкилдәрен һыйындырып йәшәүселәр булараҡ, толерантлыҡ тураһында күп һөйләйбеҙ. Башҡа халыҡтарҙың, милләттәрҙең, диндәрҙең, мәҙәниәттәрҙең төрлө үҙенсәлектәрен аңлап, ихласлыҡ менән ҡабул итеү өсөн үҙеңдең милләтеңә ышанысыңдың ныҡлығы, башҡалар араһында үҙеңдең тотҡан урыныңды дөрөҫ билдәләү, алдынғы идеяларҙы ҡабул итеүгә асыҡ булыу күпкә мөһимерәк - ябай тамашасы өсөн фестивалдең һабағы һәм төп һығымтаһы ошо булғандыр, моғайын. "Аҡбуҙат"ты тантаналы асыу сараһында уҡ ҡунаҡтар башҡорт халҡына, артистарыбыҙға, милли кейемдәребеҙгә һоҡланыуын сәхнәнән әйтеп, беҙгә ихласлығын белдерҙе. Өфөнөң ике ҙур залында - "Родина" кинотеатрында һәм Актерҙар йортонда конкурс программаһына ингән фильмдарҙы ҡарарға иҫәпле генә һәм бер үк кешеләрҙең йөрөүе иһә беҙҙең уларға ҡарата яуабыбыҙ булды, тип аңларға кәрәктер инде. Германияла ижад итеүсе яҡташыбыҙ Нәсүр Йөрөшбаев, "Атайымдың тауышы" документаль фильмын бер үҙем ҡараным, тигәндә, тамашасыға үпкә һүҙҙәрен дә белдермәне, тик ижадсы өсөн үҙенең артынан эйәрерҙәй халҡы булыуы ни тиклем мөһим икәненә генә ишараланы. Әллә беҙгә һаман да үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ҡайнау, йәки башҡорт киноһы юҡ ул, тип әйтеү күпкә уңайлыраҡмы икән?

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быға тиклем республикала кинофестиваль үткәреү тәжрибәһе булмаһа ла, тәүге фестиваль бик юғары кимәлдә үтте. Уның сиктәрендә "Башҡортостан" киностудияһының кино төшөрөү павильонын асыу, билдәле шәхестәр менән ижади осрашыуҙар үткәреү шулай уҡ байрамға сағыу биҙәктәр өҫтәне. Сарала СССР-ҙа үткәрелгән бөтөн ядро ҡоралдары һынауҙарын, шулай уҡ Юрий Гагаринды төшөрөүсе кинооператор, яҡташыбыҙ Мәхмүт Рафиҡовҡа Салауат Юлаев ордены тапшырылды. Һәр хәлдә, ойоштороусыларҙың, "Аҡбуҙат" Халыҡ-ара кинофестивале башҡорт киноһы үҫеше өсөн ҙур этәргес көс булыр, тигән ышанысы аҡланһын ине. Һәм мотлаҡ был фестивалдең дауамы булыуын теләйек. Хөкүмәттең вице-премьер-министры Салауат Сәғитов әйтеүенсә, Аҡбуҙат - ҡанатлы ат. Уның ҡанаттары үҫер әле!**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# БЕЛГӘН ЙӨҪӨҠҠА, ОНОТОП БАРАБЫҘ...

**Беҙҙең Салауат районында йәшәгән башҡорттар һөйләшендә урын алған ҡайһы бер һүҙҙәр:**

**Олоғара бер эш (бер һүҙ) итеп һөйҙәй** - бик етди, яуаплы эш кеүек итеп һөйләй

**Һерәндәмә, һерәндәргә, тиһәң, һине ҡуш** - гел күренергә, иғтибар үҙәгендә йөрөргә атлығып торған кешегә киҫәтеү һүҙе

**Утыҡҡан** - йәш мал, бәпкә тураһында, үҫә башлаһа, шулай тиҙәр

**Наҡыҫ** - аҙ миҡдарҙа булыу (аҡса аҙайһа); күлдәк ҡыҫҡа булһа, шулай тиҙәр

**Орғасы** - инә мал (һарыҡ бәрәсе)

**Бәрәкәй** - һарыҡ, кәзә бәрәсе

**Ҡолоҡай** - аттың ҡолоно

**Ҡытай (тағыу)** - эре гәрәбәнән йәиһә башҡа таштан епкә теҙелеп эшләнгән муйынса

**Алъябыу** - алъяпҡыс

**Элгәре йыл** - ике йыл элек, өсөнсө йыл

**Элгәре көн (өлгәрегөн)** - ике көн элек, өсөнсө көн

**Темекҫенеп йөрөү** - нимәлер табыу ниәте менән, соҡсоноп, эҙләнеп, йөрөүсе кеше хаҡында, алғыш һүҙ түгел инде.

**Миңһылыу АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӘЙЕЛ АҘМАЙЫНСА...

## башҡа бәлә килмәҫ

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер дәрүиш ил ҡыҙырып йөрөй торғас, ҙур булмаған ҡалаға килеп юлыға. Ҡалаға барып инһә, уның урамдарында бер ниндәй хәрәкәт тә, кешеләр ҙә юҡ, ти. Берәйһен осратмаммы, тип, байтаҡ йөрөй урам буйлап. Ниһайәт, бер урам сатында зәғиф кенә бер кеше уның ҡаршыһына сыға һәм беренсе башлап һүҙ ҡуша: "Хөрмәтле дәрүиш, беҙгә һинең кәңәшең кәрәк. Беҙҙең ҡаланан йыраҡ түгел урында Ер йөҙөндәге барлыҡ йән эйәләренең кәүҙәләнеше булған Бөйөк Йыртҡыс йәшәй. Бер йыл элек ул беҙҙең ҡалаға килеп, көн һайын бер кешене уға ашарға биреп тороуҙы талап итте. Баш тартһаҡ, ул беҙҙең барыбыҙҙы бер юлы юҡҡа сығарасаҡ. Тағы беҙгә шундай шарт та ҡуйҙы: кешеләр араһынан кемдер килеп, уның ысын исемен атай алһа, ул беҙҙе тыныслыҡта ҡалдырасаҡ. Шул саҡта беҙҙең аранан иң зыялы аҡһаҡалдар берәм-берәм уға барып, уның ысын исемен юрарға маташты. Әммә әлегәсә был шартты берәү ҙә үтәй алғаны юҡ. Әйтсе бер кәңәшеңде?"**

**Дәрүиш ергә ултыра ла, уйға бата. Теге зәғиф кеше лә уның эргәһендә өнһөҙ генә ултыра. Шулай төнө буйы ултырып сығалар. Иртән дәрүиш: "Мин Бөйөк Йыртҡыс эргәһенә барам!" - ти. Ләкин зәғиф кеше уға ҡаршы төшә: "Юҡ, дәрүиш, һин беҙҙең һуңғы өмөтөбөҙ. Һин дә һәләк булһаң, беҙ барыбыҙ ҙа һәләк буласаҡбыҙ". "Әгәр ҙә мин кире әйләнеп килмәһәм, уға әйтелә торған яуапты белеп ҡуй: Бөйөк Йыртҡыс ерҙәге барлыҡ яуызлыҡты үҙендә туплаусының исемен йөрөтә. Һин уны үҙең дә белә алаһың..."- ти дәрүиш һәм юлға сыға.**

**Бына дәрүиш Бөйөк Йыртҡыс янына барып етә һәм уға шулай тип мөрәжәғәт итә: "Һин ҡалай күпйөҙлөһөң: һиндә бөркөттөң томшоғо, йыландың ағыуы, балыҡтың йөҙгөстәре, аждаһаның ҡанаты, юлбарыҫтың яңаҡтары, бер үк ваҡытта бәрәстәрҙең сафлығы..." "Минең исемемде ата, шул саҡта мин һине имен-аман ебәрермен..." тип ярһыған Бөйөк Йыртҡыс. "Мин һинең исемеңде атап ҡына ҡалмайым, һиңә тағы бер серҙе лә асам, - тигән дәрүиш. - Һин бит үҙ исемеңде үҙең дә белмәйһең. Шуға ла һин кешеләр янына килгәнһең дә инде. Ә һинең исемең - Кеше!" Шул саҡта Бөйөк Йыртҡыс ҡалтыранып, меңәрләгән йәнлектәр һәм ҡоштар тауышы менән үкереп ебәрә һәм күҙ алдында тарҡалып төшөп, бик күп йән эйәләре булып тирә-яҡҡа һибелә. Бүре һәм айыуҙар, өкө һәм сиңерткәләр, аттар һәм гөбөргәйелдәр - ҡыҫҡаһы, ер йөҙөндәге бар йәнлектәр, ҡоштар, бөжәктәр шул урында бушлыҡ ҡалдырып йүгереп, шыуышып, осоп китә.**

**Дәрүиш ҡалаға әйләнеп килә. Теге зәғиф кеше уның ҡаршыһына шатланып килеп сыға. "Хәҙер инде был юлдан киткән кешеләр юғалмай кире ҡайтасаҡ", - ти уға дәрүиш. "Әлбиттә, дәрүиш!" - ти зәғиф кеше. Шунан: "Мин дә Бөйөк Йыртҡыстың исемен юрай алдым бит!" - тип өҫтәп ҡуя. "Кем һуң уның исеме?" - тип һорай дәрүиш. "Беҙҙең батшаның вариҫы!" - ти зәғиф кеше ғорурланып. "Юҡ, Бөйөк Йыртҡыстың исеме - Кеше. Кешелеклелеге булмаған кеше..." - ти дәрүиш".**

1 582218 911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4700
Заказ 4424